ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31-6 июль-август (майай-урағай)

2021

№31 (969)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Урағай йондоҙҙары



2

Генерал Шайморатов - башҡорт батырлығы символы



8-9

Мәрәкәләшеүҙәр һәм... уйынлы-ысынлы һөйләшеүҙәр насармы?



11

Тимер юл һөнәрмәне



15

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалғанығыҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә хәҙер 2022 йылдың беренсе яртыһы тураһында ваҡытынан алда хәстәрлек күреп, июль-август айҙарында "Киске Өфө"гә 6 айға - 692 һум 94 тингә, 3 айға - 346 һум 47 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Эшҡыуарлыҡ, фермерлыҡ кеүек шөғөл-һөнәрҙәрҙе үҙләштереү юлында ниндәй ҡаршылыҡтар, ҡатмарлыҡтар бар?

***Урал КИНЙӘБАЕВ, Көйөргәҙе районы, фермер:*** Билдәле булыуынса, Рәсәй дәүләте һуңғы осорҙа сит илдәргә миллионлаған тонна иген һата башланы. Ауыл хужалығы өлкәһендә хәбәрҙар булмағандар был яңылыҡты, яңылыш ишетәм, тип ҡабул итергә лә мөмкин. Быға илдең ауыл хужалығы продукцияһын етештереү ҡеүәте үҫешә барыуы сәбәпсе икәнен ошо тармаҡта эшләүселәр яҡшы аңлай.

Хәҙер уңыш йыйыу осоронда баҫыуҙарҙа, элекке кеүек, көнөтөнө комбайн тауышы ишетелмәй, ауыл урамдарын саң борҡотоп, эреле-ваҡлы машиналар инләмәй. Һауа торошо булышлыҡ итһә, ҡеүәтле техника яҙғы сәсеү эштәрен ҡыҫҡа арауыҡта башҡарып та ҡуя. Көҙгө уңыш йыйыу осоро ла әллә ни мәшәҡәтһеҙ генә тамамлана.

Яңыраҡ үҙәк телевидениеның бер каналынан шундай мәғлүмәт бирҙеләр: илдә етештерелгән игендең 90 проценты егерме ете мең фермер иңенә төшә икән, ә ҡалғаны - эре хужалыҡтар өлөшө. Быға бик ышанғы ла килмәй, әлбиттә, ләкин статистика тигән әйбер ҙә бар.

Ә бит уйлап ҡараһаң беҙ, фермерҙар, әллә ни ҙур уңышҡа өлгәшәбеҙ ҙә кеүек түгел. Ҙур хужалыҡтарҙың ашлама һатып алырға ла, яңы техника менән ҡоралланырға ла, тейешле белгестәр саҡырырға ла мөмкинлеге бар. Ә беҙ иһә, үҙ сиратыбыҙҙа, үҙешмәкәрҙәр генә кеүекбеҙ. Бөтә нәмәлә лә тик үҙ көсөбөҙгә генә ышанабыҙ.

Мин тракторсы һөнәренә совет осоронда уҡыным, беҙгә техника төҙөлөшөнән тыш, агрономияны ла, ветеринарияны ла уҡыттылар. "Былары миңә нимәгә инде?" - тип ултыра торғайным дәрестәрҙә. Совхозыбыҙ тарҡалғас, арзаныраҡ хаҡҡа төүҙә ватыҡ трактор һатып алдым, ремонтланым, йәнәһе, йорт тирәһендә кәрәге сығыр...

Эйе, тракторҙың да, теләртеләмәҫ кенә уҡыған агрономияның да, ветеринарияның да кәрәге бик тейҙе. Һыйыр малын арттыра барып, күпләп аҫрай башланыҡ. Һыйырҙарҙы һауып, һөт-ҡаймаҡты Мәләүезгә алып барып һаттыҡ. Мал аҙығы һалам-бесәндән генә тормай бит, пай ерҙәребеҙгә фуражға иген үҫтерә башланыҡ. Бер аҙҙан ҡатыным менән кәңәшләшеп, фермер хужалығы ойошторорға ҡарар иттек. Бына ошонда кәрәк булды ла инде училищела агрономия, ветеринариянан алған белем. Шулай, шатлана-ҡыуана, һәүетемсә генә эшләп йөрөһәк, был шатлығыбыҙ оҙаҡҡа барманы - техник прогресс айлап түгел, көнләп алға бара. Хәҙер бизнесыбыҙ үҙе көндән-көн белемде камиллаштырыуҙы талап итә.

Иген үҫтереү технологияһы йыл һайын үҙгәреп тора. Ярар, район етәкселеге быны яҡшы аңлай, республиканың Ауыл хужалығы министрлығы белгестәре, аграр университет ғалимдары менән яҙғы баҫыу эштәре башланғансы уҡ төрлө семинарҙар, кәңәшмәләр ойошторып тора. Әгәр ҡышын уларҙа ҡатнашҡандар күп булһа, көндәр йылына башлау менән рәттәр һирәгәйә, сөнки яҙғы көн - йыл туйҙыра. Һәр юғалтҡан бер көндө бер ни менән дә тултырып булмай. Семинарҙарҙа яңы төр орлоҡ, ашлама, ә иң мөһиме, иген үҫтереүҙең, игеүҙең яңы технологияларын өйрәтәләр. Фермерҙар ойоштороусыларға мең рәхмәтле, сөнки ул белемде үҙаллы өйрәнергә ер эшсеһенең ваҡыты ла, мөмкинлеге лә юҡ. Яҙғы баҫыу эштәре тамамланыуға, бесән әҙерләү осоро етә. Бына ошоноң менән файҙаланып, министрлыҡ белгестәре, аграр университеттың малсылыҡ өлкәһендәге ғалимдары беҙгә уҡыуҙар ойоштора. Мин унда, ара йыраҡ булһа ла, ҙур теләк менән барам. Беҙгә 20-30 йыл элек өйрәткәндәр хәҙер иҫкелек ҡалдығы кеүек. Мал аҫрауға заманса ҡараш элеккеһенән ҡырҡа айырыла. Теге осорҙағы белем менән әллә ни табыш алып булмаясаҡ, бөлгөнлөккә төшөүең көн кеүек асыҡ. Мин бит фураж игенен үҙемдең малҡайҙарыма ғына үҫтермәйем, ә һыйыр малы, кәзә-һарыҡ, ҡош-ҡорт аҫраған күршекүләнгә лә һатам. Килгән табышҡа киләһе миҙгелгә орлоҡ, ашлама, запас частар алам, ә иң мөһиме, ауыл хужалығы өлкәһендәге белемемде камиллаштырам.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# СОВЕТ МАЙҘАНЫ...

## яңыра, төҙөкләндерелә



**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Совет майҙанындағы реконструкция эштәре менән танышты.**

Бында эштәр былтыр йәйгеһен башланғайны. Тәүге проект буйынса Совет урамындағы ҡарт йүкәләрҙе киҫеү күҙаллана ине, әммә өфөләр уларҙы һаҡлап ҡалыу мәсьәләһен күтәрҙе. Төҙөкләндереү проектына Башҡортостандың Ҡалаларҙы үҫтереү институты ла ҡушылды. Ағастарҙы дендрологтар тикшереп, уларҙың ҡайһы берҙәренең торошо яҡшы булыуын һәм тағы ла бер нисә йыл ултырыу мөмкинлеген билдәләгәндән һуң, 30 йүкәне һаҡлап ҡалырға ҡарар ителде. Артабан ҡарт ағастар яйлап йәш үҫентеләр менән алмаштырыласаҡ.

Майҙандағы эштәргә килгәндә, уның биләмәһе 6 метрға киңәйгән, подряд ойошмаһы белгестәре фонтанды ебәреүҙе тамамлай. Яҡын арала бында видеокүҙәтеү камералары һәм интернетҡа сымһыҙ инеү өсөн база станциялары урынлаштырыласаҡ. Бынан тыш, майҙанда төп урынды 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар комдивы, Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шайморатовҡа ҡуйылған һәйкәл алып торасаҡ.

Совет майҙанын төҙөкләндереү проектына ярашлы, уның юл ҡатламы яңыртыласаҡ, ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы һәм тротуарҙар, яҡтыртыу системаһы алмаштырыла, шулай уҡ Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты алдында студенттар скверы, Нариман Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәбе алдында сквер булдырыласаҡ. Әйтеп үтелгәнсә, ағастар ҙа өлөшләтә алмаштырыласаҡ, ҡарт ағастар урынына саған, миләш, сирень һәм башҡа ҡыуаҡтар ултыртыласаҡ.

Бөгөнгә бында төп төҙөлөш-монтаж эштәре тамамланған. Радий Фәрит улы майҙандағы эш барышы менән танышҡас, бында ял көндәрендә Пушкин урамынан Октябрь революцияһы урамына тиклем участкала транспорт хәрәкәтен сикләү мөмкинлеген ҡарарға ҡушты. Йәғни Совет майҙаны һәм уның эргә-тирәһендәге майҙан йәйәүлеләр зонаһына әйләнеүе ихтимал. "1 сентябргә Өфөнөң тарихи үҙәгенең был өлөшөн төҙөкләндереүҙең төп этаптарын тамамларға, Совет майҙанын һәм уның тирә-яғын ҡала халҡы өсөн хәүефһеҙләндерергә, төҙөлөш сүп-сарын таҙартырға, транспорт ағымы өсөн ҡоймалар һәм бордюрҙар ҡуйырға кәрәк", - тине ул.

12+

*БЫЛ АЙҘА...*

# УРАҒАЙ ЙОНДОҘҘАРЫ

**Йәй ахыры - урағайға ла аяҡ баҫтыҡ, шөкөр. Ғәҙәттәге йылдарҙа көн ҡыҙыуы бер аҙ һүрелә төшһә лә, был айҙа ла һауа торошо йәйгесә эҫе була ине. Кис һәм иртән иһә - һалҡынса, елеҫ һауаны тәбиғәткә яҡын ауыл ерҙәрендә һулап туйғыһыҙ.**



Август - август инде, йәй ахыры тиһәк тә, үҙенең көҙ башы икәнен дә онотторма уҙ. Был осор ҡайын япраҡтарына шәлкем-шәлкем - һары, миләш, муйыл, саған ағастарына ҡыҙыл буяуҙар яғыла башлай. Тик бына Урал арьяғы райондарында һарғайыр япраҡ, ҡыуарыр үләнсәскә ҡалдымы икән? Тиҫтәләгән йә йөҙ йылға бер килә торған ғибрәт булып, тиҙерәк үтеп китһен ине былтырлы-быйыллы әҙәм күргеһеҙ был сир-зәхмәт, ҡоролоҡ, янғын һәм ҡороткостар...

Һауа торошон күҙаллау ҙа синоптиктар өсөн башваткыҫка әүерелде күптән. Яҡын арағабер-ике аҙналыҡ фараздары раҫҡа сыҡһа ла, буш ултырмай, тимәк, улар, тип уйларға нигеҙ бар. Ә шулай ҙа бөгөнгө ҡатмарлы метеорологик шарттарҙы, климат көйһөҙлөктәрен, глобаль һауа торошо үҙгәрештәрен анализлау, өйрәнеү, теге йәки был тәбиғи катаклизм күренештәрен ваҡытынан алда иҫкәртеү өсөн был хеҙмәт бөгөн бик тә кәрәк. Урағайға һауа торошо фараздары бик буталсыҡ шулай ҙа. Тәбиғәт үҙ көҙрәте менән үҙенсә идара итергә ярата, шуға күрә синоптиктарҙың йыш ҡына бер-береһенә ҡаршы килгән, сәпкә теймәгәнерәк күҙаллауҙарын аңлап ҡабул итергә кәрәктер. Yandex.ru сығанағында августа һауа торошоноң ун йыллыҡ уртаса мәғлүмәттәрен туңәрәкләп, 24-27 градус йылы буласаҡ тип белдерһәләр, о pogode.ru мәғлүмәттәре урағайҙа берсә һалҡынса (15-20 градус) көндәрҙең кинәт эҫе һауа (30-33 градус) ағымы менән алмашынып тороуын күҙаллай. Ҡайһы бер синоптиктар августа ҡояшлы көндәрҙең аҙ булыуы, нигеҙҙә болотло көндәр һәм яуым-төшөм вәғәҙәләй.

Урағай, исеме үк әйтеп тороуынса, уныш һәм урып-йыйыу мәле, ләкин быйыл йәйҙең тәүге айҙарындағы эҫелек барлы-юҡлы уныштың тиҙ өлгөрөүенә булышлыҡ итте. Шуға күрә уңыш йыйыу кампанияһы урағайҙы көтөп торманы, күпкә алдан - Башҡортостанда, мәсәлән, июлдең тәүге декадаһында уҡ башланды. Үкенескә, быйыл иген уңышы көтөлгән кимәлдән кәм буласаҡ, тип белдерә ауыл хужалығы белгестәре. Хәйер, бының өсөн белгес булыу ҙа кәрәкмәй: ҡоролоҡ, көйҙөрөр дәрәжәлә ҡыҙҙырған эҫелек, ҡыуан елдәр, боҙ гәрәсәттәре, ҡороткостар үҙ эшен эшләне: быны беҙ үҙебеҙ ҙә күреп торҙоҡ, ҡорғаҡһыған еребеҙ менән ҡуша яндыҡ, ҡуша көйҙөк: Башҡортостанда 311 мең гектар сәсеүлек зыян күрҙе һәм 150 мең гектар баҫыуҙа уңыш һәләк булды. Боронголар әйтмешләй, көн яманы китер, тип өмөт итәйек.

Уның ҡарауы, урағай республикабыҙҙа исем-шәрифтәре киң билдәле, зыялы эшмәкәрҙәр, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт әһелдәренән торған тотош бер сағыу йондоҙлоҡ - талантҡа мул уңыш бүләк иткән беҙгә. Урағай йондоҙҙары - юбилярҙар исемлеге менән мәҡәлә ахырында танышырһығыҙ. Милләтебеҙ ғорурлығы булырҙай ана шундай ҡаҙаныштарыбыҙ байтаҡ, шөкөр, ләкин икенсе яҡтан, көйөнөстәребеҙ ҙә күп: ауылдарҙағы эшһеҙлек, эскелек, балалар пособиеһына һәм пенсионер аҡсаһына көн күреүсе ғаиләләр, башҡорт ир-егеттәренең ғаиләһен аҫрау өсөн ер аяғы ер башы Себергә китеп олағыуҙары, ауылдарыбыҙға юл, газ проблемалары, экологиябыҙҙы бысратыу, тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙың килмешәктәр тарафынан ауыһыҙ таланыуы, шуға өҫтәп, туған телебеҙ яҙмышы - бөтәһен дә һанап бөтөп буламы... Әлдә дәртле, сәмле беҙҙең халҡыбыҙ, оҙаҡ көткән ҙур сара - Фольклориадаға, бер нәмәгә ҡарамай, бына тигәнсә үткәреп ебәрешә ул. Ләкин уйнап-көлөү менәнме - эсеңдә ут яна икән.

Милләтебеҙ проблемалары, тигәндән, был айҙа Бөтөн донъя төп (ерле) халыҡтар көнө **(9)**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? *Эшҡыуарлыҡ, фермерлыҡ кеүек шөғөлһөнәрҙәргә үҙләштереү юлында ниндәй ҡаршылыҡтар, ҡатмарлыҡтар бар?*

***Сания ДӘҮЛӘТХУЖИНА, Күгәрсен районы, элекке эшҡыуар:*** Тұҡһанынсы йылдар башында бик күптәр үҙ эшен асып ҡараны. Күптәр унды, күптәр туңды. Мин үҙем байтаҡ йылдар бик уңышлы эшләнем. Әммә минең белем һәм тәжрибәмә быныңҡ ҡыҫылышы юҡ ине. Мин алып-һатыу өлкәһендә бер нәмә лә аңламай инем. Берҙән-бер белгәнем: алған әйбергә бер тапҡырҙан да кәмерәк хаҡ ҡуймайһың. Мәсәлән, ситтән алып ҡайтҡан футболканың хаҡы 50 һум булһа, уға 100-ҙән дә кәмерәк хаҡ бирмәйһең. 150 һум тиергә мөмкин, ә 90 һум түгел. Мине үҙҙәре менән алып йөрөткән апайҙар шулай тип өйрәтте. Силәбе, Мәскәү, Һарытау ҡалаларына, Алма-Атаға йөрөп тауар алып ҡайта торғайныҡ. Хаҡтар, аҡса һәм доллар курсы айлап түгел, көнләп артҡан заман ине. Тап шул буталғыс заманда күптәр йә отолдо, йә ныҡ отто. Ул ваҡытта бөтәһе лә тиерлек алып-һатыу эше менән мауығып ҡараны: врачтар, уҡытыусылар, инженерҙар, фәнни хеҙмәткәрҙәр. Улар, әлбиттә, үҙҙәре һайлаған һөнәрҙә ҡоторғандан ташлап сығып китмәне. Илдә барған билдәһеҙлек, үҙгәртеп ҡороуҙар, тотороҡһоҙлоҡ, айҙар буйы, яртышар йыллап эш хаҡын түләмәүҙәре кешене сумка артмаҡларға мәжбүр итте. Йәшәү өсөн, ғаиләһен ҡарау, балаһын уҡытыу өсөн кем нимәгә генә тотонманы.

Әлеге ваҡытта ғына ул эшҡыуарлыҡта барыһы ла аңлашыла, бөтәһе лә күҙ уңында, бизнес-план, килем, дебет-кредит. Ул саҡта, үрҙә әйтеп үттем инде, алған хаҡҡа ике, өс тапҡыр хаҡ өҫтәргә генә кәрәк ине. Башҡаларҙыҡынан аҙыраҡ, кәмерәк ҡуйһаң, ҡаршылыҡҡа, бәхәскә юлығыуың көн кеүек асыҡ. Конкурентың менән генә түгел, ә уларҙың "крыша" тип йөрөткән ҡара ҡыҙыл төҫтәге пинжәкле бандиттары, рекеттар менән дә осрашырға тура килде. Уларға ла яһаҡ түләгән саҡтар булды инде. Үҙебеҙҙә генә түгел, ә әйбер алырға илебеҙ баш ҡалаһы баҙарына ингән ваҡытта улар ҡаршы ала. Баҙар эйәләренә лә айырым түләйһең.

Ул осорҙа хоҡуҡ һаҡлау органдары эшҡыуарҙарҙы бик яҡлап барманы. Ғөмүмән, дәүләт яғынан да бер ниндәй яҡлау, хуплау булманы. Хәҙер генә ул бәләкәй һәм урта бизнесҡа "йәшел ут" янды. Өйрәтәләр, уҡыталар, төрлө гранттар, субсидиялар уйлап табалар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, шул ауыр тұҡһанынсы йылдарҙа эшҡыуар булыуы еңелерәк булғандыр, тип уйлайым. Ни өсөнмө? Ул саҡта беҙ сит илгә бик иркен сығып китә инек. Миҙгелгә ярашлы кейем, аяҡ кейеме, косметика, түшәк кәрәк-яраҡтары - бик күп ташылды ине. Әлеге кеүек сифатһыҙ түгел ине алып ҡайтҡан тауар. Үҙебеҙ барып, һайлап ала инек. Хәҙер бит әйбергә интернет селтәрендә генә заказ бирәләр ҙә, нимә килгәнен дә белмәй, көтөп ултыралар. Күпме алданалар шулай итеп. Әлбиттә, өйҙән интернет аша ғына заказ биреүе, ҙур-ҙур сумкалар күтәреп йөрөүгә ҡарағанда еңелерәк. Шулай ҙа ала торған әйбереңде тотоп ҡарап, күреп алғанға етмәй инде.

Эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелһә лә, эш урындары күпләп булдырыла тиһәләр ҙә, эшһеҙҙәр һаны кәмемәй әле бөгөн. Сит тарафтарға эш эҙләп сығып китеүселәр һаны артҡандан-арта. Барыбер элекке ҙур предприятиеларға етмәй, сөнки бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе, ғәҙәттә, 30-40 эш урыны ғына булдыра ала. Унда ла күптәр ғаилә бизнесын алып бара. Ә ҡалғандар ҡайҙа эшләргә тейеш? Бына шуныһы ғәжәп.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 30 июлгә 47 995 коронавирус сирле асыҡланған, бер тәүлектә 257 яңы осраҡ теркәлгән. Мәрхүмдәр исемлегендә - 762 фамилия, тәүлек эсендә ете кеше үлгән. Республика оперштабы хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда 918 656 кеше - вакцинаның беренсе, 655 270-е икенсе компонентын алған. Әле 648 пациент стационарҙа дауалана, 58-енең хәле ауыр, 3-һе - үпкәне яһалма еләтеү аппаратында. Республикала 2275 кеше табиптар күҙәтеүендә өйҙә дауалана. Бер тәүлектә 137 дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓Владимир Путин ковидтан вакцинация темпын арттырыу кәрәклеге хаҡында белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта, Президент фекеренсә, прививка яһарға мәжбүр итергә ярамай, ә "аңлатырға кәрәк". "Хәҙер беҙҙең төп бурыс - илдә вакцинация темпын арттырыу. Халыҡҡа прививка эшләтергә кәрәклеген, шулай ғына эпидемияны туҡтатырға мөмкин икәнен аңлатыу мөһим", - тип, Путиндың һүҙҙәрен килтерә ТАСС.

✓Башҡортостан тәүге тапҡыр МАКС авиасалонында үҙенең стендын күрһәтте. Билдәле булыуынса, республикабыҙҙан унда Күмертау авиация етештереү предприятиеһы, Өфө приборҙар эшләү берекмәһе, Өфө моторҙар эшләү берекмәһе, "Техпромсервис", "Двигатели для авиации", "Уфа механика" предприятиелары, Рәсәй Космонавтика федерацияһының төбәк бүлексәһе һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты эшләне.

✓Рәсәй төбәктәренә һаулыҡ һаҡлау системаларына ярҙам күрһәтеү өсөн 85 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленә. Башҡортостан программаға 510 миллион һум алырға тейеш. Тейешле бойороҡҡа Рәсәй премьер-министры Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығына ай дауамында төбәктәр менән килешеүҙәр төҙөү һәм федераль аҡсаны тотоноуҙың һөҙөмтәлелеген контролдә тотоу бурысы йөкмәтелде.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Силәбе өлкәһендә Башҡортостандың яңы вәкиле эш башлауы тураһында тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Әлфир Баймов Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле итеп тәғәйенләнгәнгә тиклем 126-сы мәктәп директоры булды, шулай уҡ Башҡортостан кооператив техникумында төрлө вазифаларҙа эшләне.

✓ *Туған тел - халыҡтарҙың ниндәй милләткә ҡарауын ғына түгел, ә рухи мөхит кимәлен сағылдырыусы "лакмус ҡағыҙы" ла ул. Туған теле онотола икән, милләт тә ер йөҙөнән юҡ була.*



билдәләнеүе иҫкә төштө. БМО Ассамблеяһы тарафынан булдырылған был датаның төп халыҡтар проблемаларын хәл итеүгә әллә ни файҙаһы булмаһа ла, уларҙың хоҡуҡтары, башҡа халыҡтар менән тиң үҫеше, туған телен, мәҙәниәтен, тарихын, йола-традицияларын һаҡлауға урындағы властар иғтибарын йүнәлтеүе йәһәтенән барыбер ниндәйҙер роле барҙыр, моғайын. Һәр йыл билдәле бер тематикаға арнап үткәрелә килә. Мәҫәлән, 2012 йыл "Киң мәғлүмәт сараларының ерле халыҡ ҡулында булыуы һәм уға хеҙмәт итеүе" тигән темаға үткәрелгәйне ул. Ысынлап та, киң мәғлүмәт саралары ерле халыҡтың үҙ ҡулында, тик беҙ уның менән файҙаланабыҙмы һуң? Башҡортса гәзит-журналдарыбыҙ үҙ халҡыбыҙ тарафынан һанға һуғылмай бит бөгөн. Йәнәһе, бөтөн мәғлүмәт - гаджеттарҙа, тип ҡарала. Был әлеге лә баяғы, гәзит уҡымауҙан һәм, ғәфү үтенәм, наҙанлыҡтан, сөнки гәзит-журналдың үҙ тематикаһы, үҙ мөхите бар, улар рухиәтебеҙҙе байыта, ә гаджет материалдары, киреһенсә, кеше аңын бутай, йыш алдай һәм уларҙан зомби яһай. Икенсенән, башҡортса баҫмаларға яҙылыуға аҡсабыҙҙы йәлләп, туған телебеҙҙә нәшер ителгән гәзит-журналдарҙың - халҡыбыҙ үҙ асылын юғалтмаһын, әсә телебеҙ, әҙәбиәт һәм сәнғәтебеҙ йәшәһен өсөн хеҙмәт итеүсе баҫмаларыбыҙҙың - яҙмышын үҙ ихтыярыбыҙ менән ҡыл өҫтөнә ҡуйбыҙ, ситкә тибәрәбеҙ. Шунлыҡтан, бер көн килеп, уның яҙмышын хәл итеү власть ҡулына күсә ҡалһа, туған телдәге матбуғат баҫмаларыбыҙҙың ябылыуы ла бик ихтимал. Әйе, беҙҙең халыҡҡа йыш ҡына эш үткәс, аҡыл килеп, теге йәки был талаптар менән "дауайлашып" йөрөргә тура килгеләй. Гәзит-журналдарыбыҙ кеүек рухи хазиналарыбыҙ менән дә шулай булып ҡуймағайы...

2019 йылда иһә БМО Ассамблеяһы "Ерле (төп) халыҡтарҙың теле" темаһына бағышланды һәм был бер ҙә юҡтан түгел. Туған тел - халыҡтарҙың ниндәй милләткә ҡарауын ғына түгел, ә рухи мөхит кимәлен сағылдырыусы "лакмус ҡағыҙы" ла ул. Туған теле онотола икән, милләт тә ер йөҙөнән юҡ була. Шуға ла әсә телен һаҡлау, өйрәнеү, аралашыу, ошо телдә уҡытыу - көнүҙәк мәсьәлә. Быйыл 31 майҙа РФ мәғариф министры С.Кравцов яңы Федераль дәүләт мәғариф стандарттарын (ФГОС) раҫлап ҡул ҡуйҙы. "Шуға ярашлы, РФ субъекттарының туған һәм дәүләт телдәре уҡытыу планына индерелде. Шулай итеп, белем биреү процесында 2017 йылда башланған этник телдәр мөхитен реформалау тамам", - тип яҙҙы был хаҡта үҙенең Бәйләнештәге диуарында БР Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов. Яңы стандарттар буйынса уҡыу планы хәҙер РФ дәүләт телен һәм шулай уҡ Рәсәй Федерацияһы республикаларының туған һәм дәүләт телдәрен, шул иҫәптән, туған тел булараҡ, рус телен дә өйрәнеүҙе тәьмин итәсәк. Эш хәҙер яңы стандарттар күрһәтмәләрен аҡыл менән уйлап ғәмәлгә ашырыуҙа мәктәп коллективтары һәм ата-әсәләр яуаплылығына тапшырыла. Һәр хәлдә, иң мөһиме - республикабыҙҙың төп (ерле) халҡы мәнфәғәттәре һанланһын һәм "БР халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР законын боҙоуҙарға юл ҡуйылмаһын, балаларҙың туған һәм дәүләт телдәрен өйрәнеүгә хоҡуҡтары һаҡланһын.

Урағайҙа күренекле даталар байтаҡ, шуларҙың иң мөһим ҡайһы берҙәрен атап китеү кәрәктер: РФ Ҡораллы Көстәр тылы **(1)**, Һауа-десант ғәскәрҙәре **(2)**, Хиросима, "Табиптар - тыныслыҡ өсөн" халыҡ-ара көндәре **(6)**, Башҡортостанда умартасы, Тәҙәүсе, Халыҡ-ара альпинист көндәре **(8)**, Башҡортостанда Архив хеҙмәте булдырылған көн **(11, 1919 йыл)**, Хәрби-Һауа көстәре, Халыҡ-ара йәштәр **(12)**, Бөтөн донъя сулаҡтар**(13)**, Физкультурниктар **(14)**, Археологтар, Рәсәй Һауа Флоты көндәре **(15)**, Бөтөн донъя гуманитар ярҙам, Бөтөн донъя фотография **(19)** көндәре, Бөтөн донъя берәҙәк хайуандар **(21)**, Рәсәй дәүләт флагы **(22)**, Курск һуғышында совет ғәскәрҙәренең немец-фашистарҙы тар-мар иткән көнө **(23, 1943)**, Кино **(27)**, Шахтерҙар көнө **(29)**, Ырымбурҙа "Каруанһарай" тарихи-архитектура комплексы асылыуға - 175 йыл **(30, 1846)**, Ветеринария **(31)** көнө.

**УРАҒАЙҘА ТЫУҒАНДАР:**

**1** - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, 5-се саҡырылыш БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, 2012-2015 йылдарҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты рәйесе, "Халыҡтар дуҫлығы" һәм "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордендары кавалеры **Румил Аҙнабаевҡа - 80 йәш** (1941).

**5** - М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Әхәт Хөсәйеновҡа - 75 йәш** (1946).

**8** - 1968-1989 йылдарҙа телевидение һәм радио тапшырыуҙар буйынса БАССР Дәүләт комитеты дикторы, өлкән мөхәррире, Башҡортостандың халыҡ артисы, Өфө ҡалаһының почетлы гражданы **Фәрит Бикбулатовтың тыуыуына - 85 йыл** (1936-2016).

**11** - театр һәм кино актеры, 2012-2019 йылдарҙа М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының художество етәксеһе, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә РФ Дәүләт премияһы, К.С.Станиславский исемендәге халыҡ-ара театр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге БАССР дәүләт премияһы лауреаты **Олег Хановҡа - 70 йәш** (1951).

**15** - тел белгесе, филология фәндәре кандидаты, 1930-1950-се йылдарҙа башҡорт теленең диалекттарын өйрәнеү буйынса фәнни экспедиция етәксеһе, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры **Таһир Байышевтың тыуыуына - 135 йыл** (1886-1974).

**20** - шағир, сәсән, мәғрифәтсе **Вәлиулла Ҡоломбәтовтың тыуыуына - 140 йыл** (1881-1964).

- Берлиндың Рейхстагы башына Еңеү Байрағын иң беренселәрҙән булып ҡаҙаусы һуғышсы, Ҡыҙыл Байраҡ һәм Ҡыҙыл Йондоҙ, I һәм II дәрәжә Дан ордендары кавалеры, сығышы менән Миәкә районынан **Ғәзи ЗАҺИТОВтың тыуыуына - 100 йыл** (1921-1953).

- шағирә, журналист, публицист, 1989-2015 йылдарҙа "Йәншишмә" ("Башҡортостан пионеры") гәзитенең бүлек мөдире, РФ һәм БР Яҙыусылар һәм Журналистар берлеге ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты **Зөһрә Ҡотлогилдинаға - 70 йәш** (1951).

**21** - башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе, тыуған яҡты өйрәнеүсе, Рус география йәмғиәтенең Ырымбур бүлексәһе ағзаһы, титуляр советник **Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың тыуыуына - 180 йыл** (1841-1907).

**25** - архитектор, Башҡортостандың атҡаҙанған архитекторы **Урал Ураҡсинға - 70 йәш** (1951).

**26** - философия фәндәре докторы, профессор, дәүләт эшмәкәре, РФ Дәүләт Думаһының 6-сы саҡырылыш депутаты **Зөһрә Рәхмәтуллинаға - 60 йәш** (1961).

- Рәсәй рок йырсыһы, музыкант, композитор һәм йырҙар авторы, Өфө ҡыҙы **Земфираға (Земфира Рамаҙанова) - 45 йәш** (1976).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Эшҡыуарлыҡ, фермерлыҡ кеүек шөғөл-һөнәрҙәрҙе үҙләштереү юлында ниндәй ҡаршылыҡтар, ҡатмарлыҡтар бар?

***Миңлейәр СОЛТАНБАЕВ, Ейәнсура районы:*** Яңыраҡ баш ҡалала йәшәгән бер дуҫым шылтырата. "Ижади көрсөккә килеп терәлдем. Ауылға ҡайтам да, үҙ эшемдә асам, фермерлыҡ менән шөғөлләнәм. Нисек уйлайһың? Килеп сығырмы икән минән?" - ти. Мин әҙәп һаҡлап, әлбиттә, уның был ниәтенән төңөлдөрә торған бер һүҙ ҙә әйтмәнем. Шулай ҙа был һорауҙы уңышлы эшләгән берәй эшҡыуарға биреүен үтендем.

Бынан байтаҡ йыл элек мин үҙем дә ауыл хужалығы өлкәһендә алған белемемде файҙаланырға уйлап, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә булғайным. Үрҙәге танышым кеүек, Ырымбурҙағы йылы фатирымды һатып, тыуған районыма юлландым. Күпләп һарыҡ, һыйыр, сусҡа алам, ҡаҙ үрсетәм, тип уйланым. Уйланым һәм алдым, әлбиттә. Ҡатыным, ике улым һәм үҙем дүртәүләп натураль хужалыҡта ең һыҙғанып эшкә тотондоҡ. Тик бер аҙҙан мал-тыуарҙы, ҡош-ҡортто ашатырға ҡатнаш аҙыҡ, емгә аҡса етмәй башлағанын тойҙом.

Тотоп ҡарамаған кеше генә шулай тип әйтә: "Ауыл ерендә үҙеңдән ҡалғанды ашатып ҡына ла сусҡа тотоп була". Булмай торһон әле! Берәүһенә генә уның көнөнә ике күнәктән дә аҙ булмаған аҙыҡ кәрәк. Бесән әҙерләргә лә ағыулығы, техникаһы кәрәк. Ҡул салғыһы менән генә ете баш һыйыр малына еткереп буламы ни? Беренсе йыл бик ҡыйынға тура килде. Килемгә ҡарағанда сығым күберәк булды. Ҡаҙ ғына үҙен аҡланы, тиһәм, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Һыу ҡошо бит улар. Йәй башынан һуйғансы тиерлек йылға буйында булдылар. Иртән аҙыраҡ ашатып, кисенә аҙыҡты мулыраҡ биреп һимертеп кенә һуйҙыҡ. Итен Ырымбур өлкәһенә, Сорғот ҡалаһында һаттыҡ. Ә сусҡа һәм һыйырҙы икенсе йылына ҡалдырманым...

Танышыма шуны аңлатып ҡараным шулай ҙа. Әммә ул мин тап булған ысынбарлыҡ менән осрашмайынса, барыбер алдына алғанын ҡуймаҫ, тип уйлағайным. Ул был юлда ныҡышмалыраҡ булып сыҡты. Яңыраҡ шылтырата: "Беҙҙә "Фермерҙар мәктәбе" федераль проекты бойомға ашырыла икән. Шунда барып, бер аҙ ауыл хужалығы өлкәһендә эш алып барыу өсөн мәғлүмәт алып ҡайтам әле", - ти. Башҡортостан икенсе тапҡыр "Россельхозбанк" менән Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығының башлап торған фермерҙарҙы "нулдән" алып агробизнес алып барырға өйрәткән төбәктәре исемлегенә инеүен ишеткәйнем инде. Был бик яҡшы күренеш, әлбиттә. Бында шулай уҡ үҙ эшен асҡан эшҡыуарҙарға ла квалификацияһын күтәрергә ярҙам итәләр. "Фермерҙар мәктәбе"ндә шөғөлләнеү Башҡортостан дәүләт аграр университеты нигеҙендә алып барыла. Уҡыу курсы ике ай ярымға иҫәпләнгән, ул теоретик һәм практик өлөштәрҙән тора. Уны тамамлағандар ауыл хужалығы йүнәлеше буйынса дәүләт өлгөһөндәге диплом ала. Был иһә бөгөнгө заманда грант ярҙамы алыу өсөн кәрәк.

Мин дә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә уйлаған ваҡытта ошондай мәктәптәр булһа, мотлаҡ барып уҡып ҡайтыр инем һәм күп хаталарҙан азат булыр инем, тип уйлайым. Ә теге танышым, ысынлап та, эшен ошондай курстарҙа, "Фермерҙар мәктәбе"ндә алған белеме нигеҙендә ҡорорға тырыша. Моғайын, уңыр был юлда, тип уйлайым.

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандағы балалар лагерҙарының береһендә яңы коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 46 осрағы асыҡланған. Был хаҡта Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Роспотребнадзорҙың республика идаралығы етәксеһе Анна Казак хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта балалар ялы учреждениеһы ябыҡ. Республика Башлығы Радий Хәбиров Мәғариф министрлығына ҡыҫҡа ваҡыт эсендә эш төркөмө булдырырға һәм Роспотребнадзор белгестәре менән берлектә йәйге ял лагерҙарын тикшерергә ҡушты.

✓Башҡортостанда коронавирус инфекцияһынан вакцинаның беренсе компонентын - 852 меңдән ашыу, икенсе компонентын иһә 545,8 меңгә яҡын кеше алған. Билдәле булыуынса, әлеге ваҡытта Рәсәйҙә коронавирустан дүрт вакцина бар: "Спутник V", "Спутник Лайт", "ЭпиВакКорона" һәм "Ковивак". Коронавирусҡа ҡаршы "Спутник V" вакцинаһын клиник тикшереүҙең аныҡ һөҙөмтәләре быйыл октябрь аҙағында билдәле була. Илебеҙҙең башҡа вакциналары буйынса клиник тикшереү мәғлүмәттәре 2021 йылдың аҙағына, 2022 йылдың башына әҙер булыр тип көтөлә.

✓Республиканың 40 район хужалығы - ужым ашлығын, 26-һы яҙғы культураларҙы йыйыу менән мәшғүл. Дөйөм алғанда, 146 мең гектар майҙанда ашлыҡ сабылған, 224 мең тоннанан ашыу яңы уңыш игене һуғылған. Ужым ашлығының уртаса уңышы - гектарынан 18,2 центнер, бөртөклөләрҙең һәм бөртөклө-ҡуҙаҡлыларҙың иһә гектарынан 12,6 центнер. Саҡмағош районында 30 центнерға яҡын ужым ашлығы йыялар, Ауырғазы һәм Ҡырмыҫҡалы районДарында - гектарынан 25 центнер.

✓Ил президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған тейешле указға ярашлы, Рәсәйҙә инвалид балалар һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр магазиндарҙа, кафеларҙа, социаль һәм башҡа учреждениеларҙа сираттан тыш хеҙмәтләндерелә башлай.

Был документ инвалидтарға дәүләт ярҙамы тураһындағы 1992 йылғы указға үҙгәрештәр индерә, йәғни яңы указ менән "инвалид балалар һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр" ҙә ошо категорияларға ҡарай. Документ ҡул ҡуйылған көндән - 26 июлдән көсөнә инде.

✓ **Компанияға зыянды үҙ теләге менән ҡапларға мөмкинлек бирелһә лә, ул бынан файҙаланманы. Суд "Таналыҡ" йәмғиәтенә компенсация түләтеү менән бергә эш алып барылған ерҙәргә рекультивация үткәреүҙе лә йөкмәтте.**



*ҠЫҪҠАСА*

# ДАУАХАНАҒА ҺАЛМАЙҘАР

**Башҡортостанда ковидтан прививка яһатмаған пациенттарҙы дауаханаға һалмайҙар. Был турала Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин белдерҙе.** Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡарамағындағы оператив штаб ошондай ҡарар ҡабул иткән. "Баш табиптар һәм белгестәр фекеренсә, әлеге ваҡытта коронавирустан прививкаһы булған пациенттарҙы ғына планлы дауалау тураһында положение индерергә кәрәк (онкология һәм кардиология ярҙамынан тыш). Был медицина ойошмаһында сирҙең таралыуына юл ҡуймаҫҡа һәм туктауһыҙ медицина ярҙамы күрһәтергә мөмкинлек бирер ине", - тип билдәләне Максим Забелин. Шул уҡ ваҡытта республикала йәшәүселәргә ашығыс медицина ярҙамы талап ителгәндә вакцинация сертификатының булыуы йәки булмауы мөһим түгел. Онкология һәм кардиология йүнәлеше буйынса ярҙам күрһәтелгән пациенттар өсөн дә прививка кәрәкмәй. Тейешле үҙгәрештәр Башҡортостан Башлығы указына индерелергә һәм 2 августан көсөнә инергә тейеш.

✓**1-30 августа Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә ауыл хужалығы иҫәбен алыу ойошторола.** Башҡортостанда ауыл хужалығы иҫәбен алыу өсөн 1,8 меңдән ашыу кеше йәлеп ителә, тип белдерҙеләр кесаҙна Башстат кәңәшмәһендә. "Республикала 800-ҙән ашыу ауыл хужалығы ойошмаһын, 4 мең крәҫтиән-фермер хужалығын һәм шәхси хужалыҡты, бынан тыш, 2,4 меңгә яҡын баҡсасылыҡ ширҡәтен һәм 677 мең шәхси ярҙамсы хужалыҡты яҙып алырға кәрәк", - тине Башҡортостанстат етәксеһе урынбаҫары Илдар Заһиҙуллин. Ошо иҫәп алыу барышында ауыл хужалығы тармағында мәшғүлдәр һаны, ер участкалары һәм уларҙы файҙаланыу, ауыл хужалығы культуралары һәм күп йыллыҡ үҫентеләр майҙандары тураһында ла мәғлүмәттәр теркәлә. Шулай уҡ мал һаны иҫәпкә алынырға тейеш.

1 августан 16-һына тиклем ауыл хужалыҡ ойошмалары, крәҫтиән-фермер хужалыҡтары электрон төрҙәге тикшереү бланктарын үҙ аллы тултыра. Ауыл хужалығы иҫәбен алыуға яҡынса йомғаҡ - быйыл декабрҙә, ә тулыһынса 2022 йылдың аҙағында яһала.

✓**Башҡортостанда ресторандарға һәм башҡа социаль-көнкүреш йүнәлешендәге учреждениеларға инеү өсөн вакцинация сертификаты йәки кире һөҙөмтәле ПЦР-тест булыуы тураһында талаптарҙы ғәмәлгә индереү билдәһеҙ ваҡытҡа кусерелде.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров: "Былдай сараларҙы әлегә ҡулланмайбыҙ. Ләкин хәл киҫкенләшһә, ошо мәсьәләгә әйләнеп ҡайтырбыҙ, - тине. - Хәҙер барыһы ла: фитнестар, башҡа ойошмалар элекке тәртиптә эшләй, әлбиттә, ғәмәлдәге бөтә талаптарҙы үтәү мотлаҡ". "Хәҙер дөйөм туҡланыу учреждениеларына ниндәйҙер документтарһыҙ индермәү кеүек сикләү сараһын ҡулланыу өсөн нигеҙ юҡ. Шуға күрә, әгәр кисектергә мөмкин икән, үҙемдең ағымдан бында хәүеф күрмәйем", - тип белдерҙе Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Анна Казак.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# МАХСУС ҺАҠЛАНАСАҠ!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау зонаһын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы.**

Тейешле документ хоҡуҡи мәғлүмәт рәсми интернет-порталында баҫылған.

Башҡортостанда "Куштау", "Торатау", "Йөрәктау", "Ҡарлыман мәмерйәһе", "Туғар-Салған күле", "Охлебинин мәмерйәһе" һәм "Оло Ҡалпаҡ ҡаяһы" тиғән һаҡлана торған зоналар барлыҡҡа килә. Былдай зоналарҙы булдырыу махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрен хәүефле антропоген йоғонтонан һаҡлап алып ҡалыуға йүнәлтелгән. Документта һаҡлана торған зоналар тураһында тейешле положениелар раҫланған, атап әйткәндә, ошо биләмәләрҙә тыйылған һәм рөхсәт ителгән эштәр һанап сығылған. Тәбиғәт ҡомартҡыһын һаҡлау зонаһы тураһында положениеға ярашлы, ер аҫтында геологик тикшеренеү, файҙалы ҡаҙылмалар эҙләү һәм сығарыу, быраулау, капиталь төҙөлөш объекттарын төҙөү, һунар итеү һәм башҡа эштәр тыйыла.

# ПРИВИВКА ҠОТҠАРА



**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙағы 107 депутаттың 68-е йәки 64 проценты яңы коронавирус инфекцияһы менән ауырыған. Был хаҡта Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев белдерҙе.**

"Депутатттар даими рәүештә халыҡ менән аралаша, шуға уларҙың күптәре - 68 кеше - COVID-19 менән сирләгән, - тип белдерҙе Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе. - Иммунизация был тенденцияны ҡырҡа үҙгәртер тип иҫәп тотабыҙ. Бөгөнгә коронавирус менән ауырмаған йә иһә күптән ауырыған депутаттарҙың күбеһе вакцинация үткән. Әлеге ваҡытта 65 депутат прививкаланған. Прививкалар кешеләрҙе сәсәк, холера, ҡыҙылса һәм башҡа хәүефле сирҙәрҙән ҡотҡарҙы. Ҡайһы бер йөштәр прививка эшләткәнсе, коронавирус менән ауырып, тәбиғи иммунитетҡа эйә булыу яҡшыраҡ, тип иҫәпләй. Был яңылыш фекер. Беренсенән, сирҙән һуң даими иммунитет барлыҡҡа килмәй, күпмелер ваҡыттан һуң кеше йәнә ауырып китергә мөмкин. Икенсенән, вирус йәш ҡына әҙләгәүгә, һаулыҡ менән бәйле проблемаларға килтерә. Организмдың прививкаға ҡыҫҡа ваҡытлы реакцияһы сирҙең ауыр эҙемтәләре менән сағыштырғанда бер нәмә лә түгел".

# ҺӘЛӘТЛЕ БАЛАЛАР БИХИСАП

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Сириус" үҙәге етәксеһе һәм Дөйөм халыҡ фронты штабы рәйестәше Елена Шмелева менән осрашты.**

Ултырышта ҡатнашыусылар Башҡортостанда белем биреү мөмкинлектәре һәм йәш һәләттәргә ярҙам күрһәтеү хаҡында фекер алышты. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, республиканың "Сириус" үҙәге менән мөнәсәбәттәре яҡшы, ләкин өлгәшелгәндәрҙә генә туҡталып ҡалмай, яңы кимәлгә сығыу мөһим. Өфөлә "Аврора" һәләттәрҙе үҫтереү үҙәге эшләп килә. Әммә һәләтле йәштәр Өфөлә генә йәшәмәй, республиканың башҡа ҡалаларында ла ошондай үҙәктәр асырға кәрәк. Елена Шмелева республика Башлығы етәкселегендә Башҡортостанда талантларҙы үҫтереүгә, төрлө йүнәлештәге белгестәрҙе йәлеп итеү мөхите булдырыуға йүнәлтелгән программаларҙы формалаштырыуҙа әүҙем ҡатнашҡан эксперт советының һөҙөмтәле эшләүен билдәләне.

Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин "Сириус" мәғариф үҙәге етәксеһе менән осрашыуҙа республикала педагогия хеҙмәте баҙарында ҡытлыҡ күҙәтелеүе тураһында мәғлүмәт еткерҙе. Шмелева билдәләүенсә, хәҙер төп бурыс - белем алыу мөмкинлеген киңәйтеү һәм уҡытыусыларға ҡытлыҡты кәметеү. Быны төп университеттар менән модулле программалар иҫәбенә эшләргә мөмкин. Хәҙер, Елена Шмелева һүҙҙәренсә, интеграциялы уҡытыу - һөнәр алды программалары талап ителә. Һүҙ эш биреүсенең һәм мәғариф учреждениеһының партнерлығы, индустриаль партнерҙарҙың ресурстары менән файҙаланыу тураһында бара. "Белем биреү учреждениеларының һәм предприятиеларҙың партнерлыҡ мөнәсәбәтен индерергә тәҡдим ителә. Бөгөн беҙ лицейҙарҙа һәм Өфө дәүләт нефть техник университетында ошондай миҫалдарҙы күрҙек", - тине Елена Шмелева.

# ЯУАПҠА ТАРТТЫРЫЛДЫ

**Башҡортостан Арбитраж суды "Таналыҡ" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәткә ҡарата тирә-яҡ мөхиткә килтерелгән зыян өсөн Роспотребнадзорҙың Көньяҡ Урал идаралығы юллауын ҡәнәғәтләндерҙе һәм унан 604,8 млн һум компенсация түләтергә ҡарар сығарҙы.**

"Коммерсант-Башҡортостан" гәзите хәбәр итеүенсә, Мәскәү компанияһы 2017 йылдан алып Баймаҡ районында асыҡ ысул менән алтын ҡомо сығара. Лицензияланған участка сигенән сығып (204 га), техника 4,8 га майҙанда уңдырышлы тупраҡ ҡатламын боҙа. Ҡаҙыу эштәре алып барылған ерҙәр кадастр иҫәбенә ҡуйылмаған. Закон боҙоуҙар 2020 йылдың октябрендә Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор һәм Рәсәй дәүләт хәүефһеҙлек хеҙмәте идаралыҡтары тарафынан үткәрелгән тикшереүҙәр барышында асыҡланды. Компанияға зыянды үҙ теләге менән ҡапларға мөмкинлек бирелһә лә, ул бынан файҙаланманы. Суд "Таналыҡ" йәмғиәтенә компенсация түләтеү менән бергә эш алып барылған ерҙәргә рекультивация үткәреүҙе лә йөкмәтте.

Закон нигеҙҙәренә ярашлы, файҙаланылған ерҙәрҙе тергеҙеү проекттын урындағы үҙидара органдары тәьмин итергә тейеш, шунлыҡтан суд Баймаҡ район хакимиәтен дә яуапҡа тарттырҙы. "Таналыҡ" йәмғиәте Силәбенең XVIII Арбитраж апелляция судына ялыу менән мөрәжәғәт итте. Юристар билдәләүенсә, компания икеләтә күләмдә яуаплылыҡҡа тарттырылды - зыянды ҡаплатыу һәм ерҙәргә рекультивация үткәреү. Ә компанияға был ҡарарҙы юҡҡа сығартыу мөмкинлеге икеле, сөнки суд тарафынан хоҡуҡ нормалары дөрөҫ ҡулланылған. "Таналыҡ" йәмғиәтенең емерткес эшмәкәрлеге Ер аҫты ҡаҙылмаларын файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссия ултырышында ҡаралды, компания унда экологияны тергеҙеү планы менән таныштырҙы. Тирә-яҡ мөхиткә килтерелгән зыян өсөн штраф законға ярашлы федераль бюджетҡа йүнәлтелә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Уҙған ял көндәрендә Өфөлә Яңы Черкассы урамындағы контроль станцияһы һауала көкөрт водородының 3,5 ПДК-ға юғары булыуын теркәгән. "Нефтехимик" паркындағы станцияла иһә 3,6 ПДК-ға артыҡ булған. Экология министрлығы диспетчерҙары шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә ҡалала һаҫыҡ еҫ сығыуы тураһында 121 мөрәжәғәт алған. Һауаны бысратыусы матдәләрҙең төп сығанағы ҡаланың төньяғындағы Федераль экология контроленә ҡараған объекттар булыуы ихтимал, тип белдерҙеләр ведомствола.

✓Өфөлә Совет майҙанындағы фонтан Белем көнөндә - 1 сентябрҙә асыла. Әлеге ваҡытта унда төҙөкләндереү эштәре бара. "Был ҡала халҡы өсөн күркәм урын булыр тип уйлайым. 1 сентябрҙә фонтан асыла. Ә киләһе йылға 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәлде эшләү тарихын тамамларбыҙ", - тине Радий Хәбиров. Майҙа фонтанды һыһау рәүешендә эшләтеп ҡаранылар. Ул Дан бульварындағы "Имандәр" скверында урынлашкан "Бейеүсе торналар" фонтаны кеүек "коро" һәм төҫлө-музыкаль итеп эшләнә.

✓Рәсәй Көс экстримы федерацияһының почётлы президенты, "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" исеменә лайыҡ булған Эльбрус Ниғмәтуллин яңы рекорд ҡуйҙы, уны федерация таныны. 47 йәшлек спортсы бер нисә ай буйына 1476 килограмм ауырлыҡтағы вертолётты күтәрергә әҙерләнде. Донъяла ошондай үҙенсәлекле трюктың теркәлгәне юҡ. Санитар-эпидемиологик хәлгә бәйле тамашасылар рекордты ҡарарға килә алманы. Эльбрус әйтеүенсә, шул рәүешле ул Рәсәйҙең олимпия йыйылма командаһын дәртләндерергә теләгән.

✓Евгений Рылов Олимпиадала 25 йыл эсендә тәүге тапҡыр йөҙөүҙә Рәсәй йыйылма командаһы өсөн алтын миҙал яуланы, ул Токиолағы уйындарҙа арҡаға ятып 100 метрға йөҙөүҙә еңде. Көмөш миҙал - Рәсәй вәкиле Климент Колесникова (52,00). Һуңғы тапҡыр Рәсәй йөҙөүселәре олимпия алтынын 1996 йылда Атлантала уҙған Уйындарҙа яулағайны. Ул саҡта Александр Попов 50 һәм 100 метр араға ирекле стилдә йөҙөүҙә юғары наградалар алды, ә Денис Панкратов 100 һәм 200 метрға баттерфляй менән йөҙөүҙә еңеүсе булғайны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*КӨНАУАЗ*

# ТАБИПҠА ЛА ЫШАНМАҺАҢ...

**Республикала тажзәхмәттән вафат булыусылар һаны арта. Ковид госпиталдәрҙә хәл-торош нисек икән? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Дим районы ҡала клиник дауаханаһының баш табибы урынбаҫары, медицина фәндәре докторы Шамил ТИМЕРБУЛАТОВ яуап бирә.**

**Һеҙҙең дауахана икенсе йыл инде ковидҡа ҡаршы режимда эшләй. Ошо арауыҡта ниндәй үҙгәрештәр булды?**

- Бөтә был эпопея былтыр февралдә башланды. Бер йыл ковид госпитале булараҡ эшләнек, 2021 йылдың апреленән гәҙәти режимға күстек, әммә бер нисә аҙна элек, яңы тулҡын башланғас, ҡабаттан госпиталь рәүешендә эшләйбеҙ.

Нимә әйтә алам - вирус үҙгәрҙе, ул тере һәм тормошҡа яраҡлаша. Хәҙер, былтырғы менән сағыштырғанда, ауырыусылар араһында 30-40 йәштәгеләр, йәғни тап эшкә яраҡлы категория күберәк икәнлеге күҙәтелә. Сир ҙә ауырыраҡ үтә, үпкәләргә генә түгел, ашҡазан-эсәк трактында ла проблемалар артты. Беҙ ҡулланған препараттарға сир бик бирешеп бармай. Билдәләре лә тиҙ күренә - элек инкубация осоро бер аҙна булһа, хәҙер ике-өс көндә кешенең үпкәләренең ҙур өлөшө зарарлана.

**Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһында тажзәхмәттең тағы ла ҡурҡынысыраҡ штаммы барлыҡҡа килеү ихтималлығы тураһында иҫкәртәләр. Был турала нимә уйлайһығыҙ?**

- Шулай булыуы бик тә ихтимал.

**Дауаханаға прививка эшләткәндәр күп эләгәме?**

- Процент нисбәтендә әйтә алмайым, әммә улар бик аҙ һәм реанимацияға һәм ИВЛ-ға эләкмәйҙәр. Прививка һеҙҙең сирләмәүегеҙгә гарантия бирмәй. Ул бары тик хәл-тороштоң реанимацияға барып етмәҫен генә гарантиялай. Беҙҙең вакциналарҙың хатта үҙгәреп торған вирусҡа ла ҡаршы тороуы дәлилләнә.

**Вакцинацияның төп ҡатмарлыҡтары нимәлә? Ни өсөн ҡайһы бер илдәр тулыһынса вакцинациялана, ә беҙҙә өгөтләргә кәрәк?**

- Моғайын, был беҙҙең менталитетыбыҙға һәм "минә теймәҫ әле, үтер әле" тигән өмөткә бәйлелер. Әгәр ниндәйҙер препаратты һайлаһаң, ул мотлаҡ сит илдеке булырға тейеш, улар яҡшыраҡ, тигән миф та йөрөй. Эпидемия башланғас, барыһы ла вакцина һәм уның тиҙерәк эшләнеүен көттө. Һуңынан үҙҙәре үк: "Ни өсөн бик тиҙ эшләнеләр? Бик шикле", - тип яҙа башланылар.

Беҙ үҙебеҙҙең поликлиникалар базаһында ғына 20 мең самаһы кешегә прививка эшләнек һәм бер ниндәй ҙә проблема осратманыҡ. Эйе, реакция була, температура күтәрелә, тән һыҙлай - был организмдың вакцинаның эшләүен күрһәткән тәбиғи реакцияһы!

**Шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә лә тиҫтәләрсә миф йөрөй...**

- Бер йыл элек тажзәхмәттең булмауы, уның донъя заговоры булыуы раҫлаған роликтар киң таралды. Хәҙер - вакцина насар һәм уның тәьҫире булмауы, 5G вышкалары аша Билл Гейтстың беҙҙең менән идара итеүе, вакцинациянан һуң телефонда блютус ҡабыҙыу менән үҙеңде табырға мөмкин булыуы тураһында роликтар тарала. Йәки илдең баш акушер-гинекологы бер нисә тапҡыр кире ҡағыуына ҡарамаҫтан, бала тапмаған ҡатын-ҡыҙға вакцина эшләтергә ярамағанлығы тураһында яҙалар. Беҙҙең дауахана базаһында республикала берҙән-бер "ковид" бала табыу бүлеге эшләй һәм үҙ тәжрибәбеҙҙә ауырыуҙы үткәреүселәр ҙә, прививка эшләтеүселәр ҙә бала тапҡанын күрәбеҙ.

**Һеҙҙеңсә, был имеш-мимештәр менән көрәшергә кәрәкме?**

- Беҙ медиктар, ә эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре түгел. Беҙ бары тик вакцинаның составы, уның нисек эшләүе һәм тәьҫире тураһында дөрөҫ мәғлүмәтте тарата алабыҙ. Берҙән-бер ҡоралыбыҙ - дөрөҫ мәғлүмәт, хәҡиҡәт.

**Үҙегеҙ һәм коллективығыҙ прививка эшләттегеҙме?**

- Эйе, вакцинацияланыуҙың иң ҙур күрһәткесе беҙҙә. Башҡаса булыуы мөмкинме? Мин көн һайын сирлеләрҙе тикшерәм, тибиптар "ҡыҙыл зона"ла тәүлегенә һигеҙәр сәғәт эшләй, һуңынан бер аҙ ял итәлә, ҡабат эшкә тотона. "Ҡыҙыл зона"ла көсөргәнеш бик ҙур, шуға күрә эҫе булһынмы, һыуыҡмы - улар һәр саҡ беше, һауа үтмәгән костюмдарҙа, респираторҙарҙа һәм күҙлектә йөрөй, сөнки талап шундай. Хәҙер иң мөһиме - мөмкин тиклем күберәк кешегә прививка яһап, вирустың таралыуына юл ҡуймау, тулҡынды туҡтатыу. Үкенескә күрә, башҡа варианттар юҡ. Был режимда даими эшләргә мөмкин, әммә кешелектең табиптар ресурсы сикһеҙ түгел.

**Станислав ШАХОВ әңгәмә ҡорҙо.**

*ХАҠТАР НИ ХАҠ?*

# ҠЫЯР ҠИММӘТ ӘЛЕ

**Башҡортостанда күпселек социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә йәнә хаҡ арткан, тип хәбәр итте республика статистиктары.**

Бер аҙнала яңы өлгөргән ҡыяр һәм аҡ күсәнле кәбеҫтә 4,9 һәм 4,2 процентҡа ҡиммәтләнгән. Хәҙер республикала бер килограмм ҡыярҙың уртаса хаҡы - 56, кәбеҫтәнеке 40 һум тора. Алма, һыйыр ите, ҡара сәй, шәкәр, бойҙай икмәге, тауыҡ, он, йомортҡа, тары ярмаһы, эремсек, тоҙ, тунцырылған балыҡ, печенье, аҡ май, шоколадлы кәнфит, ҡаймаҡ, шымартылған дөгө, сосиска, сарделька, һарыҡ ите, макарон, маргарин һәм балалар өсөн ит консерваларына ла хаҡ 0,2 - 2,4 процентҡа артҡан.

Бер аҙна эсендә арыш һәм арыш-бойҙай ононан бешерелгән икмәктең генә хаҡы үҙгәрмәгән - бер килограмы уртаса 57 һум тора. Кишер 6,7 процентҡа арзанайған, бер килограмы уртаса 86 һумға төшә. Республикала бер аҙнала пастеризацияланған һөт, үсемлек майы, ҡарабойҙай, йәшелсә һәм емеш-еләк консерваларына, шулай уҡ колбаса, сыр, суска ите, балалар өсөн ҡоро һөт ҡатышмалары, вермишель, башлы һуған, картуф, помидор 0,1 - 5,1 процентҡа осһоҙланған, тип хәбәр итә Башстат.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# "ӨФӨ"... ҺЫУ АҪТЫНДА

**Үткән аҙнала Хәрби-диңгеҙ флоты көнө үтте. Тәү ҡарашҡа, әлбиттә, уның ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәгә бер ниндәй ҡыҫылышы юҡ кеүек, әммә ентекләп ҡарағанда... Эйе, тап үткән аҙнала Башҡортостан Республикаһының Тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә һыу аҫты дизель кәмәһе менән килешеү төҙөлгән. Субмарина төбәктең баш ҡалаһы исеме менән "Өфө" тип атала һәм унда Башҡортостан егеттәре ил алдындағы хәрби бурысын үтәйәсәк. Һыу аҫты кәмәһе быйыл ноябрҙә һыуға төшөрөләсәк. Өфө ҡала хакимиәте башлығы оператив кәңәшмәлә тап ошо хаҡта белдерҙе лә инде.**

Һәм, традиция булараҡ, иң тәүге мәсьәләләрҙең береһе булып баш ҡала халҡының тажзәхмәттән прививка эшләтеүе ҡаралды. 26 июлгә (оперативка алдынан) Өфөлә 323756 кеше (кәрәкле күләмдең 56,16 проценты) прививка эшләткән, 215719 кеше ике компонентты ла алған. Ҡала хакимиәте хеҙмәткәрҙәренең - 81.4, муниципаль һәм ҡаҙна учреждениеларының - 84.9, МУП-тарҙың - 75.9, эре предприятиеларҙың 51.5 процент хеҙмәткәре вакцинацияланған. Спорт учреждениеларында был күрһәткес - 67.4, мәғарифта - 65.8, сауҙа баҙарында һәм туризм өлкәһендә - 62.3, ҡаланың бюджет мәҙәниәт учреждениеларында 58.5 процент тәшкил итә. Шулай уҡ коронавирус инфекцияһы менән зарарланыуҙы кәметеү буйынса ла саралар күрелә: 1 июлдән төп производствола мәшғүл булмаған хеҙмәткәрҙәр өсөн ситтән тороп эшләү режимы индерелгән, барлыҡ кәңәшмәләр һәм башҡа осрашыуҙар ҡабаттан видеоконференция форматына күсерелгән.

Артабан сығыш яһаусы Киров районы хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтов район биләмәһендә Өфө ҡәлғәһе төҙөлөүҙең 450 йыллығын билдәләү уңайынан территорияның үҫеш һәм объекттар төҙөлөшө планы менән таныштырҙы. Бөгөн был районда 165 мең кеше йәшәй. Шулай уҡ биләмә студенттар районы булараҡ та билдәле, сөнки бында республиканың 9 урта һөнәри һәм 10 юғары уҡыу йорто урынлашҡан, уларҙа 66 мең самаһы студент белем ала. Баш ҡаланың оло юбилейы алдынан районда социаль объекттарҙы, ҡала инфраструктураһын, мәҙәни һәм башҡа учреждениеларҙы төҙөү һәм модернизациялау эштәре әүҙем алып барыла. Мәҫәлән, "Көнъяҡ" биҫтәһендә парк төҙөлә, Совет майҙаны реконструкциялана, "Кузнецов затоны" биҫтәһендә 260 урынлыҡ балалар баҡсаһы төҙөлөшө тамамланыу алдында, 11-се Аксаков гимназияһын реконструкциялау проекты әҙерләнә. Шулай уҡ Гимнастика буйынса балалар-үсмерҙәр спорт мәктәбенең физкультура-һауыҡтырыу комплексы тиҙҙән ишектәрен асасаҡ, Кардиология үҙәгенең хирургия корпусы, Ғ.Ҡыуатов исемендәге республика клиник дауаханаһының поликлиникаһы һ.б. төҙөлөшө дауам итә.

Был планға Ағиҙел йылғаһы аша төҙөлгән күпер һәм Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы сатындағы юл сиселеше төҙөлөшө лә инә. Киң күләмле проект булып баш ҡаланың тарихи үҙәген - Октябрь революцияһы урамын реконструкциялау тора. Шулай уҡ биҫтәгә ҡараған ауыл-ҡасаба халҡы мөрәжәғәте лә иҫәпкә алына һәм уларҙа ла төҙөлөш эштәре тормошҡа ашырыла йәки планлаштырыла.

Оператив кәңәшмәнең көн тәртибендә башҡа көнүҙәк мәсьәләләр менән бер рәттән, баш ҡала халҡын диспансерлаштырыу һәм профилактик тикшереү ҙә ҡаралды. Был хаҡта БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш хеҙмәткәре Сара Әхтәмова бәйән итте.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Талаҡ ҙурайһа

Был осраҡта ҡыяр орлоктарынан онтаҡ яһарға кәрәк. Үтә һыҡ бешкән һары ҡыярҙарҙың орлоктарын йыйып алып, киптерергә һәм ҡәһүә тартҡыс ярҙамында онтаҡларға. Онтаҡты ашарҙан ярты сәғәт алда 15-әр грамлап (яҡынса 3 балғалаҡ) ашап, аҙағынан йылы һыу эсергә. Был рәүешле 2 аҙна дауаланырға.

### Баш әйләнһә

Төнәтмә әҙерләү өсөн 10-ар грамм шифалы ромашка сәскәһе, шиңмәҫгөл, шалфей, 20-шәр грамм кесерткән, бәпембә тамыры, энәлек тамыры, ҡара әрем үләне, валериана тамыры, күгүлән (горец птичий), кукурузҙың емешлек ауыҙы кәрәк. Валериана тамыры урынына арыҫлан ҡойроғонон үләнен ҡулланырға ла була. Бөтә үләндәрҙе бергә ҡушып, ваҡларға. Шунан 1 ҡалаҡ йыйылмаға ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға. Ҡайнар хәлгә еткерергә, әммә ҡайнатмай уттан алырға һәм 1-2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Был дауаны 3 аҙна дауамында көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стаканлап эсергә. Бер аҙнаға туҡталып торғандан һуң, ҡабаттан 2 аҙна дауаланырға.

### Бауыр ауыртһа

Үт ҡыуыусы йыйылма әҙерләйбеҙ. 100 грамм календула, 50-шәр грамм кесерткән, кукурузҙың емешлек ауыҙы, ромашка, меңъяпраҡ алып, ваҡлап ҡушырға. Йыйылманың ике ҡалағын термосҡа һалып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнгәлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөп, төнәтмәне көн дауамында аҙлап ҡына эсеп бөтөрөргә. Уны ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Дауаланыу мөҙҙәте 2-3 ай.

### Депрессия

Һары мәтрүшкә, юл япрағы, гөлйәмеште 20-шәр грамм, арыҫлан ҡойроғо һәм кейәү үләнен 10-ар грамм, юшан үләндәрен, валериана тамырын 5-әр грамм алып, яҡшы бутарға. Килеп сыҡҡан йыйылманың бер ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне 1 аҙна дауамында иртәнсәк ас ҡарынға һәм кискеһен йоҡларҙан дүрт сәғәт алда эсергә. Ул ҡуҙғыусанлыҡты баҫа, тиҙ арығанда, йоҡоһоҙлоҡтан ярҙам итә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Башҡортостанда 2020 йыл аҙағына 533 мең өләсәй һәм 316 мең олатай бар ине. Алтмыш йәштән алып 74 йәшкә тиклемге ҡатламда өлкән йәштәге һәр мең иргә 1450 ҡатын-ҡыҙ тура килһә, 75 - 89 йәштәгеләрҙә улар 2 592 тәшкил итә.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

XIX быуаттың һуңғы ун йыллығында һәм XX быуат башында башҡорт ауылдарында эшләнгән бороңғо әйберҙәр, ағастан байрам һауыт-һабаһы һәм башҡа семәрле әйберҙәр Өфө, Ҡаҙан, Ырымбур губерна крайҙы өйрәнеү музейҙарына эләккән. XIX быуаттың 90-сы йылдарында Башҡортостандан бер нисә семәрле әйбер Санкт-Петербургтағы Петр Бөйөк исемендәге академия музейына ла бирелә. XX быуат башында бик күп башҡорт әйберҙәре Рус музейының Этнография бүлеге фондын байыта. Уларҙы 1906, 1907, 1912 йылдарҙа Көньяҡ Уралға экспедицияларға сыҡҡан ғалим С.И. Руденко алып ҡайта. 1925 йылда нәшер ителгән, башҡорттарҙың мәҙәниәтенә һәм көнкүрешенә арналған хеҙмәтендә ул тәүге тапҡыр ағас эшкәртеүгә бәйле һөнәрҙәрҙе тасуирлай.

Башҡорттарҙың урманһыҙ ерҙә йәшәгән этник төркөмдәре булмаған тиерлек. Тик Туҡ, Оло һәм Кесе Уран (Һаҡмар йылғаһы ҡушылдыҡтары) һәм Оло Ырғыҙ (Волга ҡушылдығы) йылғаһы буйында һуңыраҡ барлыҡҡа килгән тораҡтар ғына типик ялан яғы булған. Бында Нуғай даруғаһы кешеләре: бөрйән, табын, ҡыпсаҡ, ҡатай, юрматы һ.б. ауыл-ауыл булып ултырған. Урмандың юҡлығы ялыҡ көнкүрешенә йоғонто яһаған. Уларҙың өйҙәре самандан булған һәм хатта урындыҡтары ла балсыҡ ҡатыш эшләнгән. Әммә туғанлыҡ бәйләнештәре ныҡ булып, Урал осталарының ҡул эштәре (бигерәк тә ағас һауыт-һаба) был Волга буйы һәм Ырымбур ауылдарына даими килеп етеп торған.

Башҡорттарҙың хужалыҡ комплексы ялан ерендә лә, урман ерендә лә формалашыуы һәм иртә осорҙа уҡ урман байлыҡтарын үҙләштереүгә бәйле шөғөлдәрҙе үҙ эсенә алыуы көн кеүек асыҡ. Улар араһында ағас эшкәртеү ҙә булған. Был фараз беҙҙең эраның I һәм II меңйыллығында башҡорттар тарафынан Кама буйы һәм Уралдың таулы төбәктәре тиҙ үҙләштереүенә аңлатма бирә.

Ырыу-ҡәбилә атрибуттары (тамға, оран, ҡош һәм хайуан) араһында айырым ағас та булыуы билдәле, был малсыларҙы ялан кешеләре тип кенә ҡабул иткәндә бик аңлашылып етмәгән факт. Шуның иғтибарға лайыҡ: изге ағастар урта континенталь сығышлы булған. Ырыу символдары булараҡ бөрйән, үҫәк табын, ҡобау-меңлеләрҙә ҡарағас, ҡарағай-ҡыпсаҡ, аҡ-ҡыпсаҡ, бишәй ырыуы үҫәргәндәрҙә ҡарағай, таулы ҡатайҙарҙа йүкә, таулы ҡатайҙар һәм сыбы-меңлеләрҙә ҡайын, илкүл-меңлеләрҙә имән, юрматыларҙа өйәңке, ҡаңлыларҙа ҡарама, төньяҡ түңгәүер һәм көнбайыш тамъяндарҙа ерек, үҫәргәндәрҙең бер өлөшөндә миләш, ҡатайҙарҙа артыш изге тип һаналған. Төрлө сығанаҡтарҙан алынған был мәғлүмәттәр тулы түгел. Әммә исемлеккә ғәмәлдә ҡулланыуҙа ҡиммәтле ағастар индерелеүен асыҡларға була.

Экспедицияларҙа йыйылған материалдарға нигеҙләнеп, башҡорт осталары төрлө ағастарҙың үҙенсәлектәрен һәм уларҙан ниндәй әйбер яһап булыуын яҡшы белеүен әйтергә мөмкин.

Тиҙ серемәгән ылыҫлы ағастар - ҡарағай һәм ҡарағас йорттар һәм тирмәндәр һалыуҙа ҡулланылған. Бай башҡорттар ҡарағай бура күтәргәндәр. Ыҫмалалы ҡарағас һәм ҡарағай ағастарынан тәпәш бағаналарҙы ерҙә ҡаҙып өй мөйөштәре аҫтына ултыртҡандар. Ҡарағай таҡталар ҡыйыҡ, иҙән, һәндерә, ширлек, эскәмйәләр яһауға киткән. Еңел ҡарағайҙан ҡайыҡ (ырып эшләнгән кәмә) һәм саңғылар, ҡарағастан арба кәҫәргәре яһалған. Ҡарағай тамыры һәм ҡарағас ороһонан туҫтаҡтар эшләгәндәр. Төбәктә ҡоршау кәсебе киң таралғандан һуң, биҙрә һәм тәпәндәр өсөн бил ағастарҙан мискә таҡталары яһай башлағандар.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан**

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР

# ПЕНСИЯЛА ЙӘШӘҮ ЯҠШЫ,

## пенсияға йәшәү насар

**Бер аҡыл эйәһе пенсия тураһында шулай тип әйткән. Эйе, Рәсәйҙең пенсия системаһы тураһында хәҙер үтә йыш яҙыла, был яҙмаларҙың барыһы ла тип әйтерлек - тәнҡит. Шуғалыр ҙа инде был системаға үҙгәрештәр ҙә йыш индерелә. Һуңғы тиҫтә йыл ярым эсендә ул туҡтауһыҙ үҙгәрештәр кисерә, тиһәк тә хата булмаҫтыр.**

### Иң күп өҫтәмә - 10 балл

Пенсия тураһындағы ҡануниәт йәки уның айырым хоҡуҡи акттары ғына түгел, был системаның асылы ла үҙгәрҙе, сөнки элекке совет пенсия системаһынан китеп, хәҙерге заман талаптарына яуап биргән һәм тотороҡло эшләргә тейешле "ҡоролма" хасил булырға тейеш ине. Был үҙгәрештәр дауам итә һәм быйыл ғына ла ошо ҡануниәткә түбәндәге яңылыҡтар индерелде:

**1.** Эшләмәгән пенсионерҙар өсөн страховка пенсияһына 6,3 процент индексация яһалды. Ул өҫтәмә уртаса бер мең һум тәшкил итте.

**2.** Ҡартлыҡ буйынса пенсияға түләүҙең фиксацияланған өлөшө 6044, 48 һум булды.

**3.** Бер пенсия коэффициенты быйыл 98,86 һум тәшкил итә.

**4.** Быйыл ҡартлыҡ буйынса пенсияға сығыу өсөн 12 йыл страховка стажы талап ителә. Минималь осор йыл һайын арта һәм 2024 йылға 15 йыл тәшкил итәсәк.

**5.** Быйыл пенсияға сығыу өсөн шәхси иҫәптә 21 балл булыуы мотлаҡ. Әлбиттә, был маҡсатҡа ирешеү өсөн стаж һәм йәш тә ҡануниәт талап иткәнсә булырға тейеш. Йыл һайын ошо балл һаны арта барасаҡ.

**6.** Быйылғы страховка стажының хаҡы 33 771 һум тәшкил итә. Шәхси эшҡыуар йәки үҙмәшғүл статусы булмаған кешегә Пенсия фондында ирекле страховкалау төҙөгәндә шунса пенсия иғәнәһе түләргә кәрәк буласаҡ.

**7.** Быйыл ҡатын-ҡыҙҙар 56 йәш тә 6 айҙа пенсияға сығасаҡ. Пенсияны улар йылдың икенсе яртыһында ала башлаясаҡ. Шул уҡ осорҙа 1960 йылдың тәүге яртыһында тыуған ирҙәр ҙә пенсияға сығасаҡ, йәғни 61 йәш тә 6 айға еткән граждандар.

**8.** Быйыл пенсия иғәнәһе иҫәбенә 10 балл алырға мөмкин. Был - шәхси иҫәптә барлыҡҡа киләсәк иң ҙур күләм. Хатта эш хаҡы бик юғары булғанда ла 10 баллдан күберәк өҫтәмәйәсәктәр. Ә 10 балл пенсияның тағы ла сама менән бер мең һумға артасағын белдерә.

**9.** Быйыл 1 августа эшләгән пенсионерҙарға 296 һум өҫтәлә. Был - өс пенсия балы өсөн иң ҙур сумма, ә өҫтәмә аҙыраҡ та булырға мөмкин. Ә ғәҙәти индексация эшләгән пенсионерҙарға түләнмәй.

### Күпме һеҙ, пенсионерҙар?

Башҡортостанда бөгөнгө көнгә 60 йәштән уҙған 849 мең кеше йәшәй. Шуларҙан 74 йәшкә тиклемге пенсионерҙар 623,4 мең кеше, 75 йәштән алып 89 йәшкә саҡлылар - 207,4 мең. Оҙон ғүмерлеләр беҙҙең республикала 18,6 мең генә. Был ҡатламға 90 йәштән ашҡандар инә.

"Башҡортостанстат" мәғлүмәттәренә ҡарағанда, республикала 60 йәштән ашҡандар бөтә халыҡтың 21 процентын тәшкил итә. Ә Рәсәй буйынса был күрһәткес юғарыраҡ - 22,4 процент. 2010 йылда үткәрелгән Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәһе ошо уҡ күрһәткестең Рәсәй буйынса 18,2, Башҡортостанда 16,6 процент булыуын билдәләгәйне. Тимәк, һуңғы ун йылда ғына ла хәл байтаҡҡа үҙгәргән.

Статистар был үҙгәрешне ғүмер оҙайлығының артыуы менән бәйләй. 2020 йыл йомғаҡтарына ҡарағанда, Рәсәйҙә ошо күрһәткес 73,3, Башҡортостанда 72,6 йәш тәшкил итте. Шуныһы ҡыҙыҡлы: Башҡортостандағы 60 йәштән өлкәнерәктәрҙең яртыһынан ашыуы - 469,9 меңе - ҡалала йәшәй, 352,5 меңе ауыл еренә тура килә. Ә шулай ҙа был йәш ҡатламы ауыл халҡының 23,3 процентын, ә ҡаланың 19,7 процентын ғына алып тора.

Бөтә донъялағы кеүек үк, өләсәйҙәр олатайҙарҙан күберәк. Башҡортостанда 2020 йыл аҙағына 533 мең өләсәй һәм 316 мең олатай бар ине. Алтмыш йәштән алып 74 йәшкә тиклемге ҡатламда өлкән йәштәге һәр мең иргә 1450 ҡатын-ҡыҙ тура килһә, 75 - 89 йәштәгеләрҙә улар 2 592 тәшкил итә.

### Ә һаман эшләп йөрөгәндәре күпме?

Эш хаҡы ла алып йөрөгән пенсионерҙар һанын билдәләүе еңел түгел - уларҙың байтаҡ өлөшө рәсми теркәлмәй эшләй бит, сөнки был осраҡта пенсияға индексация даими яһалып тора. "Башҡортостанстат" хәбәр итеүенсә, беҙҙең республикала пенсия йәшендәгеләрҙең өстән бер өлөшө эшләй. Рәсми теркәлеп эшләгәндәрен һалым органдары аша тиҙ белергә мөмкин, әлбиттә, ә хеҙмәт хаҡын "конвертта" алыусылар һанын нисек асыҡларға?

Статистар раҫлауынса, был мәғлүмәтте социаль һорау алыу үткәреү белергә ярҙам иткән. Күрәһең, был бөтә пенсионерҙар буйынса уртаса алынғандыр, сөнки 60 йәштән 70-кә тиклемгеләр араһында һаман ялға китмәгәндәрҙең өстән бер өлөшө тәшкил итеүе ышандырһа, 80 йәштән уҙып киткәндәр өсөн дә ошо уҡ күрһәткес хас булыуы шикләндерә. Ә шулай ҙа: 60 йәштән алып 70-кә тиклемге "йәш" пенсионерҙарҙың күпме өлөшө эшләүе тураһындағы мәғлүмәт кенә иҡтисади һәм йәмғиәт өсөн социаль әһәмиәткә лә эйә түгелме? Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ундай мәғлүмәтте Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе сайтында ла, башҡа сығанаҡтарҙа ла табырлыҡ түгел.

### Миллиардтарса һум кәрәк

Рәсәйҙең Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе илдә иң ҙурҙарының береһе булып тора - уның республика ҡалалары һәм районларында 68 идаралығы бар, уларҙа йәмғеһе 2,5 мең кеше эшләй.

Быйылғы йылдың 1 апреленә ҡарата республика бүлексәһе 1 миллион 165 мең пенсионерҙы (ҡартлыҡ буйынса, инвалидтарҙы, социаль пенсия һ.б.), айлыҡ аҡсалата түләү алған 299 мең кешене, федераль социаль өҫтәмә менән файҙаланған 139 мең кешене, страховкаланған 5 миллион 485 мең кешене һәм 216 мең страховкалаусыны хеҙмәтләндерә. Пенсия һәм айлыҡ аҡсалата түләүҙәр өсөн сығым быйылғы тәүге өс айлыҡта ғына ла 56,2 миллиард һум, шул иҫәптән пенсия тәьминатына 54 миллиард һум тәшкил итте.

### Ә пенсия үҙе ни саҡлы?

Быйылғы йыл башында сираттағы индексация яһау һөҙөмтәһендә Башҡортостанда эшләмәгән пенсионерҙар өсөн уртаса пенсия 15 316 һум тәшкил итте (1 апрелгә ҡарата), страховка пенсияһының уртаса кимәле - 15 743 һум, ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһыныҡы - 16 221 һум.

- Бөгөнгө пенсия кимәле бер кемде лә ҡәнәғәтләндермәй, - тигәйне республиканың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы Рәйесе Константин Толкачев күптән түгелге сығыштарының береһендә. - Пенсияны инфляция кимәленән юғарыраҡ итеүҙе һәм эш хаҡының 40 процентына еткереүҙе тәьмин иткән ҡарар табыу талап ителә. Пенсия системаһын камиллаштырыу пенсионерҙың социаль статусын күтәреүҙе маҡсат итеп ҡуйырға тейешле. Депутаттар был мәсьәлә буйынса оло йәштәгеләр менән йыш осраша, пенсия реформаһына ҡағылышлы тәҡдимдәр ҙә күп йыйылды.

2010 йылда уртаса пенсия күләме 7 100 һум булған. Тимәк, һуңғы ун йылда ғына ла был күрһәткес ике тапҡырға арткан тиген һүҙ. Әммә шул уҡ осорҙа аҙыҡ-түлеккә хаҡ 1,4 тапҡырҙан алып дүрт тапҡырға тиклем артты, ололар өсөн йыш ҡына ризыҡтан да мөһимерәк булған дарыу хаҡы өс тапҡырға күтәрелде. Белеүебеҙсә, доллараҙың курсы 80 һумға яҡынлаша, ә 2010 йылда ул ике тапҡырға түбәнерәк ине. Былтыр иң түбән эш хаҡы кимәле 12 мең 100 һум тип билдәләнһә, пенсионерҙар өсөн йәшәү минимумы 10 мең һумдан да артманы. Шуға күрә күп пенсионерҙар эшләп йөрөүҙе дауам итергә, эшһеҙ булғандары хеҙмәт урыны эҙләргә мәжбүр.

### Пенсия фонды беҙгә кәрәкме?

Һуңғы осорҙа Пенсия фонды бөтәсәге тураһындағы күрәҙәләктәр йышайҙы. Был Фондты ябыу яғында булғандар дәүләт аҡсаһын экономиялау, пенсияны тура ҡаҙнанан түләү зарурлығы тураһында раҫларға тырыша. Был хаҡта Дәүләт Думаһы депутаттары ла сығыш яһаны. "Пенсия фонды пенсионер менән дәүләт ҡаҙнаһы араһындағы кәрәкмәгән аралашсы булып тора, шуға беҙ уны ябырға тәҡдим итәбеҙ", - тине "Справедливая Россия" фирҡәһе етәксеһе Сергей Миронов. Ул ошо турала бер нисә сығышында әйтте инде. "Бында Рәсәйҙәрҙең ғәйәт ҙур сумма аҡсаһы туплана, миллиардтар әйләнештә йөрөй, ә тиндәр генә кире ҡайта", - тип яҙҙы Дәүләт Думаһы депутаты Алексей Журавлев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Ошо уҡ парламенттың икенсе бер депутаты радио аша сығышында былай тине:

- Рәсәйҙең Пенсия фонды - пенсия түләүҙәге аралашсы вазифаһын ғына башҡара, страховка иғәнәләренән йыйылған сумма пенсияны тейешле кимәлдә түләр өсөн етерлек түгел, "тишек"те федераль ҡаҙнанан ҡапларға тура килә. Пенсия фондын япһаҡ, рәсәйҙәр өсөн пенсияны яҡын арала уҡ арттырыу мөмкинлеге тыуасаҡ, сөнки бөгөн Фонд хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы түләргә, уның "пиар"ына, күсемһеҙ мөлкәтен аҫрарға китеп торған миллиардтарса һум аҡса экономияланасаҡ...

**Рәшит КӘЛИМУЛЛИН.**

✔ *Ҡараһаҡалдың этник сығышы буйынса байтаҡ йылдар бәхәстәр барҙы. Әммә хәҙерге тикшеренеүселәр Ҡараһаҡал исеме аҫтында ысынында Себер ханы Күсем нәҫеленән булған Байбулат Хәсәнов тигән кеше булыуын билдәләй.*



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ЫРЫУЫБЫҘ ДЫУАН - ТАБЫНДАРҒА ТУҒАН



Рус хакимиәте һәм хәрби етәкселек башҡорттарҙы аяуһыҙ баҫтырырға ҡарар итә. Быға яуап итеп, башҡорт ихтилалсылары рус ғәскәренә яңы һөжүмдәр ойоштора. Мәҫәлән, 1736 йылдың 14 февралендә Өфө ҡалаһы янында Себер даруғаһы башҡорто, Көҙәй олоҫо батыры Төлкөсура Алдағолов үҙенең отряды менән секунд-майор Ртищевтың 300 һалдаттан һәм 150 казактан торған каратель отрядын тар-мар итә. Артабан улар полковник Мартаковтың Әстрәхан драгун полкына ла көслә баҫым яһап, байтағын сафтан сығара. Себер даруғаһының Ҡара-Табын олоҫо батыры Йосоп Арыҡов Үрге Яйыҡ ҡәлғәһе гарнизонын юҡ итә. Батша хөкүмәте башҡорттарға ҡаршы 10 драгун, пехота, гарнизон һәм атлы милиция полктарын, шулай уҡ Яйыҡ казактарын, дворян, служилый татар, ҡалмыҡ отрядтарын йүнәлтә. Чиновниктар Башҡортостан территорияһында йәшәгән башҡа халыҡтарҙы ла ихтилалсыларға ҡаршы сығырға өндәй, уларҙы башҡорттарҙың аҫаба ерҙәрен ҡуртымға алғандары өсөн түләүҙәрҙән азат итә: "Служилым мещерякам от башкирцев быть отделенным, и за их верность и службу, что они к противностям башкирцев не пристали и против них служили, земли и угодья, которыми они по найму у башкирцев владели, а те башкирцы были в воровстве и бунте, те дать им вечно, безоброчно... Застарелых тептерей и бобылей, по примеру мещеряков, от башкирского послушания отрешить, и за претерпенное их разорение от воров-башкирцев оброков им платить не велеть". Ихтилалды баҫтырыуға татар мырҙалары ла йәлеп ителәләр: "Казанской губернии служилых мурз тех, которые воров башкирцев сокращали: за такую их показанную верность, определить в службу по прежнему, и от корабельной работы, также и когда в службе будут, от подушного платежа освободить".

1736 йылдың ноябрендә В.Н. Татищев (дәүләт эшмәкәре, тарихсы, этнолог, географ, Урал ҡаҙна заводтары, Ырымбур экспедицияһы начальнигы) Екатеринбург ҡалаһында каратель ғәскәрҙәре командирҙарын кәңәшмәгә йыя, бында полковник А.И. Тевкелев иң элгәре Әй буйы башҡорттарын буйһондорорға өндәй, ошо территорияла 3 ҡәлғә төҙәтеп, рус кешеләрен күсереүҙе башҡорт ихтилалдарын иҫкәртеүҙә иң уңышлы аҙым, тип һанай: "...айские башкирцы всех протчих башкирцов непокорливее и злодейственнее, и всякое неспокойство вопервых происходит от айских башкирцов". Ул урындағы башҡорт етәкселәрен исемләп атап (Бәпәнәй, Юлдаш мулла, Төлкөсура, Мандар (Миндейәр), Әйүпбай), уларҙы язаға тарттырыуҙы талап итә. Тикшеренеүсе Н.В. Устюгов Бәпәнә абызды һәм Юлдаш мулланы ихтилалдың рухи һәм идеологик етәкселәре итеп күрә, ә Мандар һәм Төлкөсура хәрби хәрәкәт менән етәкселек итә. Әсир алынған Ҡаҙан даруғаһының Дыуанай олоҫо башҡорто Мөхәммәт Ҡасимов һорау алғанда былай ти: "Хана к себе мы не призывали, а призывали [башкиры] Ногайской дороги. Мандара называли мы ханом смехом и говорили ему, что будешь хан, также и он называетца ханом смеяся". Күрәһең, күптән айырымланып китеп, Ҡаҙан һәм Себер даруғаларында йәшәгән дыуан ырыуы башҡорттары араһында тығыҙ бәйләнеш булған.

Себер даруғаһының Дыуан олоҫо старшинаһы Мандар (Миндейәр) Ҡарабаев үҙ ҡулы аҫтына 1500 яугир йыя, "тоғро" башҡорттарға һәм мишәрҙәргә ҡаршы сыға. Ихтилалсылар Урал арьяғында, Себерҙә лә хәрәкәт итә, үҙ яугирҙары менән Өфөгә тиклем барып етеп, яу ҡыла. Ихтилалдың һуңғы этабында Ҡараһаҡал исеме менән аталып йөрөтөлгән кеше хан итеп иғлан ителә, әммә уның этник сығышы буйынса байтаҡ йылдар бәхәстәр барҙы. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр уны юрматы башҡорто тиһә, башҡалары Кавказ тарафтарынан, Кубандан килгән, тип иҫәпләй; билдәле дәүләт эшмәкәре һәм тарихсы П.И. Рычков былай тип яҙа: "Частоупомянутый Карасакал, хотя о себе во всей Башкирии было и разгласил и башкирцев, сообщников своих, уверил, что он Салтан Гирей, кубанский владелец, и родословную свою роспись о себе рассеял, но под следствием нашлось, что он был подлинный башкирец из Юрматынской волости подлой природы". Әммә хәҙерге тикшеренеүселәр Ҡараһаҡал исеме менән билдәле булған шәхестең ысынында Себер ханы Күсем нәҫеленән булған Байбулат Хәсәнов тигән кеше булыуын билдәләй.

1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы аяуһыҙ баҫтырыла, йөҙәрләгән ауылдар яндырыла, меңәрләгән кеше һәләк ителә, язаға тарттырыла, ҡоллоҡҡа һатыла. В.Н. Татищев башҡорттарҙың айырым статуһын танырға теләмәй, ихтилалдың башҡорт-рус һуғышы икәнен, ә һуғыштың солох менән тамамланыуы хаҡында һөйләгәндәрҙе үлем язаһы менән ҡурҡыта. Шулай итеп, америка тарихсыһы Алтон Донелли билдәләгәнсә, 1740 йыл Башҡортостан өсөн аяныслы тамамлана: Рус дәүләте башҡорттарҙы тамам буйһондороуға өлгәшә. Шулай ҙа рус хакимиәте, башҡорттарҙы һалым түләүсе ҡатламға күсереп, уларҙың аҫабалығын бөтөрөүгә баҙнат итмәй.

Емельян Пугачев яуы барышында Салауат Юлаев яугирҙары араһында дыуан ырыуы башҡорттары ла бик әүҙем ҡатнаша. Улар араһынан хәҙерге Мәсетле районының Ҡыҙылбай ауылынан Ишмән Итҡолов һәм Миҙәт Миңдейәровтар полковник дәрәжәһенә күтәрелә. Ишмән Итҡолов баш полковник вазифаһында Көнгөр һәм Красноуфимск араһындағы һуғыш хәрәкәттәре менән етәкселек итә, 1774 йылдың 19 февралендә Красноуфимск эргәһендәге алышта һәләк була.

Миҙәт Миндейәров Дыуан олоҫо старшинаһы Миндейәр Арҡаевтың улы була, ул хәҙерге Балаҡатай районының Миҙәт ауылында тыуған. 1774 йылдың 2 - 3 июнендә Салауат батыр яугирҙары Үрге Ҡыйғы ауылы янында полковник Михельсон ғәскәрҙәре менән алышҡа сыға, бында Миҙәт Миндейәров та ҡатнаша. Алыш 5 июндә лә дауам итә. Ошо уҡ көндә Емельян Пугачев, йәғни "батша Петр III", ошондай Указ иғлан итә: "Известно и ведомо да будет каждому, что Дуванской волости Медет Миндиаров служил старшиною, а тысяща семьсот семьдесят четвертого года июня пятого числа дня за оказанную ево к службе ревность и прилежность полковником пожалован".

Барса ихтилалдарҙа ла алғы рәттә булған Әйле ҡәбиләһенең башҡа ырыуҙары кеүек үк, Дыуан-Әйле ырыуы башҡорттары ҙур юғалтыуҙарға дусар була. Тарихи сығанаҡтарҙа сағылдырылған кеше иҫәбен сағыштырыу ошоға дәлил. Дыуан ырыуы башҡорттарының һаны 10 тапҡыраға тиклем ҡыҫҡара.

П.И. Рычков мәғлүмәттәренә ярашлы, XVIII быуат уртаһында Әйле олоҫоноң Дыуан, Һыҙғы, Түбәләҫ, Мырҙалар аймаҡтарында ни барыһы 113 хужалыҡ теркәлгән. Ә бургомистр Юхнев 1725 - 1726 йылдарҙа бында барлығы 1061 хужалыҡ булып, 3183 ир-аттың хәрби хеҙмәткә яраҡлы булыуын билдәләй. Шундай уҡ хәл дыуандарҙың башҡа аймаҡтарында ла күҙәтелә: Юхнев буйынса, 1725 - 1726 йылдарҙа Дыуан-Табын аймағында ғына ла 550 хужалыҡ иҫәпләнеп, унда хәрби хеҙмәткә яраҡлы 1650 кеше булһа, П.И. Рычков ихтилалдарҙан һуң Нуғай даруғаһының Табын олоҫонда (Бишул, Кесе Табын, Йомран-Табын, Кәлсер-Табын, Ҡумрыҡ-Табын һәм Дыуан-Табын аймаҡтарын индереп) ни бары 387 хужалыҡ теркәлгән. Ә Ҡаҙан даруғаһының Дыуанай олоҫонда XVIII быуат башында 670 хужалыҡта һуғышҡа яраҡлы 2010 ир-ат булһа, 1735 - 1740 йылдарҙағы ихтилалдан һуң бында 82 хужалыҡ тороп ҡала. Аяныслы һәм фажиғәле хәлдәр байтаҡ ҡына дыуан ырыуы башҡорттарын көнбайышҡа - Йылан, Ҡаңлы олоҫтарына күсеп китергә мәжбүр итә. Шул уҡ Туймазы районының Балтай, Түбәнге Бишенде, Төпкилде, Йәрмөхәмәт, Соҡаҙытамаҡ ауылдарына күсеп килгән әйлеләрҙең байтағы Дыуан-Әйле аймағынан булыуы ихтимал. Ошондай мәғлүмәт Мөбәрәк Хөснетдинова һаҡланған шәжәрәлә сағылыш тапҡан.

Хәҙерге көндә үҙҙәренең этник берҙәйлеген һаҡлап ҡалған дыуан ырыуы башҡорттары Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында, Дыуан, Мәсетле, Балаҡатай, Ҡыйғы, Нуриман районДарында тупланып йәшәй. Уларҙың табындар менән генетик туғанлығы заманса биогенетик тикшеренеүҙәр менән дә раҫлана. Дыуандарҙың әлеге ваҡытта билдәле булған генетик маркеры - R1a-M198 гаплотөркөмө, уның айырым кластерҙары табын, ирәкте, унлар, балыҡсы, таныпсы, көҙәй, ҡошсо, төп әйле, ҡатай ырыуҙарына хас.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 27-30-сы һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Сталинградтан - Ворошиловградҡа!

Шул уҡ ваҡытта Ворошиловград янына килеп еткән 279-сы уксы һәм 21-се тау-атлы дивизиялары резервтан килтерелгән дошман көстәре ҡамауында ҡала, совет яугирҙары билгән Петровка ауылын һәм Тельман исемендәге совхоз поселогын дошман самолеттары бомбаға тота. 8-се кавкорпусҡа ошо частарға ярҙамға килергә бойорола. 112-се дивизияға ла, Яңы Анновка ауылы аша үтеп, ҡамауҙа ҡалғандарҙы ҡотҡарыу бурысы йөкмәтелә. Беҙҙең яугирҙар яғынан Белоскелеватый ауылына һөжүм итеп ҡарай, әммә дошмандың үтә ныҡлы оборонаһын емереү мөмкин булмай. Бында 275-се полк пулеметсылары Сәлих Сыртланов һәм Фәйзи Дәүләтовтар батырҙарса һуғыша. Улар үҙҙәренең станковый пулеметын Белоскелеватый ауылының көнбайышындағы ҡалҡыулыҡҡа урынлаштыра. Ауылдан сығып, беҙҙең яугирҙарға ҡаршы атакаға күтәрелеп тә өлгөрмәгән немецтарҙы, пулеметтан мәргән атып, ҡырып һала улар. 400-ҙән ашыу немец һалдаты беҙҙең пулеметсыларға ташлана. Сәлих Сыртланов яралана, әммә пулеметын ташламай. Ике батыр яугир 97 немец һалдатын юҡ итә. Немец атакаһы 4 сәғәт буйына тотҡарланып тора. Сәлих ауыр яраларынан һәләк була ошо тиңһеҙ алышта.

8 февралдә дивизия, немецтарҙың ныҡытылған оборона пункттарын урап үтеп, Яңы Анновка һәм Васильевка ауылдары йүнәлешендә хәрәкәт итә. Васильевка ауылы янындағы ҡалҡыулыҡтан дошман танкылары һәм пехотаһы беҙҙең яугирҙарға һөжүм ойоштороп ҡарай, әммә уларҙың атакаһы кире ҡаҡыла. Көндөҙгө сәғәт 2 тирәләрендә Тельман исемендәге поселок районында беҙҙең яугирҙар 2-се гвардия танк корпусы һәм 279-сы уксы дивизия позицияларына сыға. Шулай итеп, ҡамауҙа ҡалған частар ҡотҡарыла, сөнки дошмандың атакаларын кире ҡағыр өсөн өҫтәлмә көс бик тә кәрәк була ошо мәлдә.

10 февралдә полк яугирҙары Давыдовка совхозының көньяҡ яғына бәреп инә. Дошмандың ике взводҡа яҡын пехотаһын өлкән сержант Торғонбаевтың расчёты 76-миллиметрлы туптарҙан мәргән атып, сигенергә мәжбүр итә. Фәхретдинов һәм Фёдоровтың миномёт расчёттары, кесе лейтенанттар Гореловтың һәм Неволиндың ике ут взводы, боеприпастарын атып бөтөп, ҡамауҙа ҡала. Әммә улар, штык һәм гранаталары менән немецтарға ташланып, үҙебеҙҙекеләр яғына сыға. Горелов ошо алышта һәләк була.

Ошо бәрелештәрҙә 294-се атлы полк яугирҙары ла һыр бирмәне, һәр саҡта ла дошманды дөрөп, алға ынтылды. Ворошиловград эргәһендәге алыштарҙа 4-се эскадрон командиры ярҙамсыһы Н.Н. Шағәлиев һәм уның яуҙаштары 10 немец офицеры һәм һалдатын юҡ итте, ә шул уҡ эскадрондың ҡул пулеметы наводчигы Мәғәнүр Әхмәтйәнов дошманды эҙәрлекләп барғанда 9 немец һалдатын сафтан сығарҙы, береһен әсиргә алды. Был яугирҙарға "Батырлыҡ өсөн" миҙалы тапшырылды.

Комдив Миңлеғәли Шайморатовтың урынбаҫары Григорий Белов үҙенең "Ҡаһарманлыҡ һәм дан юлы" ("Путь мужества и славы") тип исемләнгән хәтирәләр китабында 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарына юғары баһа бирә, уларҙың Дон далаларында барған ҡанлы алыштарҙа батырҙарса һуғышып, 8-се кавкорпус ҡатнашҡан һәр боевой операцияның уңышлы тамамланыуын тәьмин итеүен билдәләй. "1942 йылдың ноябренән 1943 йылдың 24 ғинуарына тиклем Башҡорт дивизияһы алыш-бәрелештәр менән 400 саҡрымға яҡын юл үтте. Шул ваҡыт араһында 3 меңдән ашыу дошман офицеры һәм һалдаты, уның 36 танкыһы, 6 самолеты, 500-ҙән ашыу автомашинаһы юҡ ителде, 5 боеприпас, 8 аҙыҡ-түлек склады һәм башҡа хәрби техникаһы ҡулға төшөрөлдө: 31 самолет, 20 танк, 100-ҙән ашыу автомашина, бик күп орудие һәм пулеметтар. Дивизия дошмандың 2 меңдән ашыу һалдатын һәм офицерын әсиргә алды, 100-ҙән ашыу тораҡ пунктарын азат итте".

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

*✓ Башҡорт халҡының мең йыллыҡтар дауамында формалашҡан милли философияһы бар. Башҡорт тормоштоң, фани донъяның асылын, байлыҡты теге донъяға алып китеп булмағанын башҡаларҙан яҡшыраҡ, төптәнерәк аңлай.*



**Бөгөнгө әңгәмәбеҙ барыһынан элек Бөйөк Ватан һуғышынан аҙаҡ тыуған быуындарҙа ҡыҙыҡһыныу уятып, йөрәктәребеҙ аша үтә торған һөйләшеү булыр, тип уйлайым. Һүҙебеҙ Башҡортостанда ойошторолоп, ошо үлемесле һуғышта мәңгелек дан яулаған 112-се Башҡорт атлы дивизияһы, уның батырҙарҙан батыр командиры, генерал-майор Миңлегәли Минһаж улы Шайморатов, һөйәктәре сит-ят ерҙәрҙең урман-ҡырҙарында ятып ҡалған башҡорт ир-егеттәре, ғөмүмән, башҡорт халҡының сикһеҙ ҡаһарманлығы хаҡында барасаҡ. Әңгәмәсебеҙ - Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, яҙыусы Флүр Миншәриф улы ҒӘЛИМОВ.**

# ГЕНЕРАЛ
## башҡорт батырлығы



**▸ Флүр Миншәриф улы, һеҙ яңыраҡ "Генерал Шайморатов" тип исемләнгән роман яҙғанһығыҙ икән. Ошо батырыбыҙҙың исемен белмәгән башҡорт юҡтыр ул. Беҙ бала саҡта уҡ: "Башҡорттар китте һуғышҡа", - тип йырлай инек. Һуғыш темаһына арналған әҙәби әҫәргә тотонғанда һеҙҙә ниндәйерәк кисерештәр булды?**

- Ысынлап та, беҙ бәләкәйҙән үк һуғыш уйнап, "Шайморатов генерал" йырын йырлап үҫтек. Беҙҙән аҙағыраҡ тыуғандар ҙа шундай булды. Ул саҡта бит ауыл тулы бала-саға, уйнамаған уйын юҡ, әммә һуғыш уйындарын нығыраҡ ярата инек. Ни өсөн шулай? Сөнки беҙ яугир халыҡ: меңәрләгән йылдар буйына ата-бабаларыбыҙ Ватанын, Уралын һаҡлап, батырҙар хаҡында дастандар, ҡобайырҙар сығарған, ул-ҡыҙҙарын ошо әҫәрҙәр ярҙамында батырҙар традицияларында тәрбиәләп үҫтергән. Беҙ ҙә ошо халыҡтың балалары бит. Ил-йорт, Тыуған ил, халыҡ өсөн һуғышҡа барыу изге йола, намыҫ бурысы, ҡаҡшамаҫ ҡанундар сифатында ҡанығыбыҙға һеңгән.

**▸ Әйткәндәй, башҡорт халыҡ эпостарында лә батыр образы алғы планда тора...**

- XX быуат башында йәшәгән Швейцария ғалимы, психиатр Карл Густав Юнг кеше психикаһы структураһында "коллективное бессознательное" тип үҙе нарыҡлаған бик тәрән ҡатлам барлығын асыҡлаған. Был ҡатлам Ер йөҙөндәге бөтә кешеләр өсөн бер иш һәм быуындан-быуынға күсә килгән дөйөм кешелек тәжрибәһе тупланған "кумта-хазина" ул. "Коллективное - бессознательное"ның йөкмәткеһе - архетип-тәүгеобраздар. Йәғни бында меңйыллыҡтар дауамында формалашып, кешенең төпкө (боронғо) аңын билдәләп торған идеялар, иң боронғо образдар хаҡында һүҙ бара. Башҡорттарҙағы батыр образы - халҡыбыҙҙың төп архетибы ул. Һәм ул Юнг тәғлимәтендәге герой архетибына тап килә. Һәр халыҡтың милли характерына хас төп архетибы була. Мәҫәлән, немецтар үҙҙәренең булмышына яраҡлы - "хранитель" - һаҡлаусы, йәһүдтәр - байлыҡ туплаусы һәм башҡа шундайыраҡ феномендар, йәғни образдар. Башҡорттоң төп архетибы - батыр феномены нигеҙендә яугир намыҫы төшөнсәһе ята. Халҡыбыҙҙың менталитетын, йәғни булмышын яугир намыҫына тап төшөрмәү, ил, Ватан хаҡына тән-йәненде лә фиҙа ҡылыу кеүек әхлаҡи-философик идеялар билдәләй. Халҡыбыҙ байлыҡ тупларға һәм уны һаҡларға ашҡынып тормай, намыҫын алтын-көмөшкә, аҡсаға алыштырмай. Был беҙҙең дөйөм тормош философиябыҙ. Башҡорт халҡының мең йыллыҡтар дауамында формалашҡан милли философияһы бар. Башҡорт тормоштоң, фани донъяның асылын, байлыҡты теге донъяға алып китеп булмағанын башҡаларҙан яҡшыраҡ, төптәнерәк аңлай. Бәғзеләр балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ хаҡына байлыҡ туплайбыҙ, тип, урлаша-мутлаша ла, үҙ ғәмәлдәрен аҡларға тырыша. Был да башҡорт фәлсәфәһенә тура килмәй - һәр бала яҡты донъяға үҙ өлөшө менән тыуа. Харам байлыҡ кешене боҙа, ул мал өсөн енәйәт ҡылырға ла әҙер була, үҙе лә торғаны бер хайуанға әйләнә.

**▸ Һуғыш темаһына арналған әҙәби әҫәргә тотонғас, халҡыбыҙҙың тарихи яҙмышы хаҡында ла уйланғанһығыҙҙыр, моғайын. Башҡорт ҡәүеме - батырҙар тыуҙырыусы халыҡ, һеҙ ошо фекерҙе хуплайһығыҙмы?**

- Тап шулай. Бына Тарихи Башҡортостан ерҙәрен күҙаллап ҡарайыҡ. Һамарҙан, Һарытауҙан алып Екатеринбургҡа, Силәбегә, Кама буйҙарынан Урал арьяғына тиклемге территория башҡорттоҡо булған. Бындағы топонимика ошо хаҡта һөйләй. Шул тиклем ҙур киңлектәрҙә тик яугир халыҡ ҡына биләп, һаҡлап тота ала. Шуға ла башҡорттоң батырҙары ла бихисап.

**▸ X быуат башында, 922 йылда, ғәрәп хәлифе Мөктәдир илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙлан юлъяҙмаларына уларҙың каруаны башҡорттар йәшәгән ерҙәргә яҡынлашҡас, бик ныҡ ҡурҡыуҙары хаҡында яҙып ҡуйған. Был, бәлки, халҡыбыҙҙың шул замандағы үҙенсәлекле "халыҡ-ара дипломатияһы" булғандыр?**

- Башҡорт иленә рөхсәтһеҙ инеү мөмкин булмаған. Әммә изге ниәт менән килгән ҡунаҡтарға, сауҙагәрҙәргә теймәгәндәр. Бына тағы ла бер тарихи факт: ярты донъяны яулаған монголдарға ҡаршы башҡорттар 14 йыл буйына һуғышҡан. Унан инде Сыңғыҙ хан хакимиәте, башҡорттарҙың яугирлыҡ маһирлығын иҫәпкә алып, уларға союздаш булырға тәҡдим яһай. Башҡорттар менән килешеү төҙөлөп, уларға аҫабалыҡ хоҡуғы бирелә. Башҡа берәй илдә тотош халыҡ ер хужаһы булдымы икән, тигән һорау тыуа: был хатта Сыңғыҙхан кеүек йыһангирҙарҙың да халҡыбыҙҙың бөйөклөгөн таныуын белдерә. Унан һуң, Башҡорт иле үҙидаралыҡ ҡанундары нигеҙендә йәшәй һәм берләшә. Быны ерыу демократияһы, тип атап була, ул башҡорт йәмғиәтенә боронғо замандарҙаң хас: халыҡ өсөн мөһим барса мәсьәләләр ҡүмәкләп, бергәләп хәл ителгән, башҡорт йыйындары институты, уның статусы рус дәүләтенә ҡушылғас та бер нисә быуат һаҡланып ҡала. Бындай ҡоролош Новгород республикаһының вече тип аталған идара итеү формаһынан күпкә алдараҡ барлыҡҡа килеп, унан алдынғыраҡ, һөҙөмтәлерәк булған. Йәнә бына нимәгә иғтибар итергә кәрәк: һәр бер ырыуҙа абруйлы ил ағалары була, әммә уларҙың береһе лә хан дәрәжәһенә ымһынмай. Сөнки Башҡорт илендә һәр бер ырыу үҙаллы көн итеп, үҙ азатлығын иң оло ҡиммәт итеп танып, уны һаҡлай алған. Ә хан булыу - башҡаларҙың иркен сикләүгә, уларҙы буйһондороп тотоуға, хатта үлемгә дусар итеүгә алып бара. Быны азатлыҡты ғүмерҙән дә өҫтөн күргән яугир халыҡ бер нисек тә ҡабул итә алмаған.

**▸ Әхмәтзәки Вәлиди Туған "Башҡорттарҙың тарихы" әҫәрендә төрки риүәйәттәренең иң боронғоһо булған Уғыҙ дастанынан башҡорттар тураһындағы мәғлүмәтте килтерә. Ул халҡыбыҙҙың төркиҙәр донъяһында ҡеүәтле һәм хәйләкәр (көслө һәм ғәййәр) халыҡ булып танылыуын һәм үҙенең ғорурлығы, ҡыйыулығы арҡаһында һис бер йыһангирға баш эймәгән ҡәүем сифатында иҫкә алыныуын билдәләй.**

- Халҡыбыҙҙың бөйөклөгөнә тарих шаһит. Нисәмә быуат ҡоралллы көрәшкә күтәрелә алған ул, ә 1917 йылда Башҡорт республикаһын иғлан итеп, үҙ хөкүмәтен булдырып, ғәскәр төҙөп, граждандар һуғышы йылдарында ҡан түгеп, үҙ дәүләтселеген яҡлап-һаҡлап ҡалған. Был үҙе генә лә халыҡтың көсөн күрһәтә. Әлбиттә, нығ ҡырылғанбыҙ шул йылдарҙа, халҡыбыҙҙың һаны 650 меңгә генә ҡалған. Ҡайһы саҡта, әгәр күтәрелмәгән булһаҡ, халыҡ иҫәбе әлеге ваҡытта байтаҡҡа күберәк булыр ине, тип тә уйлата. Әммә башҡортто тыйып тотоп та булмаған ул замандарҙа, ул барыбер күтәрелер ине. Башҡорт халҡының түгелгән ҡаны хаҡына Советтар Союзында 15 союздаш, 20 автономия республикалары төҙөлөп, ни саҡлы ҡәүемдәр дәүләтле булып киткәндәр! Ул халыҡтар был турала беләме икән?

**▸ Башҡортостанда именлек хеҙмәтендә эшләгән генерал Виктор Палагин да үҙенең бер интервьюһында бына ни тигәйне: "Әгәр Зәки Вәлидовтың армияһы, башҡорт ғәскәре Совет власы яғында һуғышмаһа, Колчак Варшаваға тиклем барып етер ине".**

- Колчак армияһының уңышһыҙлыҡтары башҡорт полктарының ҡыҙылдар яғына сығыуынан башлана. Тәүге осорҙа ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙе ҡыуып йөрөткән башҡорттар аҡтар менән дә ҡурҡыу белмәй һуғыша. Улар Колчакты ла баҙата, Петроградты Юденичтан ҡотҡара. Ғәскәрлек бурысын теүәл үтәй алыу, яуҙа бер-береңә арҡаҙаш булыу, ҡыҫкен хәлдәрҙә юғалып ҡалмау - былар барыһы ла башҡорт яугирҙарына хас сифаттар. Улар меңәр йылдар буйына тәрбиәләнгән. Армияла әлегә тиклем бер әйтем бар: иң яҡшы һалдат - ул башҡорт һалдаты.

**▸ Генералыбыҙ Миңлегәли Шайморатов хаҡында ла, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы тураһында ла бик күп документаль китаптар, әҙәби әҫәрҙәр яҙылған. Һеҙ, Флүр Миншәриф улы, ошо темаға яңы әҙәби әҫәр яҙырға йөрьәт иткәнһегеҙ. Быны сәбәптәре лә барҙыр бит?**

- Ысынлап та, данлы Башҡорт дивизияһына, комдив Миңлегәли Шайморатовҡа арналған әҫәрҙәр байтаҡ ул. Әммә уларҙың ҡасан яҙылғанына иғтибар итегеҙ. Иң тәүҙә, уҙған быуаттың 60-сы йылдарында, дивизияның "Ҡыҙыл атлылар" гәзитендә эшләгән Әхтәм Ихсандың "Утыҙ ыласын" һәм "Саҡма тояҡ аттарҙа" тип аталған әҫәрҙәре баҫылып сыға. Әммә ул саҡта ошо авторҙың яҙғандарын яуҙан тере ҡайтҡан шайморатовсылар бик нык тәнҡитләй. Сөнки Ә. Ихсан үҙенең яҙмаларында йыш ҡына уйлап сығарылған фәстереүҙәр ҡуллана. Башҡа әҫәрҙәрҙән Тайфур Сәғитовтың "Аманат" поэма-эссеһын (1989 йылда, бынан 32 йыл элек яҙылған), Рама-

*Башҡорт дивизияһы тарихын етди кимәлдә өйрәнә башларға, кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҙып яҡларға күптән ваҡыт етте, тип уйлайым. Йәнә бына нимәгә иғтибар иттем. 112-се Башҡорт атлы дивизияһы һәм генерал-майор М.М. Шайморатов тураһында яҙылған документаль әҫәрҙәр, иҫтәлек-хәтирәләр авторҙарының күпселеген рус һәм татар милләтле кешеләр тәшкил итә. Бында ни әйтәһең инде - эшһөйәрлектәренә, егәрлелектәренә афарин! Ә беҙ нимә көтөп ятабыҙ? Башҡорт дивизияһы тарихының иге-сиге юҡ! Үҙ тарихыбыҙҙы үҙебеҙгә яҙыу фарыз. Минең өсөн төп этәргес көс - Бөйөк Ватан һуғышында Тыуған илебеҙ һәм киләсәк быуындар өсөн йәндәрен фиҙа ҡылған ата-бабаларыбыҙҙың рухтары алдында беҙҙең быуындың һәм шәхсән үҙемдең оло бурысымды таныу булды.*

*✓ Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында илебеҙҙә 46 милли хәрби берләшмә (часть) ойоштороla, шуның 19-ы атлы дивизия. Әммә һуғыш аҙағынаса сафта тик Башҡорт атлы дивизияһы ғына тороп ҡала.*

# ШАЙМОРАТОВ - СИМВОЛЫ

зан Өмөтбаевтың "Таһир Күсимов" романын (1990 йылда, бынан 31 йыл элек яҙылған), Янybай Хамматовтың "Башҡорттар китте һуғышҡа" романын (шулай уҡ 1990 йылда яҙылған), Йыһат Солтановтың 2007 йылда нәшер ителгән "Башҡорт дивизияһы"(жанры "төрлө мәғлүмәттәр" тип билдәләнгән) китабын иҫкә алырға була. Документаль әҫәрҙәрҙән Тамимдар Әхмәҙиевтың, Фәрит Вахитовтың, А.И. Захаровтың, Б.Я. Малородовтың һәм башҡа авторҙарҙың китаптарын, дивизия ветерандары хәтирәләренән Сабир Ҡадировтың, Сәғит Әлибаевтың, Әнүәр Насыровтың, Григорий Беловтың һәм башҡаларҙың яҙмаларын атап китергә мөмкин. Ә тормош һуғыш тураһында бер-бер артлы яңы бәхәстәр, хатта сенсациялар тыуҙырып ҡына тора. Ғөмүмән, Башҡорт дивизияһы тарихын етди кимәлдә өйрәнә башларға, кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҙып яҡларға күптән ваҡыт етте, тип уйлайым. Йәнә бына нимәгә иғтибар иттем. 112-се Башҡорт атлы дивизияһы һәм генерал-майор М.М. Шайморатов тураһында яҙылған документаль әҫәрҙәр, иҫтәлек-хәтирәләр авторҙарының күпселеген рус һәм татар милләтле кешеләр тәшкил итә. Бында ни әйтәһең инде - эшһөйәрлектәренә, егәрлелектәренә афарин! Ә беҙ нимә көтөп ятабыҙ?..

Һуңғы йылдарҙа 112-се Башҡорт атлы дивизияһы хаҡында әҙәби әҫәрҙәр яҙған авторҙар булманы тиерлек. Ә Башҡорт дивизияһы тарихының иге-сиге юҡ! Үҙ тарихыбыҙҙы үҙебеҙгә яҙыу фарыз. Минең өсөн төп этәргес көс - Бөйөк Ватан һуғышында Тыуған илебеҙ һәм киләсәк быуындар өсөн йәндәрен фиҙа ҡылған ата-бабаларыбыҙҙың рухтары алдында беҙҙең быуындың һәм шәхсән үҙемдең оло бурысымды таныу булды.

**Һеҙҙең роман быға тиклем яҙылған әҫәрҙәрҙән нимәһе менән айырыла?**

- Мин Бөйөк Ватан һуғышына, унда ҡатнашҡан һалдат һәм командирҙарға ҡарашымды әҙәби образдар аша сағылдырыр өсөн һуғыш темаһын, уның сәбәптәрен төптәнерәк, тәрәнерәк өйрәнергә, эҙләнергә тырыштым. Башҡорт дивизияһы тарихын, башҡорт менталитеты, характеры үҙенсәлектәрен СССР - Башҡортостан мөнәсәбәттәре аша ғына түгел, донъя масштабында күҙаллау мөмкинлеген барланым. Романым коммунизм - фашизм бәрелешен һүрәтләүҙән һәм примитив яу күренештәренән генә түгел, ҡатлы-ҡатлы конфликттарҙан туҡылған. Шулай уҡ, дөйөм донъя әҙәбиәтендә һәм сәнғәтендә киң билдәле мәҙәни кодтарҙы үә символдарҙы ла әҫәремдә ҡулландым.

**Әҙәби әҫәр менән документаль әҫәрҙе берләштергән бер фактор бар - ул да булһа ысынбарлыҡты объектив сағылдырыу. Ошо хаҡта ни әйтер инегеҙ?**

- Романымды "Генерал Шайморатов" тип атағас, әҫәрҙә уның тормош юлына бәйле эпизодтар сағылдырыла, сюжет юлы уҡыусыны генералдың үлеменә, 1943 йылдың 23 февраленә тиклем алып бара. Әлбиттә, романда реаль Башкавдивизия яугирҙары үҙ исемдәре менән атала, улар ысынбарлыҡтағы һуғыш хәрәкәттәрендә нисек ҡатнашҡан, шулай һүрәтләнә. Быны Ватаныбыҙ һәм киләсәк быуындар хаҡына йәндәрен аямаған ата-бабаларыбыҙҙың исемдәре онотолмаһын, уларҙың вариҫтары ата-олаталарын, яҡын нәҫелдәрен ошо әҫәремдән тапһын һәм был китапты ғаилә ҡомартҡыһы итеп һаҡлаһын тип, махсус рәүештә эшләнем.

**Бынан бер нисә йыл элегерәк республикабыҙ патриоттары "Геройҙың ҡайтыуы" тип исемләнгән акция ойоштторғайны, уның төп маҡсаты - Миңлеғәли Шайморатовҡа Рәсәй Геройы исемен бирҙертеү ине. Халыҡтан йөҙәр меңләгән имзалар йыйылып, Кремлгә мөрәжәғәт тә ебәрелгәйне...**

- Эйе, халҡыбыҙ үҙ батырына был юғары исемде 70 йылдан ашыу юлланы. Әммә ул саҡта моратҡа ирешеү мөмкин булманы. Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров ошо мәсьәләне хәл итә алды - ил Президенты Владимир Путиндың Указы менән Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовҡа (үлгәндән һуң) Рәсәй Федерацияһы Геройы исеме бирелде, уға тәғәйен Алтын Йондоҙ Башҡортостанға килтерелде. Халыҡ батырының ҡаһарманлығы рәсми рәүештә танылды. Башҡортостан йәмәғәтселегенең ҙур еңеүе булды ошо ваҡиға. Баш ҡалабыҙ Өфөнөң Совет майҙанында Шайморатов батырға мәрмәрҙән монументаль һәйкәл ҡуйыласаҡ - был да халҡыбыҙ, республикабыҙ өсөн ҡыуаныслы ваҡиға буласаҡ.

Башҡорт атлы дивизияһы, уның командиры - генерал Шайморатов башҡорт менталитетының иң сағыу символдарының береһелер. Башҡорт яугирлығы булмаһа, Башҡорт атлы дивизияһы ла булмаҫ ине. Шундай данлыҡлы хәрби подразделение Советтар Союзында ғына түгел, хатта бөтә донъяла ла булмаған. Күпме ордендар менән бүләкләнгән дивизия, күпме яугир иң юғары хәрби исемгә - Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған! Ә күпме шайморатовсыларҙың ҡаһарманлығы тейешенсә баһаланмай ҡалған - уны тик Аллаһ үҙе генә белә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында илебеҙҙә 46 милли хәрби берләшмә (часть) ойошторола, шуның 19-ы атлы дивизия. Әммә һуғыш аҙағынаса сафта тик бер - исеме үҙгәртелгән (16-сы гвардия Чернигов дивизияһы) 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ғына тороп ҡала. Башҡа милли частар йә уңышһыҙлыҡҡа осрап, тулыһынса туҙҙырыла, йәиһә төрлө ситуациялар арҡаһында тарҡатылыуға дусар була. Үкенескә күрә, Ҡыҙыл Армия командованиеһына оялаған хәрби чиновниктар, көнсөллөккә барып, аҫтыртын эш итә, башҡорт офицерҙарына ышанмаусанлыҡ күрһәтә, уларҙы милләтселектә ғәйепләп маташа, дивизияның башҡорт командирҙарын, төрлө сәбәптәр табып, башҡа частарға күсертә. Һуғыш бөткәс, дивизияның барса аттары Кавказға оҙатыла. Башҡортостанға бары бер генә ат - Кречет (Ҡорос ат) ҡайтарыла...

**Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙары башҡа частарға өлгө булған, уларҙы ҡаһармандарса һуғышырға өйрәткән тигән фекер менән килешәһегеҙме?**

- Тап шулай. 1942 йылдың июлендә Брянск фронтына килгәндә, беҙҙең атлылар тырымтырағай сигенеп, ҡасып килгән ҡыҙылармеецтарҙы осрата. Комдив Шайморатов уларҙы туҡтатып, оборона тоторға мәжбүр итә. Бында һуғыштың тәүге фажиғәле йылын да иҫкә алмай булмай. Бер 1941 йылда ғына немецтар Ҡыҙыл Армия частарына бер түгел 13 "ҡаҙан" (котел) ойоштора. Уларҙың ҡайһы берҙәрендә, мәҫәлән, Вязьма ҡамалышында беҙҙең 5 армия ҡыйратыла. "Ҡаҙан"дарҙа һәләк ителгәндәр урынына яңынан-яңы частар килтерелә, бер ниндәй әҙерлекһеҙ, хатта йүнле ҡоралдары ла булмаған һалдаттар һуғыш утына ырғытыла. Ә беҙҙең Шайморатов - ул полководец, юғары кимәлдәге хәрби белгес, иң элгәре башҡорт яугирҙарын һуғыш һөнәренә төплө һәм ентекле итеп әҙерләүҙе ойоштора. Ул немецтар менән һуғыштың нисек ауыр икәнен дә бик яҡшы белә: 1941 йылдың көҙөндә Мәскәү янында, Волоколамск шоссеһы районында, үҙенең 1-се айырым Кремль полкы менән фашистарға ҡаршы тороп, уңыш ҡаҙана, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Ғөмүмән, һуғыш темаһы - ҡот осҡос. Ул тотош фажиғәләрҙән тора. Иҫ китмәле көслө, бөтә Европа илдәрен тиерлек тапап үткән яу машинаһын - герман армияһын беҙҙең илебеҙ аяуһыҙ күп ҡорбандар килтереп, Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән генә еңеүгә өлгәшкәндер, тип уйлайым. Юғары көс Гитлерҙың аҡылын алғандыр - ул көҙгә тиклем үк СССР-ҙы еңеренә ышанып, ғәскәрҙәрен өс яҡҡа бүлеп ебәрә. Әгәр бар көстәрен бер йүнәлешкә - Мәскәүгә табан ебәрһә, һуғыштың ни менән бөтәрөн күҙ алдына килтереүе лә ҡурҡыныс...

Беҙҙең башҡорт яугирҙарына килһәк, ситуация бөтөнләйе менән икенсе. Башҡорттар фронтҡа килгәс, генерал Корзун комиссарына: "Был башҡорттар сигенмәйсә бер көн булһа ла тора алырҙармы икән?" - ти. Башҡорттар һуғышҡа инә. Көн торалар, аҙна торалар, өс ай торалар - береһе лә сигенмәй, береһе лә алғы һыҙыҡты ташлап ҡасмай, һуғыша ғына бирәләр. Дивизия яугирҙарының - башҡорттарҙың - ҡаһарманлығы хаҡында корпус, армия, фронт, Мәскәү һәм хатта немец гәзиттәре лә яҙа башлай. Билдәле шағир, "Красная Звезда" гәзитенең хәбәрсеһе Константин Симонов, данлыҡлы яҙыусы Илья Эренбург, әҙиптәр ағалы-энеле Турҙар һәм башҡа журналистар башҡорт яугирҙарын маҡтап, уларҙың дандарын бөтөн СССР-ға таратталар. Беҙҙең дивизия бөтөн Ҡыҙыл Армия өсөн өлгөгә әйләнә, совет пропагандаһы ла ошоно раҫлай: башҡорттар һымаҡ һуғышырға кәрәк!

**Бында бер сетерекле һорау тыуа: башҡорттар ҙа совет системаһында тәрбиәләнгән, коммунистик, атеистик ҡараштар һеңдерелгән. Ләкин улар үлемде инҡар итә, һәләк булыуын белә тороп, иң хәтәр алыштарға үҙе теләп бара. Был уларҙың Аллаһы Тәғәләгә, үлемдән һуң ожмахҡа әләгеүгә ышаныуҙарының билгеһе түгелме икән?**

- Беренсенән, яугир намыҫы, гендар кимәлендә һеңдерелгән башҡорт батыры кодексы беҙҙең халыҡ өсөн иң мөһим төшөнсәләрҙең береһе булған. Беҙҙекеләр тормошҡа йәбешеп ятмаған, яугир намыҫын ғүмеренән өҫтөнөрәк ҡуйған. Төптән уйлаһаң, нимә ул үлем? Бәлки, теге донъяла күпкә еңелерәктер? Әммә унда үҙ теләгең менән, йәғни "сиратһыҙ" китеү (суицид) ҡәтғи тыйыла. Ә яуҙа һәләк булыу - изге үлем. Һуғышта үлеүгә генә түгел, ғөмүмән, әжәлгә лә лайыҡлы булырға кәрәк бит әле. Бына ошоно беҙҙекеләр, башҡорт философияһына таянып, интуитив рәүештә аңлағандарҙыр, тип фаразлайым. Икенсенән, башҡорт яугирҙары һуғыш ҡырындағы шаһит сифатында үлемдән һуң Аллаһы ярлыҡауына, уның шәфҡәтенә инанғандыр.

Ошо романымды яҙғанда үҙем өсөн яңы рухи асыштар яһаным. Бына һуғышта әле мыйығы ла сыҡмаған, ҡыҙҙарҙы ҡосаҡлап та өлгөрмәгән йәш егеттәр үлә. Ҡатын-ҡыҙҙар, бер гонаһһыҙ балалар һәләк була. Быны бер нисек тә аңлатып булмаҫ һымаҡ тойола, былар оло ғәҙелһеҙлек итеп ҡабул ителә. Аллаһы Тәғәлә ошоларҙы нихәл тыймай, туҡтатмай икән, тигән уйҙар ярала күп кешеләрҙең башында. Миңә шундай уй килде: бындай үлемдәр, бәлки, Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтелер, фани донъяла яфаланған әҙәм балаларын ҡотҡарыу сараһылыр? Улар - имандарын юғалтҡан әҙәм балалары ҡуптарған аяуһыҙ һуғыштың бер ғәйепһеҙ ҡорбандары - туранантура ожмахҡа индереләсәк бит. Әгәр баҡый донъя булмаһа, был фанилыҡта яфа сигеүҙәрҙең бер мәғәнәһе лә булмаҫ ине бит...

**Генерал Шайморатов исеме менән бәйле тағы ла бер һорауҙы бирмәйенсә булдыра алмайым. Һуңғы ваҡытта комдивтың үлеме хаҡында төрлө уйҙырмалар күбәйеп китте. Йәнәһе, ул әсир алынған да, һатлыҡ казактар тарафынан язалап үлтерелгән. Ошо турала дивизиябыҙҙың Донбасстағы шанлы һәм трагик рейды хаҡында бер ни ҙә белмәгән, ниндәйҙер уйҙырмаларҙы күпертеп, матбуғатҡа, телевидениеға, интернет селтәренә сығарған ғалимдар ҙа бар. Кинорежиссер Р. Ҡоҙаяров "Генерал" тигән ике сериялы документаль фильм төшөрөп, Шайморатовтың үлеме хаҡындағы уйҙырманы ысынбарлыҡҡа тап килә, тип күрһәтә. Ошондай еңел-елпе сығыштарҙың сәбәбе, мотивтары барҙыр бит?**

- Бәғзе тыуған яҡты өйрәнеүселәр, журналистар, ғалим-ғөләмә, кинорежиссерҙар нисек тә булһа, ҡайҙан да булһа "көйҙөргөс" факттар соҡоп сығарып, уларҙан асыш, сенсация яһап, үҙҙәрен оло белгес итеп күрһәтергә, баһаларын күтәрергә, хәҙергесә әйткәндә, хайп алырға ымһына. Генерал Шайморатов үлеменең "яңы версияһы" Украинаның Глухов педуниверситеты хеҙмәткәре А.А. Масловтың уйҙырмаларынан хасил булған, ул уны АҠШ-та ла баҫтырып сығарған. Был фальсификация бик еңел фаш ителә. Бына бер аргумент: әгәр ҙә М. Шайморатов немецтар ҡулына эләккән булһа, гитлерсылар генерал һынлы генералды пленға алдыҡ, тип мотлаҡ рәүештә бөтә донъяға шапырыныр ҙар ине. Һәм әлбиттә, фашистар ундай ҙур әсирҙе казактарға язаларға бирмәҫ ине. Йәнә тағы: немец педанттары генералды әсирлеккә алыуҙарын мотлаҡ часть документтарына теркәрҙәр ине. Ә беҙҙең еңел баштар, алдын-артын уйлап та тормайынса, сүптән сүмәлә ҡоя. Был уйҙырма - асылда башҡорт батыры Шайморатовтың яҡты хәтерен бысратыу ғына ул...

**Шулай итеп, яҙыусының "Генерал Шайморатов" романы "Ағиҙел журналының август һанында тулыһынса баҫылып сығасаҡ. Журнал редакцияһында әйтеүҙәренсә, күберәк кеше уҡыһын өсөн, журналдың ошо айҙағы тиражын арттырырға тигән ниәттәре бар. Ҡыҙыҡһынған һәр кемдең редакцияға барып йәки электрон почта аша 90 һум аҡса күсереп, журналдың август һанын һатып алыу мөмкинлеге бар.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әңгәмәләште.**

**Киләһе йылда 1812 йылғы Ватан һуғышына 210 йыл тула. Был яуҙа ҡатнашыусылар араһында башҡорттарҙың айырым роле, даны тураһында бөтә донъяға билдәле. Француздарҙың башҡорттар менән беренсе осрашыуы 1807 йылда уҡ була. Унда ике полк башҡорт һыбайлыһы һуғышһа, аҙаҡтан - 28 полк. Рәсәйҙе һаҡлар был тиклем ғәскәрҙе урыҫтан ҡала башҡа бер милләт тә бирмәгән. 2022 йылда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы дәүләт органдары менән берлектә ошо тарих хәтерен яңыртыр байтаҡ саралар планлаштыра. Шуларҙың береһе - яҙыусыбыҙ Ғәлим Хисамовтың "Француз яуы" документаль романын баҫтырып сығарыу. "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары иғтибарына ошо әҫәрҙән бер нисә өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**




## Башҡорт быуаты

Әҙәм балаһы Ер шарының ҡайһы ғына тарафында ҡасан ғына йәшәмәһен, мәле еткәс, үҙенә-үҙе һорау бирә:

- Кем мин? Кем минең халҡым? Кемдән беҙ бар булғанбыҙ һәм беҙ ҡайҙа китеп барабыҙ?

Һорауҙар бер сама булһа ла, һәр кешенең яуабы үҙенсә. Кемдер яуапты үҙенән олораҡ быуындан ишеткәненә нигеҙләнеп таба; икенсе берәү олатай-өләсәйҙәренең иртәктәренә, хикәйәт, мәҡәлдәренә таянып үҙе уйлап сығара; өсөнсөләр уҡыған китаптарынан яуап эҙләй. Яуаптар бик күп төрлө, әммә уларҙың һәммәһендә лә бер үк йөкмәтке төҫмөрләнә. Әйтәйек, XVIII быуатта йәшәгән кешеләрҙең барыһы ла тиерлек:

- Кеше Ер йөҙөнә бер тигеҙ итеп яратыла. Тик ул йән эйәһе булғас ҡына әллә нисә төргә бүленә,- тип яуаплай.

Йөҙ, мең, миллион кеше тап ошолай уйлай һәм һәр береһе үҙе һөйләшкән телдә:

- Тәғәләбеҙ беҙҙе тигеҙ яратты, тик кешелек үҙе беҙҙе төрләндерҙе, - ти. Быға дәлил итеп, һәр кешенең үҙ исеме бар, төрләнеш ошонан башланды ла инде, тип миҫал килтерә. Ошонан һуң һәр кемдең үҙ яуабы башлана. Берәүҙеке икенсеһенә оҡшаш та, юҡ та һымаҡ...

Ошондай һорауҙарға яуап эҙләп, таңға тиклем керпек тә ҡаҡманы тиерлек Кинйә. Беренсе генә төнө шулай булһа, ни әйттең дә бит. Тәүгеһе генә түгел шул. Кисә төн уртаһында егеттәрен уятты ул.

- Шым ғына тороғоҙ ҙа, бөтөн нәмәләрегеҙҙе лә йыйып, аттар янына барығыҙ.

Үҙе лә нәмәләрен төрнәп, тышҡа сыҡты һәм ҡыуыштың ауыҙын япты. Егеттәре аттарҙы эйәрләп, кәрәк-яраҡты, уҡ-янды, һөңгөләрҙе урынлаштырып бөткәйне инде. Кинйә үҙ атына менде лә, һис тауыш сығармайынса, атлатып ҡына төйәктән ситкә китте. Егеттәре уның хәрәкәттәрен ҡабатланы. Байтаҡ барғас, күҙ алды яҡтыра төшкәс, соҡорораҡ ерҙә атын туҡтатты Кинйә һәм ергә ырғып төштө. Бүтәндәр ҙә унынса эшләне.

- Килегеҙ әле бында, - тип саҡырып алды һуғышсыларын Кинйә. - Беҙҙең өсөн һуғыш бөттө. Ҡояш сығыу менән Бүгәсте тоторға килерҙәр батша һанаттары, шуға ул тирәнән ҡасып ҡалырға кәрәк, тип уйланым мин. Белә-күрә тора дошмандың ҡулына инеп булмай бит инде. Шуға беҙ ул тирәнән ҡастыҡ,- тине.

- Ә Бүгәс һуң!

Егеттәрҙең береһе Пугачев тураһында һорау биргәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

"Мәрҙәс!", тип уйланы Кинйә. Үҙе тураһында түгел, түрәһен ҡайғырта алдан.

- Кисә әйттем мин уға,- тине Кинйә.- Иҫкәрттем. Аҙ ғына кешең менән бер ни ҙә ҡыра алмаҫһың, килеп баҫасаҡтар. Ҡас был тирәнән, тинем. Тынламаны. "Яҙғаны шулдыр инде. Күрәсәкте күрермен. Ҡасып та ҡайҙа бараһың? Барыбер тотасаҡтар", - тине. Хаҡ инде. Бүгәсәүҙе иректә ҡалдырмаҫтар.

- Ә һинсе? Беҙ?

- Мин бит бөтөн баш күтәреүселәрҙең башы түгел. Минең әһәмиәтем шул ҡәҙәр генә. Артымдан ҡалмай ҡыумаҫтар. Шул уҡ ваҡытта дошмандың ҡулына ҡалһаң, кәүҙәңде башыңдан айырасаҡтары ла билдәле. Шуны көтөп, Бүгәсәү янында ултырыу ҙа шәплек түгел. Шуға беҙ, бына алты кеше, дошман тешенән ҡасып барабыҙ.

- Ҡайҙа барабыҙ инде? Ҡайҙа ғына юлланһаҡ та, барыбер эҙләйәсәктәр бит.

- Эҙләйәсәктәр, әлбиттә. Әммә улар тапмаҫлыҡ итеп ҡасып та була бит.

Ҡараңғылы- яҡтыла биш ир Кинйәнең ауыҙына ҡарап шымтайҙы.

- Беҙ әле күмәк. Алтаулап бергә йөрөһәк, эҙ яҙҙырыу ҡыйын буласаҡ. Шуға икегә бүленергә кәрәк, тимен. Ике кеше минең менән көнбайышҡа табан китербеҙ. Өсәү - ҡайтыр яҡҡа. Хәҙер эре ҡоралдарҙы, тимер күлмәктәрҙе бер урынға йыйыштырып ҡуйырбыҙ. Улар беҙҙең кемлекте шунда уҡ белгертеп тора. Хәнйәрҙәрҙе сепрәккә төрөп, йәшертен генә үҙебеҙ менән алырбыҙ. Етәктәге аттарҙы һатҡанда яҡшы булыр ине. Беҙгә хәҙер аҡса кәрәгәсәк. Ашау ҙа, ятыр урын да бынан һуң тик түләүле буласаҡ бит. Ҡайтыусыларға әйтер һүҙем бар. Бик һаҡ йөрөгөҙ. Хәҙер бөтөн ерҙә лә һуғышта ҡатнашҡандарҙы эҙләйәсәктәр. Илгә имен-аман ҡайтып етһәгеҙ, шунда уҡ өйҙәрегеҙгә таралышмағыҙ. Минең ауылдан йыраҡ түгел Оҙон мәмерйә тигән ер бар, шунда инеп ятып торогоҙ. Донъя һилләнгәс кенә ауылдарығыҙға китерһегеҙ.

Оло Иҙелгә етәрәк айырылыштылар. Кинйә үҙенекеләр менән көндөң байышына тартылды, ауылдарҙы урап уҙҙылар. Өс көндән һуң ғына йәнә бер ауылға етә яҙып туҡтанылар. Бының сиркәүе күренмәй, башҡорттоҡона оҡшаш кейеҙ тирмәләр бар. Моғайын, ноғайҙарҙыр, тип уйланы Кинйә. Башҡорттоҡо һымаҡ тирмә ҡаҙаҡта ла, ноғайҙа ғына була торған. Ҡаҙаҡ түгелдер, сөнки улар тирмәне тик йәйләүҙә генә ҡора. Ә бында ағас өйҙәр араһына тартылған. Кинйә ауыр кейемен систе, күлдәк өҫтөнән еңел сәкмән генә һалды, башына таҡыя кейҙе һәм йәйәүләп ауылға китте.

***

- Батшанан хәбәр! Батшанан хәбәр килтерҙеләр! Батшабыҙ Алексей Михайловичтың улы тыуған.

Баярҙарҙың күбеһе яңылыҡты күҙен асалаҡ-йомалаҡ тыңланы ла:

- Ярар, - тип, йоҡоһон дауам итте.

Әммә йоҡларға барыбер ирек бирмәнеләр. Күп тә үтмәне, шул уҡ ҡапҡаларҙы яңынан шаҡынылар, шул уҡ ҡарауылсылар яңынан һикерешеп торҙо һәм хеҙмәтсе ҡатын-ҡыҙҙы уятты. Тегенеһе баярҙың ҡатынын йоҡоһонан бүлде:

- Батшабикәнән хәбәр. Батшабикәбеҙ Наталья Кирилловнаның улы тыуған!

Яңылыҡты төрлө йортта төрлөсә ҡабул иттеләр. Берәүҙәр был хәбәргә үҙ балаһы донъяға килгәндәй шатланды, йоҡоһон өҙөп, батша вариҫына кем тип исем ҡушыу, ниндәй бүләк әҙерләү тураһында уйлашты, Натальяның хәле менән ҡыҙыҡһынды. Икенселар, бимазаламағыҙ әле, тип әйләнеп ятты. Өсөнсөләр һүгенде. Батшабикә булырға ул кәнтәйҙең хоҡуғы юҡ ине. Балаһы ла батша улы исемен йөрөтә алмай, тинеләр. Хикмәт шунда, Русиә батшаһы Алексей Михайлович, тәүге ҡатыны үлгәс, мөхәббәт артынан ҡыуып, Наталья Кирилловна Нарышкинаға өйләнде. Фамилияһынан уҡ күренеп тороуынса, Нарышкина аслан урыҫ нәсәбенә ҡарамай, Нарыштар* бөйөк кенәз Василий Дмитров (мең да бер йөҙөнсө йылдарҙың уртаһы) ваҡытында барлыҡҡа килтерелгән Ҡасим ханлығында йәшәп, тамырҙары менән Сынғыҙ ханға йә булмаһа хан менән ҡуша һуғышып йөрөгән бөйөктәргә барып тоташа ине. Нарыштар тәүҙә бей, унан урыҫсалап кенәз дәрәжәһен йөрөттө, ләкин урыҫ һимматлеһе баяр булманы.

Наталья Кирилловна мағуллығын, йә иһә Мәскәү урыҫтары араһында әйтелгәнсә, татарлығын белмәй ҙә ине. Ул Ҡасим ханлығында түгел, Мәскәүҙең үҙәгендә баяр Артамон Сергеевич Матвеев ғаиләһендә хеҙмәтсе сифатында үҫте һәм батша Алексей Михайловичты үҙенең Алла биргән матурлығы менән әсир итте. Осрашыу ҙа уйламағандан булды. Бынығын да Алла әшкәрткәндер инде. Алексей Михайлович буйҙаҡ ҡалғас, Матвеевҡа киске ашҡа ингәйне, буласаҡ батшабикәне шунда күреп ҡалды.

Бына шуға Мәскәү күренеклеләре араһында батшаның улы тыуыу ваҡиғаһын бигүк шатлыҡ менән ҡабул итмәнеләр. Ысынлап ҡыуаныусылар, моғайын, Нарышкиндар, урыҫ араһында йөрөп, улар алдында сәсе менән ер һеперергә әҙер торған татар фамилиялы кенәздәр булғандыр. Улар батшаның татар ҡанлы ҡыҙҙы алыуына ла шик-шөбһә менән ҡарағайны. Батша был эште бер уйын кеүегерәк күрәлер, тинеләр. Ысынлап та, өйләнгәс, никахтың оҙайлы булмаҫын, Натальяға мөхәббәте һүнгәс, ҡатындың сәсе алдыртылып, монастырға оҙатыласағын нарыҡланылар. Шул шик уҙмағайны әле. Натальяның балаһы тыуғас, ысын күңелдән һөйөндөләр. Урыҫ бөйөктәре эсенә татар ҡаны инде, былай булһа, бүтән татарҙарға ла Мәскәүҙә еңелерәк тын алырға мөмкинлек тыуыр, тип фаразланылар.

***

Аҫабаның төбөнә төшөү Кинйәнең үҙен дә тетрәндерҙе һәм елкендерҙе. Башҡортто халыҡ-милләт иткән нәмә ошо аҫаба бит инде. Атай ере. Атайҙан ҡалған ер уландың үҙен, ғаиләһен туйҙырған, кейендергән, ямғырҙан һәм һыуыҡтан һаҡлар өй, көтөү-көтөү мал аҫрарлыҡ көтөүлек һәм сабынлыҡ, эсәр һыу, тартыр ҡурай, күкрәгенде киреп йырларлыҡ иркенлек - һәммәһе лә атай ере. Яҙмышы ла, булмышы ла ер менән бәйләнгәс, йәнен-тәнен аямайынса һаҡлаған уны башҡорт. Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын. Аҫаба тураһында бит инде ул бөйөк йыр.

Аҫаба хоҡуғы башҡортто ошонда туплаған, тырым-тырағай түгел, берлектә генә атай ерен һаҡлап булырын төшөндөргән, шул ер өсөн йыраҡ мәмләкәттәргә яу менән дә, сауҙа менән дә, илсе булып та, белем эстәп тә, белем сәсеп тә барырға күнеккәндәр. Әсәм килен булған ер, кендегемде киҫкән ер... Башҡорттоң бөтөн ҡобайыры, риүәйәте, йыры, таҡмағы, әкиәте - ергә барып тоташа. Ир менән ҡатын мөхәббәте тураһында тасуир итһә лә, тел төбөндә ер ята.

Аҫаба - атай ере - ашатыр, эсерер, кейендерер ер генә түгел, аҫаба йәшәү рәүеше, хоҡуҡтар һәм йөкләмәләр теҙмәһе, халыҡ-ара килешеүҙәр нигеҙе, аҫаба - мәктәп-мәҙрәсәләрҙәге уҡыу әсбәптәрен башлаусы ла, фәнде, тарихты өйрәтеүсе лә, һағыныуҙы баҫыр, ижадҡа дәртләндерер ҡоромаҫ сығанаҡ та ул...

Кинйә аҫаба тураһында уйлаған һайын уның киңлеген, тәрәнлеген, бөйөклөгөн нығыраҡ төшөнә барҙы. Аҫаба башҡорт өсөн иң ыңғай, иң ҡулай, иң мөҡәддәс күренеш кенә түгел, уның ҡайғыһы, аһзары, түгелгән ҡаны менән күҙ йәше лә. Әгәр беҙҙең ҡанды бергә йыйһаң, ҡыҙылайыр ине диңгеҙҙәр.

- Батырлыҡ менән бахырлыҡ, ғорурлыҡ менән мәкер...
- Шул һүҙҙәрҙе әйтеүе булды, ҡылт итеп Алдар менән Тәфтиләү иҫенә төштө Кинйәнең.
- Ошо икәү әле әйткән һыҙаттарҙың мәңге иҫкермәҫ миҫалы инде...

-------------

*** Нарыш - һүҙ тамырында "нар" ята, дөйә мәғәнәһендә. Башҡортостанда Нарыштау бар, уны йыраҡтан ҡарап, дөйә үркәсенә оҡшатып була.**

**(Дауамы бар).**

✓ **"Өҫтәл аҫтында бынау бер бесәй миңә ҡарап тик ултыра. Башына ҡалаҡ менән "электереп" кенә ебәрәйем, тиһәм - ҡалағым юҡ..." Ишараны аңғарып ҡалған хужабикә тиҙ генә ҡалаҡ алып килеп бирә.**



*ИЛ ТЕЛЕ - ИМ*

# МӘРӘКӘЛӘШЕҮҘӘР ҺӘМ...

## уйынлы-ысынлы һөйләшеүҙәр насармы?



**Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм фәҡәт кеше көлдөрөү маҡсатында тормошта булмаған теләһә нимәләрҙе уйлап сығарып һөйләүҙе тыйған. Шуға күрә лә, донъя йөҙөндә киң таралған һәр төрлө анекдоттарҙы һөйләп йә маймыл һымаҡ ҡыланып, әҙәм балаһын гел генә көлдөрөп йөрөүҙән тыйылыу кәрәктер ул. Быны, бар юмор ҙа ҡәтғи тыйылған икән, тип аңлау ярамай, әлбиттә. Иманыңа зыян килтермәй, әхлаҡи нормаларҙан сыҡмай, урынын һәм ваҡытын белеп кенә ҡулланғанда, уйынлы-көлкөлө һүҙҙәрҙең зыяны юҡ. Бына шул хаҡта бөгөн һүҙем.**

Берәй кешегә бәғзе ваҡыт, ниҙер хаҡында тураһын әйтмәй, йәтеш кенә итеп, һүҙендә уратып алып барып еткереү зарурлығы була. Бер мәл мәктәптә уҡыған сағымда синыфташтар менән ҡырға сығырға тура килгәйне. Сәхрәлә сәй ҡайнатып эсергә лә ниәтләп, үҙебеҙ менән бер аҙ аҙыҡ-түлек, һауыт-һаба ла алдыҡ. Сәй эскән мәлдә ҡайны бер малайҙар сәйнүкте "ҡомған" тип атай башлағас, физика уҡытыусыһы Кинйәғол ағай хәйләле генә йылмайып: "Сәйнүк була ул, егеттәр. Ә ҡомғандың функцияһы - башҡараҡ..." - тип кенә төҙәтеп ебәреүе беҙҙең өсөн мәҙәк булып тойолғайны. Бына шундай уйынлы-ысынлы, артыҡ шаштырылмаған, күңелле лә тип әйтәйек, уратып һөйләшеүҙәр, нимәгәлер ишаралау, хатта бәғзе ваҡыт төрттөрөү (урыҫса - намекать, подкалывать) тигән гөрөф-ғәҙәт халҡыбыҙҙа борон-борондан булған. Бихисап донъя мәшәҡәттәренә генә сумып, милләттәштәребеҙ һәр саҡ артыҡ етди ҡиәфәттә генә йөрөгән, тип уйлаһаҡ, әлбиттә, яңылышасаҡбыҙ. Сама белеп, бәғзе мәлдәрҙә енелсә юмор менән дә булышҡылап алған беҙҙең атай-олатайҙарыбыҙ. Йыш ҡына башҡа яҡтарҙан килен әйттереп йә уларға ҡыҙ биргән ҡоҙалар араһында уйынлы-ысынлы төрттөрөүҙәр хатта ҡыҙыҡ, гүзәл йолаға ла әүерелеп киткеләгән. Халҡыбыҙҙың шаян таҡмаҡтарында ла быны сағылышын күрәбеҙ. "Ҡамыр баҫҡан ҡоҙағыйҙың ҡулы йәбешә микән?.. Һеҙҙең яҡтың йыуасаһы майһыҙ ҙа бешә икән!.." Шундайыраҡ итеп мәрәкәләшеүҙәрҙе лә адекват ҡабул иткәндәр: "Бейе ҡоҙа, бейе ҡоҙа, бейе, һинә - бер тауыҡ! Ул да булһа - һауын тыуыҡ: һөтөн эсерһең һауып..." Үпкәләшеү тигән нәмәләр булмаған да тиерлек. Бик һирәк кенә осраҡтарҙан тыш (шаярыуҙы аңламаған кеше лә була бит).

Беҙҙең яҡта туйҙа "һыу һатып алыу" тигән йола бар. Тәүге көн ҡыҙ яғы үҙ йортонда ҡоҙаларҙы, йәғни, кейәүҙең туғандарын һыйлай, ә иртәгеһен, шул уҡ йортта, егет яғынан килгән ҡоҙалар ҡыҙҙың туғандарына хөрмәт күрһәтә башлай. Тик башта (иртәнсәк) ситтән килгән ҡоҙалар был ауылдың ҡоҙоғонаң һыуын "һатып алырға" тейеш. Берәй шаянраҡ ҡоҙа йә ҡоҙаса, ҡулына "касса" тип яҙылған һауыт тотоп, һыу юлына арҡыры төшөп, ҡоҙаларҙы үткәрмәй һакта тора. Һыуға барыусылар әлеге "касса"ға күпмелер аҡса һалмайынса, үтеп китә алмай. Урам буйында уйын-көлкө менән күңелле генә итеп һатыулаша-һатыулаша, тинлек-һумлыҡтар төшөрә торғас, һауытта уба-туба аҡса ла йыйылып китә (был аҡса, әлбиттә, һуңынан, тантаналы рәүештә, йәштәргә тапшырыла).

Беҙҙең бер танышыбыҙҙың туйында: "Ул что за һыу һатып бирә торған ғәҙәт ул!.." - тип, башҡа районнан килгән төп ҡоҙа (кейәүҙең атаһы) бер мәл асыуланып та киткән. Әммә был ҡоҙа кешенең ана шундай ҡылығы башҡалар өсөн мәҙәк тойолоп, хатта туйға йәм дә өҫтәп ебәргән, имеш. Юмор аңламаған кеше, ситтән ҡарағанда, үҙе бер "көлкө объекты" ла булып китә... Әлбиттә, туйға килгәндәр ҡоҙаларын тик төрттөргәләп кенә ултырғандар, тип уйлау ҙа ярамай. "Майһыҙ ҡалаҡ ауыҙҙы йырта", тигән әйтем дә йөрөй бит әле. Бер-берендә маҡтап, хуплап ебәреү йолаһы ла, һис һүҙһеҙ, башҡорт туйын оҙата барған. "...Беҙҙең ҡоҙа хәлле икән, йыуасаһы баллы икән. Ышанмаһаң ашап ҡара, шәкәрҙән дә тәмле икән..."

Мәрәкәләшеү, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар ғына түгел, ә дуҫ-иштәр араһында ла була торғайны. Әлегерәк, мин студент саҡта, медицина институтының дөйөм ятағында бер нисә районһынан йыйылған башҡорт егеттәре бергә йәшәнек. Ифрат та шаян булған был егеттәрҙе, әйтерһең, ошо булмәгә һайлап алып килеп урынлаштырғандар! Барыһы ла саф башҡортса һөйләшкән шул ауыл малайҙарының бер-береһен йыш ҡына мәрәкәләшкәндәрен иҫләйем. Айырыуса, Ишембай районынан булған Сөләймән исемле егеттең теленә элэктенме - эш харап! Бер заман, баштан үткән һәр төрлө мәҙәк хәлдәр хаҡында һөйләшеп ултырғанда, Баймаҡ яғынан килгән бер малай үҙе менән ҡышҡы каникулда ауылында булған ошо ваҡиғаны һөйләгәйне. Буш ваҡытында һунарға йөрөргә яратҡан был егет, аҡ медицина халатын кейеп (камуфляжланып), ҡуян патрондары менән яһалған ҡушкөбәген алып, саңғы таҡкан да, төштән һуң ҡырға сыҡҡан. Байтаҡ ҡына йөрөүенә ҡарамаҫтан, бер йәнлек тә осрата алмаған. Ҡышҡы көн унһыҙ ҙа бик ҡыҫҡа бит инде: ҡараңғы ла төшә башлаған. Инде ҡайтыу яғына юлланған Юныс (исемдәрҙе үҙгәртмәнем), алыҫтараҡ, урман ситендә хәрәкәт итеп барған бер нөктәне күреп ҡалған. "Әһә!" Арҡаһына аҫып ҡуйған мылтығын алып, әлеге нөктәгә ҡарай атып та ебәргән. Шунда уҡ теге яҡтан да атыу тауышын ишетеп, Юнысыбыҙ йән-фарман ауылға табан елдергән. Һунарҙан асығып ҡайтҡан егет, кейемен һалып, киске аш ашарға ултырғас, унның бер туған еҙнәһе лә ҡырҙан ҡайтып ингән, үҙе кемдеңдер әле генә уға мылтыҡтан атыуы хаҡында һөйләнә, ти... Унайы тура килгән һайын, әлеге Сөләймән төрттөргәләп, Юныс иптәштең "күҙен дә астырмай" торғайны. Үҙе шул хәлде: "...Юныстың еҙнәһе, фуфайкаһына һырыған дробтарҙы сүпләй-сүпләй, өйгә килеп ингән", - тип, бер аҙ арттырыбыраҡ һөйләп тә ала. "...Һинең менән бер бүлмәлә йәшәү ҙә ҡурҡыныс, Юныс. Һин бит бер туған еҙнәңдә мылтыҡтан атҡан кеше..." "Нишләп кенә был хәлдә егеттәргә һөйләнем икән", тигән көнгә төшкән Юнысыбыҙ "Һай, ауыҙыңа... май булғыры", тип, үҙе лә беҙгә ҡушылып көлөргә мәжбүр була ине. Ә Бөрйән районынан булған Рифҡәт исемле егет "апам" тип берәй хәбәр һөйләй башлаһа, әлеге Сөләймән: "Һин, Рифҡәт, асыҡлап ҡына әйтеп һөйлә, ҡыҙ апаңмы, әллә малай апаң хаҡында һүҙ барамы?" - тип ҡыҫтыра һалып та ебәрер ине. Бәғзе ваҡыт райондарыбыҙҙағы һөйләшеү диалекттары ла ана шулай шаяртыуҙарға сәбәп була икән ул.

Мәрәкә төрлө һөнәр кешеләре араһында ла булғылай. Сибай ҡалаһында атом һыу аҫты кәмәһендә оҙаҡ йылдар хеҙмәт иткән бер мичман йәшәй (барыбыҙға ла билдәле булған "Курск" подлодкаһында ла хеҙмәт итеп киткән ул). Хәҙерге көндә - хәрби пенсионер. Һүҙгә йор ғына булған үҙебеҙҙең "ҡара башҡорт". Үҙем дә, отставкалағы хәрби табип булараҡ, уның менән яҡшы танышмын. Осрашһаҡ, һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәй. Әлеге әйтмешләй, бер аҙ "тел сарлашып" алырға ла ярата танышым. Беҙҙең һымаҡ материкта хеҙмәт иткәндәрҙе тәнҡитләргә әүәҫ, хатта уларҙы "тыловая крыса", тип шаяртырға ла тартынмай был иптәш: "...Һин егерме биш йыл буйы аҡ халат ҡына кейеп, тылда - госпиталдә йәш медсестралар янында ғына йөрөгәнһең. Ел-ямғырға ла теймәгәнһең бит. Беләм инде мин һеҙҙе. Хеҙмәт иттем, тип йөрөгән булаһың... Нишләп миҙалдарың аҙ?.."

Был моряктың миҙалдары, әлбиттә, минекенә ҡарағанда күберәк. Уның хеҙмәт юлы ла еңелдән булмағанын төйомлайым, шулай ҙа бирешергә иҫәп юҡ: "Сирек быуат диңгеҙ төбөнән башҡа нимә күрҙең һин? "Ил һаҡлайым" тигән һылтау менән, яртышар йылға еңгәйҙе өйҙә яңғыҙын ҡалдырып, шамбы һымаҡ һыу төбөндә ятҡанһың... Ә хәҙер, инде ологайған көнөңдә, "йәш медсестралар", тип ҡыҙҙар иҫләй башланыңмы? Еңгәмә ошаҡлайым, бына күреп тор! Әйткәндәй, нишләп әле урамға еңгәмде ҡултыҡлап сыҡмай, әпәт яңғыҙың китеп бараһың? Флоттағы ғәҙәтеңде ҡуй!" "Был яҙыусы халҡынан алыҫыраҡ йөрөүең хәйерлерәк", - тип ҡул һелтәп китеү яғын ҡарай. Ә үҙе киләһе осрашыуға миңә тағы берәй "боросло" һүҙ әҙерләп ҡуйған була...

Күп милләтле әрме сафында хеҙмәт иткән саҡта төртмә телле офицерҙар ҙа осрай торғайны. Бер-береңә ҡарата мөнәсәбәтеңде боҙмай ғына, милләт-ара һүҙ көрәштереүҙәр ҙә ҡыҙыҡ икән ул. Оҙайлы хеҙмәт дәүерендә, йәкташ һалдаттарҙы ҡурсалап, йыш ҡына казармаларға барып, уларҙы яҡлашып йөрөгәнем хаҡында хеҙмәттәштәрем - офицерҙар ҙа хәбәрҙар булғандыр инде. Башҡаларға ла шулай уҡ яҡшы мөнәсәбәттә булыуыма ҡарамаҫтан, йыш ҡына үҙемдең милләттәштәремде госпиталгә һалып дауалауымды күреп кенә баралар ине. Айырыуса, Ефремов фамилиялы сөмҡара сәсле, ҡара күҙле бер подполковник. Һөнәре буйынса анестезиолог ине ул. Йыш ҡына уның менән бер-беребеҙҙе мәрәкәләшеп ала торғайныҡ. Ул мине, башлыса, әлеге милләтселектә "тота". Һөйләшеүгә ифрат ипле, мәҙәниәтле булған был доктор, хәйләле йылмайып (һәр саҡ "һеҙ" тип мөрәжәғәт итә торғайны): "Халил Тухватович, почему-то в вашем отделении всегда лежат одни "башкурт малаи", - тигән һүҙҙәр ташлай. Мин дә бирешергә теләмәйем: "Потому что я сам башкорт малай. Мин бит, һеҙҙән айырмалы, үҙемдең милләтемде йәшерергә тырышмайым..." Доктор һағайып ҡала. Ә мин артабан һөжүмгә күсәм: "Дөрөҫөн генә әйтегеҙ әле, Сергей Николаевич, һеҙ үҙегеҙ ниндәй милләттән һуң?" "Урыҫ." "Ә нишләп сәсегеҙ, күҙҙәрегеҙ ҡап-ҡара һуң? Урыҫтар улай булмай бит. Фамилияғыҙҙы, әйтәйек, "Ефреман"ға үҙгәртһәгеҙ, килешлерәк булыр ине. Милләтеңде йәшереү килешмәгән эш..." Бының менән генә эш бөтмәй, уңайын тура килтереп, тағы берәй нәмәлә "тоторға" әҙер генә йөрөй был. Урыҫта "На ловца и зверь бежит", тигән әйтем дә бар бит. Бер көн әлеге иптәшкә сираттағы "уңыш йылмайҙы". Мин эшләгән бүлектә башҡалар менән бергә Русских тигән фамилиялы бер һалдат та ята ине. Инде яраһы йүнәлеп килгән был егетте госпиталдән сығарыр ваҡыт та еткән. Иртәнсәкке "пятиминутка" шәфҡәт туташына "Русских перевяжи и отпусти в казарму, остальных я сам лично должен посмотреть", тигән күрһәтмәмде ишетеп ҡалмаһынмы әлеге төртмә телле доктор. Минең "Русских перевяжи" тип әйтмәүемдә лә яҡшы белгән был коллегам: "Вот слышите, Халил Тухватович своих земляков - башкиров лечит сам лично, а русских сестре доверяет..." - тип әйтеп һалды... Бына шулай, унда-бында "бәрелеп, маңлайҙарҙы күгәртә барып", ана шундай тел биҫтәләренә ҡарата үҙеңдә иммунитет туплайһыңдыр инде ул, тормош бит...

Хатта дәһшәтле һуғыш мәлендә лә халҡыбыҙ төшөнкөлөккә бирелмәҫкә тырышҡан. Ирле-ҡатынлы кешеләрҙең бер-береһенә шаян шиғыр яҙышҡандары хаҡында ҡасандыр бер укып көлгәйнем. Йәш кәләшенең: "Одеял ябынаһыңмы, юрған ябынаһыңмы? Төнгә сәғәт ун икелә мине һағынаһыңмы?" - тип тылдан яҙған хатына һалдаттың тапҡыр яуабы айырыуса оҡшаны. "Одеялдар ҙа юҡ бында, юрғандар ҙа юҡ бында. Герман снаряды яуа, һинең ҡайғың юҡ бында..."

Нимәнелер тура әйтергә уңайһыҙланған мәлдәрҙә лә бер аҙ ғына юморлы булыуың ярҙам итә. Ҡайны берҙә ҡунаҡҡа йыйылышҡанда хужабикә кемдеңдер алдына ҡалаҡ һалырға онота (ундай хәлдәр менән һәр кем таныштыр). Бәғзеләр, айырыуса, йәштәр, ҡалаҡ һорарға уңайһыҙланып ултыра. "Нишләп ашамайһың, әйҙә, барынан етешеп ултыр", тип хужаларҙың ҡыҫтауына ла хатта "ҡалағым юҡ", тип әйтергә баҙнат итмәгәндәр бар. Минең дә шундай "инструментһыҙ" булған мәлдәрем булғылай ул, әммә, әллә ни ояла һалып бармайым: "Өҫтәл аҫтында бынау бер бесәй миңә ҡарап тик ултыра. Башына ҡалаҡ менән "электереп" кенә ебәрәйем, тиһәм - ҡалағым юҡ..." Ишараны аңғарып ҡалған хужабикә: "Әй, әттә генәһе..." тип һөйләнә-һөйләнә түр-баштан тиҙ генә ҡалаҡ алып килеп бирә.

Бына шулай, дуҫтар, тормош ауырлыҡтарына әллә ни һыр бирмәй генә йәшәп ятайыҡ әле ин шәә Аллаһ. Донъя мәшәҡәттәре ғүмерҙә лә бөтмәҫ ул. Бер-береңә менән татыу йәшәүгә һәммәбеҙ мохтаж. Тик һәр һүҙебеҙҙе, башҡаларҙы ҡыйырһытмаҫлыҡ итеп, сама белеп, үлсәберәк әйтергә өйрәнәйек, артыҡ шаштырып ебәреүҙән һаҡланайыҡ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## ИНТЕРНЕТТАН



# ҠОЯШ ВАННАЛАРЫ

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйына "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың яртыһы ультрафиолет нурҙары аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле быяла һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: тәүге төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларҙыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктка килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйыҡайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Бөйөк Британия ғалимдары билдәләүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарға ир-егеттәргә ҡарағанда оҙайлыраҡ йоҡо талап ителә. Баҡтиһән, ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш мейеһе бер юлы төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеүгә һәләтле һәм көн дауамында көсөргәнешлерәк эшләй. Баш мейеләренең "ҡатмарлы" булыуы сәбәпле, ҡатын-ҡыҙҙарға оҙайлыраҡ йоҡлау талап ителә. Йоҡлаған саҡта мейенең хәтер, уйҙар, телмәр өсөн яуап биргән өлөшө хис-тойғолар тыуҙырған көсөргәнештән арынып, ял итә икән. Быға тиклем ғалимдар артыҡ йоҡлауҙың да зыян булыуы хаҡында белдергәйне. Йоҡо туймау йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегенә, ҡан баҫымына йоғонто яһай, ә артыҡ йоҡлау йөрәк сирҙәренә алып килә.

■ Төнөн йоҡлаған ерҙә ут янып торһа, кешенең биологик ритмдары боҙола, сөнки йоҡо өсөн кәрәкле гормон мелатонин бүленеп сығыу кәмей. Был гормон етешмәһә, диабет, һимереү, хатта яман шеш башланыу ихтимал, ти белгестәр. Ҡыҙыл һәм эфлисун төҫөндәге стеналар стресс кимәлен күтәрә, тире ҡысый башлай. Был турала Корнелль университеты ғалимдары иҫкәртә. Стеналар ни тиклем сағыуыраҡ, кеше шул тиклем тиҙерәк ашай икән, шуға ла аш-һыу бүлмәһе сағыу булмаһын, тиҙәр. Йоҡо бүлмәһенең стеналары зәңгәр булһа, яҡшыраҡ, шул саҡта йоҡо туясаҡ.

## БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

**Башҡортостан быйыл мөһим һәм әһәмиәтле саралар үҙәгенә әүерелде тиһәк, һис яңылышмабыҙ. Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел, сөнки йыл "Данлы тарих - ғорур вариҫ" девизы аҫтында Башҡорт тарихы йылы булараҡ үтә. Шул айҡанлы, эпидемиологик хәл-торош бигүк тотороҡло һәм тыныс булмаһа ла, ошо арала ғына үткән башҡорттарҙың этногенезына арналған халыҡ-ара конференция һәм беренсе тапҡыр Тыуған яҡты өйрәнеүселәр форумы ла йылъяҙма битендә үҙ урынын алды.**

# ТАМЫРҘАРҘАН ҺУТ АЛЫП

Форумдың "Торатау" конгресс-холында - республиканың иң ҙур һәм абруйлы саралар майҙанында ойошторолоуы ла был сараның ни тиклем әһәмиәтле булыуына бер дәлил булып торҙо. Тарих фәндәре кандидаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы Юлдаш Йосопов билдәләүенсә, тыуған яҡты өйрәнеүсе - ул архивтарҙа ултырып шәжәрәһен эшләүсе генә түгел, ә боронғо кейем-һалым менән ҡыҙыҡһынып, уны реконструкциялаусы, милли аш-һыуҙы тергеҙеүсе, милли уйындарға яңы һулыш биреүсе, хатта ҡала йәмәғәтселеге мөхитен формалаштырыусы ла, сөнки уларҙың барыһын да бер маҡсат - тыуған ергә һөйөү, уның тарихын өйрәнеүгә, тергеҙеүгә, һаҡлауға мөкиббән бирелгәнлек берләштерә. Сараға республиканың төрлө район-ҡалаларынан, күрше өлкәләрҙән тап шундай 200-гә яҡын кеше йыйылды ла инде.

Әйткәндәй, форумдың тәүге өлөшө былтыр декабрҙә үк онлайн-форматта үтә һәм эш унда ҡабул ителгән резолюцияға ярашлы алып барылып, ҙур форумды уның логик тамамланыуы тип тә әйтергә мөмкин. Крайҙы өйрәнеүселәргә ярҙам булараҡ төҙөлгән фәнни-методик әсбаптың исем туйы был һүҙҙәрҙең хаҡлылығын тағы бер тапҡыр раҫланы.

Бер яҡтан, тыуған яҡты өйрәнеүселәр форумын башҡорт халҡының этногенезына арналған бер көн алда үткәрелгән конференцияның дауамы тип тә баһаларға мөмкин ине, сөнки был сара сиктәрендәге лекторийҙа абруйлы ғалимдар сығыш яһаны. Мәҫәлән, филология фәндәре докторы Юлия Норманская (Мәскәү) юғалыу хәүефе янаған телдәрҙе һаҡлау һәм уларҙы уҡытыу темаһын күтәрҙе һәм лингвистиканың теге йәки был халыҡтың ҡайҙан килеп сығыуы, уның кемдәр менән яҡын мөнәсәбәттә булыуы, тарихы нисек үҫешеүе тураһындағы һорауға бик йыш математик теүәллек менән яуап биргән гуманитар фән булыуын билдәләне. "Был ҙур халыҡтарға ғына ҡағылмай, ә быны айырым район, ауыл халҡы буйынса ла әйтергә мөмкин", - тине ул һәм Томскиҙағы тикшеренеүҙәр барышында бер-береһенән 100-200 километр алыҫлыҡта ятҡан ауылдар халҡының бер үк телдә һөйләшеүен асыҡлауҙары, әммә халыҡтың үҙҙәренең был хаҡта бер ни белмәүе тураһында һөйләп китте. "Метрика кенәгәләре буйынса быңдай күсенеүҙәр 16-17-се быуаттарҙа теркәлгән, әммә беҙ шәжәрәләрҙең ни тиклем тәрән булыуын белмәйбеҙ һәм тап улар тел тамырҙарыбыҙ тураһында мәғлүмәт йөрөтә, ниндәй һөйләшкә яҡынлығыбыҙҙы асыҡлай", - тине Юлия Норманская һәм ЛингвоДок (Ligvodok.ispras.ru) платформаһында башҡорт теленең диалекттары, һөйләштәрен асыҡлау буйынса алып барылған тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләре менән таныштырып, йыйылыусыларҙы был эшкә әүҙем ҡушылырға саҡырҙы: "Боронғо һөйләштәрҙе һаҡлаған оло быуын кәмей бара, ә йәштәр бары тик әҙәби телдәрҙә генә белә. Быға тиклем экспедицияларҙа йыйылған яҙмалар заманса ҡоралмаларҙан тыш башҡарылған, белгестәр уларҙы нисек ишеткән - шулай транскрипциялап ҡалдырған. Хәҙер заманса ҡоралмалдар, хатта һәр кем үҙенең телефонына ҡуйып алырлыҡ программалар бар. Улар тауышты юғары сифатта яҙҙыра һәм уны махсус лингвистик программаларҙа анализлап, теге йәки был һөйләшкә яҡын булыуын асыҡларға мөмкин", - тине ул һәм тәнәфес ваҡытында уҡ диалектта һөйләшеүселәрҙең телмәрен яҙҙырып та алды.

Билдәләнеүенсә, әлеге ваҡытта РФА-ның Тел ғилеме институты базаһында булдырылған ЛингвоДок платформаһы Рәсәй халыҡтары телдәрен яҙҙырып алыу өсөн рәсми рөхсәт нигеҙендә эшләй, шулай уҡ ғалимдар 2030 йылға тиклем тел өлкәһендә ғилми тикшеренеүҙәр буйынса дәүләт программаһын әҙерләй. Ошо программаға ярашлы Рәсәй халыҡтары телдәрен яҙҙырып алыу буйынса проект әҙерләнгән һәм 15 октябрҙә ул барлыҡ тикшеренеү һөҙөмтәләре менән Рәсәй Президентына раҫлауға тәҡдим ителәсәк. "Беҙҙең 15 октябрҙән һуң республикаларға тәҡдим ителәсәк проект буйынса эште әле үк башлау мөмкинлеге бар, сөнки Башҡортостан төбәк булараҡ та, ғалим-филологтарҙың эшмәкәрлеге буйынса ла Рәсәйҙә иң алдынғыларҙың береһе. Бары тик ике республикала ғына: Башҡортостанда һәм Татарстанда күп миллионлы тел корпусы бар. Шуға күрә беҙгә заманса компьютер системалары биргән мөмкинлектәрҙе файҙаланып ҡалырға кәрәк. Әлеге ваҡытта ЛингвоДок платформаһында Рәсәйҙең 900 диалекты буйынса яҙмалар, аудиояҙмалар, архив яҙмалары бар. Беҙҙең менән илдең 300 лингвисы хеҙмәттәшлек итә, әммә беҙ һәр ауылға барып етергә теләйбеҙ, шуға ла һеҙҙең дә ярҙамығыҙ кәрәк", - тине Юлия Викторовна.

Әйткәндәй, Башҡортостан әлегә пилот төбәк булып тора һәм РФА Өфө ғилми-тикшеренеү федераль үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты башҡортса яҙмаларҙы руссаға тәржемә итеү һәм башҡорт теле өсөн парсер эшләү өсөн махсус программа булдырырға әҙер. Был иһә фәнни анализ нигеҙенә генә түгел, ә белем биреү платформаһы булдырыу нигеҙенә лә ятырға мөмкин. Хәҙерге ваҡытта донъяла белем биреү платформалары һәр ваҡыт шундай корпустар нигеҙендә булдырыла, сөнки яһалма интеллект һәм тулы анализ базаһы нигеҙендә объектив дәреслектәр төҙөү мөмкин. Бер диалект өсөн сифатлы уҡыу платформаһы булдырыуға яҙылған 500 сәғәтлек телмәр кәрәк. Шуға ла Юлия Норманскаяның йыйылыусыларға ғына түгел, республика Хөкүмәтенә лә ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүе осраҡлы булманы.

Башҡортостан халҡына бик тә таныш булған тарих фәндәре докторы, билдәле археолог Нияз Мәжитовтың коллегаһы һәм дуҫы Игорь Кызласов Юлия Викторовнаның сығышын дауам итеп, крайҙы өйрәнеүселәр өсөн генә түгел, ғөмүмән, әңгәмә ҡорғанда һәр кемгә мөһим булған ҡараш тураһында белдерҙе: "Профессоналдар тарафынан халыҡ ғилемен боҙоп күрһәтеү хәүефе бик ҙур. Әлбиттә, тикшеренеүсе һөйләүсене тәҙәтергә, уның фекерен матурларға тырыша ала, әммә ул быны эшләмәҫкә тейеш, сөнки һөйләүсенең телмәр характеры, һөйләү ҡоролошо боҙола. Тикшеренеүсегә шулай уҡ һорауҙарҙы үҙ яйына борорға, һорауҙа уҡ яуап сағылған һорау бирергә ярамай. Юҡҡа ғына халыҡ мәҙәниәтен өйрәнгән ғалимдарға вузда 5 йыл буйы кеше менән нисек һөйләшергә өйрәтмәйҙәр, сөнки ошо хәүефте алдан күрәләр. Йыйылған яуаптар һәр саҡ һөнәрсене өйрәнсектән айырырға ярҙам итер. Кем менән генә һөйләшһәгеҙ ҙә, хатта сал сәсле тикшеренеүсегә лә, үҙен бер нәмә лә белмәгән ҡыҙыҡһыныусы бала итеп күҙалларға кәрәк, сөнки ул халыҡ аҡылына, бик күпте белгән кешегә мөрәжәғәт итә. Йәғни үҙегеҙҙең түгел, әңгәмәсегеҙҙең абруйын күтәрергә кәрәк. Әңгәмәне үҙегеҙ теләгән юҫыҡҡа төшөрмәгеҙ, сөнки яуап биреүсе һеҙҙә хөрмәт иткән өсөн генә лә һеҙҙең фекерҙе хупларға мөмкин. Шул осраҡта ғына һеҙ саф, сығанаҡ рәүешендә тупланған халыҡ аҡылын ишетә алаһығыҙ һәм хатта һөҙөмтә һеҙҙе ғәжәпләндермәгәндә лә уны һаҡларға кәрәк". Был фекер тыуған яҡты йәки һөйләштәрҙе, телде өйрәнеүселәр өсөн генә түгел, кеше менән эшләгән барлыҡ профессиялар өсөн дә мөһим, сөнки кәрәкле яуап түгел, ә хәҡиҡәт ҡәҙерлерәк.

Игорь Леонидовичтың артабанғы фекерҙәре лә файҙалы һәм әһәмиәтле булды: "Әйҙәгеҙ, "Крайҙы өйрәнеү" тигәндә "Ватанды өйрәнеү" тигән һүҙ менән алмаштырайыҡ һәм нимә менән шөғөлләнгәнебеҙ шунда уҡ аңлашылыр. Нисек тип кенә аталмаһын, крайҙы (тыуған яҡты) өйрәнеү менән халыҡ мәҙәниәтен өйрәнеү өлкәһе буйынса белгес булмаған кешеләр - уҡытыусылар, зыялылар шөғөлләнә. Элек тә шулай булған, әле лә шулай дауам итә. Был донъяла бөтөн нәмә күп төрлөлөк ҡанунына буйһона: үҫемлектәр ҙә, хайуандар ҙа, кешеләр ҙә, уларҙың мәҙәниәте лә. Әгәр донъя бер төрлө генә булһа, хакимиәткә, идара итеүселәргә еңел булыр ине, сөнки бер төрлө материал менән эш итеүе еңел. Әммә беҙ күп төрлө һәм ошо күп төрлөлөктө өйрәнеүҙе нисек тәрәнәйтергә һәм киңәйтергә, йәғни тыуған яғын өйрәнеүгә халыҡты күпләп йәлеп итергә кәрәк. Эйе, әлеге ваҡытта был хәрәкәткә күберәк ололар йәлеп ителгән, ә мин теләһә ниндәй халыҡтың, шул иҫәптән күп милләтле Башҡортостандың милли мәҙәниәтен өйрәнеү өсөн урта мәктәптең мөмкинлектәренә иғтибар йүнәлткем килә.

Уйлап ҡараһаҡ, мәктәптәрҙә дәрестәрҙә һәм дәрестән тыш сараларҙа мәҙәни эшмәкәрлектә әҙер фәнни, популяр, художестволы әҙәбиәт ҡулланыла һәм был беҙҙе бер ни тиклем сикләй. Ә мин уҡыусылар менән берлектә үҙаллы, эҙләнеү, коллектив ижади эшкә иғтибар йүнәлткем килә. Был эште уҡыусынан башҡа бер кем дә башҡара алмай. Халыҡтың көндәлек тормошонда уның мәҙәниәтенең төрлө өлкәләре сағылыш таба һәм һәр кем тәбиғи фәндәр өйрәнгән тәбиғәт ҡанундарын ҡуллана ала. Телмәр, һүрәт төшөрөү, тел ғилеме, фи-

***✓ Нимә һуң ул аффирмация? Ул ниндәйҙер маҡсат ҡуйып әйтелгән раҫлау. Мәҫәлән:"Мин барлыҡ мөнәсәбәттәрҙә лә ыңғай ҡарашлы була барам". "Мин үҙемде ихтирам итәм. Мин - һөҙөмтәле ижади шәхес".***



лософия һ.б. бер һүҙ менән дөйөмләштереп әйтергә мөмкин - көнкүреш. Халыҡ мәҙәниәтендә көнкүреш мәктәп курсының барлыҡ махсус дисциплиналарын үҙ эсенә ала, тормоштоң бар үҙенсәлектәрен аңларға ярҙам итә. Ә беҙ мәктәп программаһын, ошо үҙенсәлектәрҙе традицион мәҙәниәт аша күрһәтә алабыҙ, сөнки мәктәп программаһы милли нигеҙле була ала. Математика, физика, химия, биология, ғөмүмән, барлыҡ предметтарҙы ла үҙ яғыбыҙға борорға, мәктәп предметын милли, халыҡтың традицион йәшәйеше менән бәйләргә мөмкин. Шуныһыҙ һәр дәреслек теләһә ниндәй халыҡ, уның тормошто танып белеүе, тәжрибәһе өсөн сит мәғлүмәтте индереүсе булып торасаҡ. Мәҫәлән, математиканы милли математика тип үҙгәртергә мөмкин. Башҡорт халҡының математикаһы ниндәй ул, уның иҫәбе нисек, уның иң бәләкәй һәм иң ҙур һанды белдергән сиге ниндәй? Ниндәй һан башҡорт иҫәбендә күп булыуҙы белдерә, оҙонлоҡ, дәүмәл, ауырлыҡ, тормош һәм башҡа процестар циклдары нисек билдәләнә? Мәктәп программаһындағы классик өлөш ошо белем менән тулыландырылырға тейеш. Башҡорт химияһы ниндәй? Физикаһы?"

Ошо урында саҡ ҡына форумдан сигенеп, бер аҙ уйланып алырға ла мөмкин. Ысынлап та, башҡорт милли математикаһы тигәндә, беҙ мәктәптә халҡыбыҙҙың борон ҡулланған үлсәү, һанау сараларын беләбеҙме? Мәҫәлән, бер иле, бер ҡарыш, бер терһәк тигәндә, ниндәй оҙонлоҡ берәмеге күҙалланған. Йәки башҡорт химияһы юҡ икән, атай-олатайҙарыбыҙ әсеү, ыҫлау, буяу, тимерҙе сүкеү өсөн ҡыҙҙырыу, балсыҡ яндырыу ысулдарын һәм был эштәрҙе атҡарыу өсөн ниндәй состав кәрәклеген ҡайҙан белгән? Уларҙың ер биләмәләре сиктәрен билдәләү һәм аныҡлау өсөн географик белем кәрәкмәгәнме ни? Йәғни йондоҙҙарға ҡарап юлды, ҡояшҡа ҡарап сәғәтте билдәләү... Игорь Леонидович белдереүенсә, үҙенең тыуған ерендә йәшәгән һәр кеше белем һәм мәғлүмәт алыуҙа үҙ мәҙәниәтен киң ҡуллана ала. Әйткәндәй, ҡасандыр Башҡортостан мәғариф системаһына индерелгән "Тормош һабаҡтары" дәрестәре тап ошо мәғлүмәтте үҙенә туплай түгелме? Эйе, әлеге ваҡытта был дәрестәр мәктәп программаһынан алынған, әммә федераль дәүләт стандарттары дәрестәрҙә төбәк компонентын ҡулланыуҙы тыймай бит. Тимәк, барлыҡ предметтарҙа ла "Тормош һабаҡтары" дәреслектәрендә тупланған белемде ҡулланырға, уны тағы ла тулыландырырға була.

Ҡасандыр тыуған яҡты өйрәнеүселәр ауылдаштары, таныш-белеше, зат-ырыуының телдән-телгә тапшырыла килгән хикәйәттәренә генә нигеҙләнгән булһа, һуңынан ул архив материалдарына, башҡа төрлө ғилми сығанаҡтарға таяна башлай. Бөгөн иһә крайҙы өйрәнеүҙең генетика ысулдарын файҙаланып үҫешеүенә аптырайһы түгел. Генеалог Владимир Волков генетика менән генеалогияның бәйләнеше һәм уны тикшереүҙең киләсәге тураһындағы сығышы менән Башҡортостан ғалимдарының тикшеренеүҙәрен яңы бейеклеккә күтәрҙе тиергә мөмкин, сөнки республика генетиктарының совет осоронда уҡ асыҡлаған асыштары бөгөн дә күп нәмәгә нигеҙ булып тора. "Беҙ барыбыҙ ҙа ДНК спирален беләбеҙ, һәм унда иң мөһиме - код, ДНК коды, - ти Владимир Геннадьевич. - Ул быуындан-быуынға тапшырыла килеп, 3-4 быуат үткәс кенә уның бер генә хәрефе үҙгәрә. Ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ линияһы буйынса генетика беҙҙең, йәғни кешелектең бер ата-бабанан барлыҡҡа килеүен күрһәтә. Нәҫел ағасы яйлап бүленә һәм унда төрлө милләттәр, шул иҫәптән бер тармаҡта саф башҡорт төркөмдәре барлыҡҡа килә. Беҙ дөйөм ҡанбаба күрһәтелгән шәжәрәне тикшереп ҡараныҡ һәм генетика һөҙөмтәләре уның бер ир-ат линияһынан булыуын күрһәтте". Йәғни, кешелектең Әҙәм менән Һауанан барлыҡҡа килеүе тураһындағы теория йәшәй икән, тимәк, Тажетдин Ялсығол төҙөгән шәжәрә лә юҡтан бар булмаған. Хәйер, генетика һәм генеалогия темаһына бөгөн ҙур иғтибар бирелә һәм һуңғы ваҡытта уның хатта психология күҙлегенән дә өйрәнелә башлауы тураһында мәғлүмәттәр бар. Йәғни үҙенең тамырҙарын белмәгән кеше беҙҙең заманда ҡурҡыу тойғоһон ныҒыраҡ кисерә һәм үҙенең тәғәйенләнешен тапмай ҡаңғырыу ғына түгел, хатта үҙенең кем икәнен дә аңлай алмай. Ә шәжәрәле кеше - ул тамырлы ағас, ул тамырҙарынан һут ала, уның тотоп торған ере, барып морон төртөр бай нәҫел-нәсәбе бар...

Артабан тыуған яҡты өйрәнеүселәр эшен дүрт секцияға бүленеп дауам итте. Башҡортостан ауылдары тарихын өйрәнеү, генеалогик тикшеренеүҙәр һәм ырыуҙар хәрәкәте, республикала археология һәйкәлдәрен өйрәнеү һәм һаҡлау, уларҙы популярлаштырыу, крайҙы өйрәнеү эшен популярлаштырыуҙа музейҙар һәм китапханаларҙың роле буйынса сығыштар һәм улар нигеҙендә ҡабул ителгән тәҡдимдәр һуңынан дөйөмләштерелеп, сараның резолюцияһына индерелде.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР*

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

## Онотма!

Бер ир Аллаһы Тәғәләне утыҙ йыл буйы аслан теленә алмаған. Фәрештәләр: "Әй, барса тереклекте яратҡан һәм ризыҡ биргән Аллаһ, был ҡолоң һине онотто бит", - тигәндәр. Аллаһы Тәғәлә уларға: "Был ҡол һаман ниғмәт һәм рәхәтлек эсендә йәшәй, берәй төрлө михнәт күрһә, мине мотлаҡ иҫенә төшөрөр", - тигән һәм Ябраил ғәләйһиссәләмгә: "Бар, шул ирҙең ҡан тиртә торған тамырҙарының береһен туҡтат",- тигән. Ябраил ғәләйһиссәләм был ирҙең бер ҡан тамырын тиртеүҙән туҡтатҡан икән, тегеһе шунда уҡ һикереп тороп: "Ярабби, ярабби", - тип ҡысҡыра башлаған, ти. Быны күҙәтеп торған Аллаһы Тәғәлә: "Әй, ҡолом, бик-бик оҙаҡ йылдар буйына ниңә мине телгә лә алманың?" - тип, әлеге иргә иҫкәртеүен белдергән.

## Аллаһы юлында булған…

Бер нисә кешене уғрылар талап киткәс, улар Һарун әр-Рәшит хәлифәгә барып: "Фәлән урында ун юл баҫыусы бар. Улар менән ни ҡылайыҡ?" - тип һорай. Һарун әр-Рәшит: "Барсаһын тотоп алып, хибескә ябығыҙ!" - ти. Былар уғрыларҙы тотоп килтергән саҡта береһе ҡасып китә. Ни ҡәҙәр мәшәҡәт сигеүҙәренә ҡарамаҫтан, тота алмайҙар. "Ундың береһен ҡасырып, туғыҙын ғына алып ҡайтһаҡ, хәлифә беҙгә, береһенең малын ришүәт итеп алып, уны үҙегеҙ ҡасырғанһығыҙ икән, тип асыуланыр", - тигән уйға ҡалып, ҡурҡыуға төшкән ти был кешеләр. Кәңәшләшеп һөйләшкәндән һуң: "Әйҙәгеҙ, юлдан берәй кешене тотоп алайыҡ та хәлифәгә илтәйек", - тип хәл иткәндәр. Бер изге кеше хажға китеп бара икән. Был хажиҙы тотоп алалар ҙа, хәлифәгә алып баралар былар, "Ун уғрының барсаһын да тотоп килтерҙек", тиҙәр. Барсаһын да хибескә ябып ҡуялар. Хибестә бер аҙ ятҡас, гонаһлыларҙың туғыҙы ла таныш-белештәренең ярҙамы менән, аҡса түләп, хибестән сығып китәләр, ти. Ә теге гонаһһыҙ бисара хажиҙың таныш-белештәре лә, аҡсаһы ла булмау сәбәпле, һаман хибестә ҡала. Хибес һаҡсылары хажиҙан: "Һинең ярҙам итеп сығарырлыҡ кешеләрең юҡмы ни?" - тип һорағас, ул: "Юҡ шул, ләкин хат яҙһам, хәлифәгә бирерһегеҙме икән?" - ти. "Бирербеҙ, тапшырырбыҙ, әлбиттә", - тигән яуапты ишетеп, хажи ҡәләм һәм ҡағыҙ алып, хат яҙа башлай. Хатының эстәлеге былай була: "Бисмиллаһир-рахманир-рахим. Был хат фәҡир һәм ҡәҙерһеҙ әҙәмдән олуғ һәм бөйөк Аллаһы Тәғәләгә. Әй Алла, һинең мәхлүктәрең, шәфҡәтлек ҡылыусы дуҫтары булыу сәбәпле, гонаһтары булһа ла, хибестән сыҡтылар. Үҙең беләһең: минең был осраҡта һис кенә лә гонаһым юҡ. Ярҙам итеп хибестән сығарыусы һәм һүҙемде ҡабул итеүсе, хәлифәгә минең тарафымдан һүҙ әйтә алыусы дуҫтарым да юҡ. Һинән ғәйре ярҙам итәсәк дуҫым юҡ, йә Аллам, ярҙам итсе". Хатты тамамлағандан һуң, хажи: "Был хатты хәлифәгә тапшыр", - тип һаҡсыға биргән. Һаҡсы иһә: "Мин был хатты хәлифәгә бирә алмайым, сөнки был хат Аллаһы Тәғәләгә тәғәйенләп яҙылған", - тигәс, хажи: "Улай булһа, хибестең түбәһенә сығарып ҡуй", - тип үтенгән. Һаҡсы хатты хибестең түбәһенә ҡуйыуы була, ул атҡан уҡ кеүек һауаға оса.

Шул кистә Һарун әр-Рәшит төш күрә. Төшөндә күктән фәрештәләр төшөп, хажиҙың хатын алғандар, имеш тә, Һарун әр-Рәшиткә: "Әй, Һарун, гонаһтары булған әҙәмдәр, шәфҡәтлек ҡыла алған дуҫтары сәбәпле хибестән сыҡтылар, бер гонаһһыҙ изге әҙәм ҡалды ки. Аллаһы Тәғәләнән башҡа шәфҡәт эйәһе юҡ, әлеге әҙәмде хибестән сығар, валлаһи, һәләк булырһың!" тигәндәр. Һарун әр-Рәшит шунда уҡ йоҡоһонан уянып, зиндан һаҡсыларын саҡыртып, хажиҙы үҙенә килтереүҙәрен бойора. Хажиҙы килтерәләр. Һарун хажиҙы хуш күңел менән ҡаршы ала, ашатып, эсереп, мунса индереп, яҡшы кейемдәр кейҙертә. Хажиҙан ризалығын үтенеп, етмеш дөйә, етмеш хеҙмәтсе үҫмер һәм йәриә биреп өйөнә оҙатып ҡуя...

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Мейе компьютерын нисек программалаштырырға?

Көсһөҙләнеүҙең оҙон һәм ҡыҫҡа ысулы булған кеүек, программалаштырыу ҙа йылдарға һуҙылырға йәки бер нисә секундта тормошҡа ашырға мөмкин.

Филипп дини ғаиләлә үҫә. Колледжға уҡырға киткәс, синыфтан тыш саралар сиркәүгә йөрөүҙе оноттора. Колледжды тамамлағас, ул сауҙа өлкәһендә эшләй башлай. Тиҙҙән ғашиҡ була һәм өйләнә. Хәҙер инде ғаилә һәм эш Филиптың ваҡытын күпләп алып, күңеле тураһында уйларға уның ваҡыты ҡалмай. Шулай итеп, 10 йыл ваҡыт үтә. Филипп етди сирләп китә. Операция һәм реабилитация осорон үткәрә. Ошо еңел булмаған ваҡытта ул үҙенең эшен юғалта, ҡатыны ташлап китә. Хәҙер инде уға тормош тураһында уйланырға бер нәмә лә ҡамасауламай.

Бер нисә йылдан һуң мин Филипты сиркәү баҡсаһында ҡабаттан осраттым. Аш янында ул: "Эшҡыуарлыҡ һәм күңел асыуҙар мине шул тиклем йотто, мин хатта рухи көрсөккә килеп терәлеремде лә күҙ алдыма килтермәнем, - тип, күңелен асып һалды. Ә нимә уны үҙгәрергә мәжбүр итеүен һорағас, ул: "Мин Норман Винсент Пилдың "Сила позитивного мышления" тигән китабын уҡыным. Ул мине тормошта ҡәнәғәтлек килтергән тәрән, бер ваҡытта ла үҙгәрмәгән ҡиммәттәргә яңыса ҡарарға мәжбүр итте", -тине.

Бөгөн Филипп - бизнес-консультант. Ул элеккегә ҡарағанда аҙыраҡ көсөргәнеш кисереп, күберәк аҡса эшләй, сиркәү хорында йырлаған ҡатынға өйләнгән. Филипп ҡабаттан программалашыу үткән. Бының өсөн уға йылдар кәрәк булған. Донъяға ҡарашы киренән ыңғайға үҙгәргән.

Һеҙ быны тиҙерәк эшләй алаһығыҙ. Бының өсөн бер нисә секунд кәрәк. Шундай күнекмәләр яһағыҙ: яҡшылап ултырығыҙ ҙа күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ; өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ; бер нисә картинаны күҙ алдына килтерегеҙ; дүрт тапҡыр аффирмацияны (ыңғай йүнәлеш) ҡабатлағыҙ; уйығыҙҙа ғына үҙегеҙгә: "Мин күтәренке кәйефтәмен, үҙемде элеккегә ҡарағанда ыңғай ынтылышта торам", - тип ҡабатлап, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Нимә һуң ул аффирмация? Ул ниндәйҙер маҡсат ҡуйып әйтелгән раҫлау. Бына бер нисә миҫал: "Мин барлыҡ мөнәсәбәттәрҙә лә ыңғай ҡарашлы була барам". "Мин һәр эште ҡурҡыуһыҙ ҡабул итәм һәм уның уңышлы барып сығыуына иҫәп тотам". "Мин үҙемде ихтирам итәм. Мин - һөҙөмтәле ижади шәхес".

Ошо миҫалдарға нигеҙләнеп, үҙ аффирмацияғыҙҙы уйлап сығара алаһығыҙ. Улар ыңғай уйлауға, үҙ-үҙеңде ихтирам итеүгә, уңыш ҡаҙаныуға йүнәлтелгән булырға тейеш. Артабан беҙҙең аффирмациялар - мейе компьютерын ҡайтанан программалаштырыуҙың ябай формаһы - ниндәйҙер аныҡ етешһеҙлекте еңеп сығыуға йәки кәрәкмәгән ғәҙәтте бөтөрөүгә йүнәлтелергә тейеш.

Күп йылдар дауамында мин кешеләрҙең түбәндәге ике төрлө йүнәлеш ярҙамында нисек үҙгәреүен күҙәтәм: "Мин бер ҡасан да пессимист булмаясаҡмын. Мин - оптимист. Мин бер ваҡытта ла уңышһыҙлыҡтан ҡурҡып, көйәләнмәйәсәкмен. Мин бөтә нәмәлә лә уңышҡа иҫәп тотасаҡмын".

Ошо аффирмацияны көнөнә өс тапҡыр өс көн ҡабатлағыҙ. Дүртенсе көнгә уны түбәндәгесә үҙгәртегеҙ: "Хәҙер мин пессимист түгел һәм тынысһыҙланып бармайым. Мин оптимист. Мин бар нәмәлә лә уңышҡа өмөт итәм".

Был аффирмацияны көнөнә өс тапҡыр өс көн дауамында ҡабатлағыҙ. Хәҙер инде һеҙгә мейе компьютерығыҙҙы ҡайтанан программалау өсөн уға мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй. Һеҙ программаланғанһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

*✔ Беҙҙә ҡыҫҡартыуҙар булманы, эш хаҡтарын да түбәнәйтмәнеләр, бик күп төрлө хеҙмәт шарттары ла булдырылған. Пенсия йәше беҙҙә күтәрелмәне: ир-егеттәр 55 йәштән, ҡатын-ҡыҙҙар 50 йәштән хаҡлы ялға сыға.*



*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

# ТИМЕР ЮЛ ҺӨНӘРМӘНЕ



**Хеҙмәттәштәре араһында абруй һәм хөрмәт ҡаҙанып, оҙаҡ йылдар дауамында һөнәренә тоғролоҡ һаҡлап эшләй алған шәхестәр һәр ваҡыт һоҡландыра. Эше еңелдәрҙән һәм ябайҙарҙан булмаһа ла, тап бына шундай уҙ өстөнә алған яуаплылыҡты тулы кимәлдә тойоп йөшәгәндәрҙең береһе - өс тиҫтәнән ашыу йыл тимер юлсы булып хеҙмәт иткән Ибраһим Ғәфүр улы ДӘҮЛӘТБАЕВ менән булыр бөгөнгө әңгәмәбеҙ.**

**▸ Тимер юлсы булырмын, тип уйламағанһығыҙҙыр ҙа әле йәш саҡта…**

- Эйе, ысынлап та шулай. Тамырҙарым менән Ейәнсура районы Башҡорт Самаҙыһы ауылынанмын. Элек ауылдаштар, синыфташтарҙың күбеһе Өфөлә хәҙерге М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында белем алды. Яҡшы өлгәшкән өсөн "Артек"ка ла барып, георграфияны бик яҡшы белгән кеше булараҡ, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, юғары уҡыу йортонон география факультетына документтарымды тапшырғайным. Ләкин Дамир ағайым: "Эшләй башла, ситтән тороп уҡырһың әле", - тигәс, яңғын һағына водитель булып урынлаштым. Ағайым аҙаҡ үҙе кәләш алды ла, ауылға ҡайтты ла китте. Мин бында торҙом да ҡалдым, сөнки яңғын һүндереүҙә эшләй ҙә башламаҫ борон уҡ ятаҡтан урын бирҙеләр, йәштәрҙе күтәрмәләп торалар ине. Шулай итеп, уҡыуға ваҡыт тығыҙланды, эшкә ныҡлап ылығып кителде.

Аҙаҡ, өйләнгәс, кәләштең ағай-энеһе тимер юлына эшкә саҡырҙы. Хеҙмәт юлымды 1987 йылда 49-сы юл машинаһы станцияһында өсөнсө разрядлы монтажлаусы булып башланым. Аҙаҡ юл түшәүсе кранда стропальщик та булдым, ул саҡта Кропачево яҡтарынан Күмертау, Төйләгәнгә ҡәҙәрем йөрөнөк. Тимер юлы буйлап Башҡортостанды арҡырыға-буйға иңләгән саҡтар күп булды, әммә йәшлек менән, дәрт-дарман көслөләгө менән эштең ауырлығы ла һиҙелмәгән. Беҙ, ауыл малайҙары, атай-әсәйҙән хеҙмәт тәрбиәһе алып, эшкә бәләкәйҙән күнегеп үҫкән кешеләр бит инде. Ә тимер юлында коллектив һәйбәт булды.

**▸ Тимер юлсыһының эше миҙгеленә ҡарамай, һәр ваҡыт тышта. Икенсе эшкә күсергә теләк булманымы?**

- Тиҫтә ярымдай йыл эшләгәс, бер тапҡыр ғына эш урынын алмаштырып ҡараным. "Синтезспирт" заводына урынлашҡайным да, эш хаҡы юғарыраҡ булыуға ҡарамаҫтан, бер-ике көндән тимер юлына кире ҡайттым. Тик инде 49-сы юл машинаһы станцияһына түгел, ә Өфө тимер юлы дистанцияһына (ПЧ-17) килдем. Бында хәҙер 18 йылдан ашыу эшләйем: һалынған тимер юлдарҙы хеҙмәтләндерәбеҙ. Тимер юлдарының төҙөклөгөн көн дә даими ҡарап тороу, ваҡытында ремонтлау бик мөһим. Коллегаларым менән 5-се километрҙан ун өсөнсөгә тиклем ике йүнәлештә лә киткән юлдарҙы - таҡ һәм йоп юлдар тибеҙ, хеҙмәтләндерәбеҙ, бынан тыш Черниковка-Кәнсығыш станцияһы ла беҙҙең ҡарамаҡта. Ошо арауыҡта тегеләй-былай йөрөп, көнөнә 15-20 километр ара үтәһең һәм ямғыр, ҡар ҙа тип тормайһың - буш ваҡыт юҡ. Коллективыбыҙҙа 18-ләп егет, өс төркөмгә бүленеп эшләйбеҙ. Мин, ғәҙәттә, ике-өс егет менән Лощинная станцияһына табан йүнәләм, кемдер Черниковка-Кәнсығыш станцияһының ике паркында эшләй. Быйыл йәй үтә эҫе килгәс, таңғы сәғәт биштән эш башлайбыҙ. Сөнки тимер юлын 25 градустан эҫерәк көндә бөтөнләй урынынан ҡуҙғатырға ярамай. Болт-фәлән бороп, тәҙәткеләп йөрөүҙән тыш, кәрәк саҡта шпалдарҙы ла алыштырабыҙ, бесән дә сабабыҙ, яҙын юлға һыу китмәһен тип буйынан-буйына соҡор ҙа ҡаҙабыҙ, ҡыш мин ҡар йыйғыс машина менән етәкселек итәм.

Әйткәндәй, хәҙер ағас шпалдар юҡ тиерлек, улар тимер-бетон һәм 270 килограмм ауырлыҡта. Юлды алыштыра башлаһаң, ауырғараҡ тура килә инде, ләкин "Unimat" һәм "Duomatic" тигән махсус машиналар, мотовоз ярҙамында атҡарырға тырышабыҙ был миҙгелдә эште. Дөрөҫөн әйткәндә, коллективта эшсе ҡулдар етерлек булғанда бер ниндәй ҙә ауырлыҡ һиҙелмәй, эшебеҙ гөрләп тора. Ләкин хәҙер йәштәр, нишләптер, тимер юлына ябай хеҙмәтсән булып килә һалып бармай шул, ҡыҙғаныҫҡа ҡурә. Бына миҫал өсөн генә әйтәм, элек Лощинная станцияһының үҙендә генә 29 кеше эшләй ине, хәҙер ике станцияға 18-19 кеше ҡалдыҡ.

Ә бит беҙҙә башҡа өлкәләрҙәге кеүек ҡыҫҡартыуҙар булманы, эш хаҡтарын да түбәнәйтмәнеләр, бик күп төрлө хеҙмәт шарттары ла булдырылған. Йәштәр хәҙер ауыр эштән ҡурҡа, еңел аҡса табырға ынтыла, тиер инең, шул уҡ Себерҙә лә аҡса эшләүе ябайҙарҙан түгел инде. Бына быйыл да үҙемдең Ейәнсура егеттәренән бригада төҙөп алайым тигәйнем, булманы. Саҡ ҡына эшләйҙәр ҙә, икенсе урынға күсә лә китәләр. Шулай ҙа уңайы сыҡҡанда йәштәр менән тәжрибә уртаҡлашырға, уларҙы тимер юлына эшкә ылыҡтырырға тырышып торам. Бригадир ҙа, мастер булып та килгәндәре бар, әрләмәйнитмәй генә эш айышына төшөнөргә ярҙам итеп, күтәрмәләп ебәрәм үҙҙәрен. Үҙем дә бригадир булып эшләп ҡараным, шунан кире баш тарттым. Ошо иң юғары 6-сы разрядлы монтажлаусы булыу ҙа еткән, тинем.

**▸ Һеҙҙең эштә иң төп сифат ниндәй?**

- Егеттәргә һәр ваҡыт уяу булығыҙ, алдығыҙҙы-артығыҙҙы ҡарап йөрөгөҙ, тип өйрәтәм. Тимер юлы хәүефле урын, уға ныҡ яҡын барырға ла ярамай: кеше поезд үткәндә унда оҙағыраҡ баҫып торһа, нисектер, арбап, үҙенең аҫтына тарта ла ҡуя ул. Юҡҡа ғына хәүефһеҙлек техникаһы буйынса ла 2 метрҙан да яҡын торорға ярамай. Иггибарлы булыуың үҙең өсөн дә, хеҙмәттәштәреңдең ғүмер имеңлеге өсөн дә бик әһәмиәтле сифат. Мәҫәлән, беҙҙең төркөмдә һәр ваҡыт береү сигналсы - ул башҡалар тимер юлында эш башҡарған арала ике яҡты ла яҡшы күҙәтеп торорға, поезд килеүен хәбәр итеп, эште туҡтатырға бурыслы. Шулай, тимер юлының торошон күҙәтеп йөрөгән һәр эшсенең иңенә оло яуаплылыҡ та һалынған, бер яңылышлыҡ булһа, бөтәбеҙ ҙә яуап бирергә тейешбеҙ. Сөнки быға меңәрләгән кеше ғүмере, тонна-тонна тауар теүәллеге бәйле. Мин инде бер ваҡытта ла эштән баш тартып торманым: сәғәт төнгө өс булһынмы, ҡар-ямғыр яуһынмы, эшкә сыға ла китә торғайным. Әле лә бер ҙә мах биргән юҡ, маҡтаулы ҡағыҙҙар, рәхмәт хаттары, почет грамоталары алып, "Почет таҡтаһы"нан төшмәй дәртләнеп эшләп йөрөйөм. Яҡшы хеҙмәтем өсөн "Тимер юл транспортында һөнәре буйынса иң яҡшыһы" званиеһы бирҙеләр. Тырыштарҙы күреп, күтәрмәләп торалар, шөкөр. Физәҡәрлектән тыш, үҙ эшеңдең айышына төшөнөп башҡарыу ҙа мөһим. Ә бороғға ҡушһа, борам, ҡушмаһа, теймәйем, тип кенә йөрөгән егеттәр тимер юлсы булып эшләй алмай.

**▸ Өс тиҫтәнән ашыу йылда ниндәй үҙгәрештәр булды?**

- Төрлө үҙгәрештәр булып тора инде ул. Элек 49-сы юл машинаһы станцияһында эшләгәндә эшкә электричка йөрөттө, халыҡ туп-тулы булыр ине. Хәҙер кеше шәхси транспортҡа күсеп бөттө, тиерлек. Хеҙмәт һаҡлау буйынса уполномоченный булғас, хеҙмәткәрҙәрҙең шәхси һаҡланыу сараларына ла ҙур һәм етди иғтибар бүленә, тип әйтә алам. Тимер юлдары ла таҙара, элек мазут күп була торғайны. Етәксебеҙ беҙгә модуль төҙөтөп, матур фонтан ҡуйҙырып ебәрҙе һәм барлыҡ уңайлыҡтары булған урында эшләйбеҙ. Һәр кемдең эшкә килергә күңеле төшөп торһон тип, гөлдәр ҙә үҫтерәм унда. Һуңғы йылдарҙа тимер юлда тауар, пассажир ташыу көмене тиһәләр ҙә, был артыҡ һиҙелмәне, шул уҡ тиерлек көсөргәнештә эшләйбеҙ.

**▸ Ә шулай ҙа нимә борсоуға һала?**

- Шул эшсе ҡулдар етмәүе инде. Ҡайһы саҡта: "Эх, егеттәр булһа, тиҙ генә ослар инек был эште", - тип әсенеп ҡуяһың. Халыҡ тимер юлында эшләүҙе, элекке кеүек, бик юғары баһалаһа ла, йәштәр араһында, әйтеүемсә, ҡара көс түгергә теләүселәр һирәк. Мин уларҙың ҡайһы берҙәрен аңлап та етмәйем ул хәҙер. Һәр береһендә кеҫә телефоны, 5 минутҡа туҡтаһалар ҙа шуны ҡулына ала һалып, ҡарай-уйнай һалып ебәрәләр. Ҡайһы саҡта түҙмәй, "Ял итегеҙ, исмаһам", тип әйтеп ысҡындырам үҙҙәренә. Берәүҙәренең ялы - тәмәке көйрәтеү. Был эште лә өнәп етмәйем: үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр ҙа тәмәке тартып ҡарағаным булманы. "Нимәгә ул һеҙгә?" - тиһәң, "Әллә, ылыҡтыра бит", - тип яуаплайҙар. Ошондай осраҡта тәрбиәләп тә алаһың инде иплап кенә. Оҙаҡ йылдар эшләгәс, артымда лайыҡлы алмаш ҡалыуын да күргем килә. Элегерәк эшкә, коллективҡа өйрәнеп китергә ярҙам иткән егеттәр менән күрешһәк: "Ана, беҙҙең уҡытыусыбыҙ килә", - тип һәр ваҡыт хөрмәтләп иҫәнләшеп, рәхмәт һүҙҙәрен еткереп торалар былай. Үҙемдең урынға ҡалдырам, разряд алырһың, тип торам әле лә, тик аныҡ ҡына береһенең дә ынтылышын һиҙмәйем.

**▸ Тимер юлында эшләгән йылдарҙа ниндәйҙер ғәҙәттән тыш хәлдәр булдымы?**

- Булғылаһы, юҡ тип әйтә алмайым. Әммә барыһы ла тиерлек, үҙем өсөн дә, хеҙмәттәштәрем өсөн дә, яҡшы тамамланып торҙо. Зөйәк - Айғыр араһында тимер юлын яңыртҡанда, мәҫәлән, бик ҡатмарлы булғайны эшебеҙ. Юл ҡапыл борола, техника рельстан шылып төшөп китмәүен дә контролдә тоторға кәрәк, башҡаһын да. Бер заман Лощинная станцияһында тимер юлы аҫтынан газ торбаһы һуҙыр өсөн соҡор ҡаҙа инеләр. Ял көнө ине, мин дежурҙа һәм үҙемә тәғәйен участкаларҙы күҙҙән үткәреп йөрөйөм. Етәкселәре менән газовиктарҙың эшен күҙәтеп торһаҡ, бер мәл былар ҡаҙған тапҡырҙан тимер юлы аҫтынан ер убылып төштө лә китте. Тиҙ арала ике йүнәлештә лә шунт ҡуйып, ул саҡта баш инженер Савельевҡа шылтыраттым. Шулай ваҡытында поездарҙы туҡтатыуым өсөн ҡул ҡыҫып маҡтаны аҙаҡ. Эштә үҙеңдән кәрәкле булыуыңды тойоуҙан да мөһиме юҡтыр хеҙмәт кешеһенә.

**▸ Тимер юлы эшсәндәренең хеҙмәт баҫҡысынан юғары күтәрелеү өсөн ниндәй мөмкинлектәре бар? Белемеңде ҡайҙа камиллаштырырға була? Ғөмүмән, хеҙмәткәрҙәр өсөн ниндәйҙер ташламалы шарттар бармы?**

- Элек эшкә 2-се разряд менән алманылар, 3-сө разряд монтажлаусы булып эшкә төшкәйнем 49-сы юл машинаһы станцияһына. Тора-бара 4-се разряд алдым, был юл һалыу кранында иң юғарыһы иҫәпләнә. Ә Өфө тимер юлы дистанцияһына килгәс, үҙҙәре йүнәлтмә бирәп, Өфө тимер юл транспорты техникумында уҡытып алдылар.

Ә инде хеҙмәткәрҙәрҙең ташламаларына килгәндә, бында өҫтөнлөктәр күп: Рәсәйҙең теләһә ниндәй төбәгенә йылына бер тапҡыр барып ҡайтыу өсөн бушлай билет, ике йүнәлештә лә 150 километр алыҫлыҡҡа электричкала бушлай йөрөү хоҡуғы бирелә. Йәш белгестәрҙе бөтә яҡлап күтәрмәләп торалар, профсоюз йүнәлеше буйынса курорт-шифаханаларға, реабилитация үҙәктәренә юлламалар һ.б алырға була. Мин дә үҙебеҙҙең профсоюз комитетында торам һәм әле бына һаулыҡтарын нығытып ҡайтһындар тип, 14 көнлөк ялға исемлек йыябыҙ. Эш хаҡын даими күтәреп торалар, һуңғы тапҡыр быйыл 1 июндән арттырҙылар.

Бер танышым яңыраҡ: "Шулай йәпйәшһең, әлүктән нисек пенсиялаһың?" - тип аптырағайны. Ҡатыным: "Иртән тороп сығып киткәндән тышта, саф һауала ғына йөрөгәнгә инде", - тип фәстереп ебәрҙе. Ысынында иһә, пенсия йәше беҙҙә күтәрелмәне, элеккесә ир-егеттәр 55 йәштән, ҡатын-ҡыҙҙар 50 йәштән хаҡлы ялға сыға. Хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә ылыҡтырыуға йүнәлтелгән программаларҙы һанай китһәң, байтаҡ инде ул.

**▸ Эшкә башкөллө сумған ир-егет ниндәй ғаилә башлығы?**

- Шөкөр, ғаиләнән дә уңдым. Ҡатыным Ләлә Саях ҡыҙы менән тормош ҡороуыбыҙға быйыл ноябрь айында 35 йыл тулаҫаҡ. Ул да 15 йыл тимер юл үткәүелендә эшләне. Ике ул үҫтерҙек, береһен башлыҡүҙле иттек, бәхетле олатай-өләсәйбеҙ. Өлкән улыбыҙ Росгвардияла, кесеһе Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһендә эшләй. Шулай ҙа мин эш буйынса командировкаларға йышыраҡ йөрөгәс, малайҙарҙың тәрбиәһе күберәк ҡатыным иңенә төштө. Үҙем уҫал атай тәрбиәһен үткәс, малайҙарыма ҡаты булманым һәм ваҡыт барҙа гел артымдан йөрөтөп, эшкә күнектереп үҫтерҙем. Ҡатыным эшемде аңлап тора, ҡайтҡанда һәр ваҡыт өҫтәлдә йылы аш, эшкә ҡасан саҡырһалар ҙа һуҡранғанын ишеткәнем юҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ибраһим Ғәфүр улы менән әңгәмәләшкәндә уның эшсәнлеген генә түгел, ә бөтәһенә лә хөрмәтле мөнәсәбәттә булған баҫалҡы холоҡло булыуын да аңғарҙым. Тап бына шундай тыныс ҡына үҙ иңендәге бурыстарҙы үтәп йөрөгән эшсәндәр ҡулы менән беҙҙә бит был тормош! Ошо хаҡта йәмғиәтебеҙҙәге һәр кем белһен һәм аңлаһын ине. Ә беҙ эше менән үҙенә лә, иленә лә ҡот ҡундырып йәшәгән барлыҡ тимер юл хеҙмәтсәндәрен һөнәри байрамдары - "Тимер юлсы көнө" менән ихлас ҡотлайбыҙ!**

Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# БАШҠОРТТАРҘА АҒАС ЭШКӘРТЕҮ

**Халыҡ кәрәк-яраҡ эшләү өсөн борондан ағас ҡулланырға яратҡан. Төбәк урманға бай булғас, был материалды һәр кем иркен алып тотонған һәм эшкәртеүе лә еңел булғас, киң таралған.**

Тирмә ҡоролмаһы, өй кәрәк-ярағы, йорт йыһаздарын ағастан яһағандар. Ағас эшкәртеүҙең иң боронғо төрө - һырлау. Башҡортостанда эйәр, өҙәңге, ҡорал һауыттары, һауыт-һаба, урынағас деталдәре һәм бик күп башҡа әйберҙәр семәрләп эшләнгән. Йорттарҙы семәрләп биҙәү төҙөлеш традициялары үҫешенә бәйле булған.

Йорт һәм мәсеттәрҙең кәрнизе, йөҙләктәре, ишектәре, ҡапҡаларҙың уйымдары, бағандары һәм ҡапҡастары, өйҙәң ҡыйығы, тәҙрәләре семәрләнгән. Ағасты һырлап яһалған әйберҙәр тора-бара төрлө төҫтәргә буялып, сағыуыраҡ һәм семәрлерәк була барған. Иғтибарығыҙға башҡорттарҙа ағас эшкәртеүгә арналған БР Милли музейында һаҡланған өлгөләрҙән торған карточкалар йыйылмаһын тәҡдим итәбеҙ. Йыйылманы Р.А. Хафизова, А.Р. Хөснуллин төҙөгән, яуаплы мөхәррире тарих фәндәре докторы, РФ һәм БР атҡаҙанған фән эшмәкәре Р.З. Янғужин.



*Туҡыу станогы һоҫаларының шыма йөҙө семәр менән биҙәкләнгән*



*Шәмдәл*



*Йорт кәрнизе биҙәктәре. Көҙгө рамы*



*Бал ҡорто инәһе өсөн ҡумталар*



*Йоҡа ғына итеп яһалған еңел туҫтаҡ*



*Көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда яһалған ижауҙар ҡош һынын хәтерләтә, ә һаптары ҡош башы рәүешендә эшләнгән*



*Осоп барған ҡош һыны һәм ыршыш орнаменты менән биҙәлгән тәпәшәк тәпәндәрҙе Башҡортостандың таулы төбәктәрендә яһағандар*



*Еләк йыйыу өсөн ҡаяҙ*



*Эйәр ҡашы һәм өҙәңге*



*Ағасты зауыҡ менән эшкәртеү оҫталығы көнкүрештә ҡулланылған ҡоштабаҡ, ҡашыҡ, ҡалаҡ, ижау, тишекле сүмес кеүек ғәҙәти әйберҙәргә лә йоғонто яһаған*



*Тотош ағастан ырып, артҡы ҡашағаһын семәрләп яһаған эйәр һәм ағас өҙәңге*



*Туҙ сәңгелдәктәрҙе таҫма менән ҡаймалап, суҡлап, ат ҡылы менән йүрмәп биҙәгәндәр. Ҡалҡыуыраҡ баш яғына биҙәк һалғандар*

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЮҒАРЫ ОСҠАН...

## түбән ҡуныр

Ирҙең нәфсеһе - бер, ҡатындың нәфсеһе - туғыҙ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Батырлыҡтың шундай ҡапма-ҡаршы яҡтары ла бар: ғүмереңде лә бирергә ризаһың, шул уҡ ваҡытта йәшәү теләгең дә бик көслө.

**(Гилберт Честертон).**

Теләһә кем ғүмеребеҙҙе өҙөргә мөмкин, әммә үлеүҙән арындыра алмай.

**(Луций Сенека).**

Үлем нимә икәнен беҙ ҡайҙан беләйек, тормоштоң ни икәнен дә белеп булмай бит әле.

**(Конфуций).**

Ҡартаям тип үкенмә; ҡартлыҡ та һәр кемгә бирелмәй.

**(Огден Нэш).**

Был хәҡиҡәт күптән билдәле: икенсе урын биргәндәр һис һүҙһеҙ беренсе урынға лайыҡлы.

**(Джонатан Свифт).**

Профессионал - үҙенә оҡшамаған эште лә бынамын тигән итеп башҡарыусы.

**(Алистер Кук).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер малай йәшәгән. Уның бик хәтәр бер "сире" булған: теле бер туктауһыҙ, сама белмәй, һөйләнгән дә һөйләнгән.**

**- Был ниндәй яза булды әле беҙгә? Ҡасан тынысланып һәм беҙгә ял бирер был тел? - тип зар түккән тештәр.**

**- Һеҙҙең миндә ни эшегеҙ бар? - тип ярһыған тел. - Сәйнәүегеҙҙе белегеҙ ҙә, тыныгыҙ. Минең һеҙҙең менән бер уртаҡлығым да юҡ. Бәрәүегеҙгә лә минең эшкә ҡыҫылырға, етмәһә, ахмаҡ кәңәштәрегеҙ менән тығылырға юл ҡуймам!**

**Шулай итеп, малай урынлыға ла, урынһыҙға ла гәп һатҡан. Ә тел, мәғәнәһенә үҙе лә төшөнмәҫтән, туктауһыҙ матур-матур һүҙҙәр сәсеүенән кинәнгән. Бер ваҡыт малай һүҙ һөйләү менән шул тиклем мауығып киткән, хатта ниҙелер яңылыш әйтеп, ауыр хәлгә ҡалғанын да аңламай ҡалған. Бәләнән ҡотолоу өсөн ул теленә күрәләтә ялған һүҙ әйтергә юл ҡуйған. Шул саҡта тештәрҙең дә түҙемлеге шартлаған һәм улар телде шул тиклем нык итеп ҡыҫып алған, тел хатта ҡанап киткән. Теле ауыртыуҙан да, оялышынан да илап ебәргән малай. Бына шунан алып тел үҙен бик һаҡ тота башлаған, малай ҙа ниндәйҙер һүҙ әйтер алдынан ике тапҡыр уйлап ала торған булған..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99, 246-03-24**
**Матбуғат таратыу** **246-03-23**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 844